ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 декабрь (аҡъюлай) 2025

№50 (1194)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡоролтай ҡоронда



3

Башҡортостан конституцияһы тарихынан



6

"Дөрөҫ" кеше булырға түгел,

ә дөрөҫ йәшәргә ынтылам...



8-9

"Сибай, тын ал!"



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!** Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл бөгөн: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамлана. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.*

***Мөхәрририәт.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

### Рәсәй Президенты В. Путин "Күп балалылыҡ нормаға әйләнергә тейеш", тип билдәләне. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары 21 декабрҙә Ишле ғаилә көнөн булдырыу хаҡында закон ҡабул итте. Был хаҡта фекерегеҙ?



*Дәүләкән ҡалаһынан күп балалы Ҡорманаевтар ғаиләһе.*

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:*** Татыулыҡ һәм һөйөү нуры балҡып торған күп балалы ғаилә - ҙур бәхет ул. Бөгөн илебеҙҙә демографик хәл менән бәйле мәсьәлә мөһим йүнәлештәребеҙҙең береһе, көн үҙәгендәге уртаҡ бурыс. Демография мәсьәләһен уңышлы хәл итеү бер ғаиләгә генә ҡайтып ҡалмай, ул йәмәғәтселек, власть органдарының күп балалыҡ идеяһын таратыу һәм пропагандалау эшенә лә бәйле, сөнки был беҙҙең һәм республикабыҙ киләсәгенең күрһәткесе. Күп балалы ғаиләләргә бик күп төрлө дәүләт ярҙам саралары менән бер рәттән, уларҙы күтәрмәләү, ихтирамлау, наградалар тапшырыу, бүләкләү кеүек матур традицияларыбыҙ йәшәп килә. Был йыл буйына ла дауам итә, шул уҡ ваҡытта декабрь аҙаҡтарында, Яңы йыл тантаналары алдынан уларҙы йыйып, ғаилә ҡиммәттәре, тыуған йорт йылыһы сағылышы булған ошо байрам менән ҡотлау, "Йыл ғаиләһе" конкурстары үткәреү матур ғәҙәткә ингән. ***Шуға күрә лә Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тап ошо көндәрҙең береһен - 21 декабрҙе Башҡортостанда яңы рәсми байрам - Ишле ғаилә көнө тип билдәләү хаҡында закон ҡабул итте лә инде. Күп балалы ғаилә көнөн булдырыу ғаилә институтын нығытыуға, традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлауға һәм күп балалыҡты пропагандалауға булышлыҡ итәсәк.*** Әсәлек, балалыҡ һәм ғаиләләрҙе, бигерәк тә күп балалыларҙы, яҡлау һәм ярҙам күрһәтеү һәр дайым Рәсәй Хөкүмәтенең мөһим бурыстарының береһе булып ҡаласаҡ; күп балалыҡ нормаға һәм йәшәү рәүешенә әйләнергә тейеш, тигәйне яңыраҡ РФ Президенты Владимир Путин үҙенең сығыштарының береһендә. Һәм, ысынлап та, яңы байрам Башҡортостан календары битендә тормошобоҙҙо рухи-әхлаҡи йәһәттән байытып, балҡытып ебәреүсе күренекле даталарҙың береһенә әйләнәсәк, тип ышанам.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ




# БИК ШӘП БҮЛӘК ТӘ УЛ!

"Бәйләнештә" биттәрендә йыш ҡына кескәйҙәрҙе балалар баҡсаһына йөрөтә башлаһаҡ, русса һөйләшә алмаясаҡ, сөнки өйҙә туған телдә аралашабыҙ, тип борсолоп яҙыусы кешеләргә өндәшкем килә: афариндар, өйөгөҙҙә әсә телендә һөйләшеүегеҙҙе дауам итегеҙ һәм һис борсолмағыҙ, балағыҙ баҡсаға бармаҫ борон уҡ барыбер русса беләсәк, сөнки Үҙәк телевидениенан йәнһүрәттәр ҡарай, йырҙар тыңлай, ә был уларға бик яҡшы "дәрес" - тиҙ генә отоп та алалар. Баланың мөхитен тик бер төрлө телмәр менән генә сикләү мөмкин дә түгел, күберәк тел белгән һайын, унын зиһене, хәтере үҫешә. Кемдәрҙер 3-4 йәшлек балаһына ҡытай, инглиз телдәрен өйрәтеп маташа. Был да һәйбәт, тик туған телен генә онотоп китмәһендәр.

Ә бының өсөн өйҙә мотлаҡ туған телдә нәшер ителеүсе гәзит-журналдар булырға тейеш, тип инанғанмын, сөнки өлкән ейәнемде шулай тәрбиәләнек. Ул әле лә миңә таҙа башҡорт телендә "Киске Өфө" гәзитен ҡысҡырып уҡый. Икенсе яҡтан, мин уны бер аҙға булһа ла смартфон-ноутбугынан ял итһен өсөн дә шулай ҡушам, сөнки таныш күҙ табибы һуңғы ваҡыт күреү һәләтенең насарланыуына зарланып килеүсе үҫмерҙәр һәм йәштәрҙе күп ҡабул итеүе хаҡында һөйләгәйне.

Үҙем дә ялыҡтым был телефон менән интернеттан. Ысынлап та, иртәнсәк тороуға, күҙҙәр ҡыҙарып, сүп төшкәндәй ышҡылып йөҙәтә. Етмәһә, интернет йыш һүнеп йә оҙаҡ көйләнеп тора башланы. Ә инде бөтәһенән дә бигерәк мине үҙебеҙҙең туған мөхит хәл-әхүәле, яңылыҡтар һәм башҡа хәбәрҙәр нык ҡыҙыҡһындыра. "Киске Өфө"нө һайлауым да тикмәнән түгел, унда республика, шулай уҡ баш ҡалабыҙ Өфө хәбәрҙәре тулы һәм уҡымлы итеп бирелә. Гәзитебеҙҙең "Тарихнамә", "Заман башҡорто", "Ҡомар", "Балаңа уҡы!", шулай уҡ башҡа рубрикалары ла күңелемә ятышлы һәм яратып уҡыйым. Әйткәндәй, күптән түгел киләһе йылға "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырып, әхирәтемде лә ифрат ҡыуандырҙым әле. Иң шәп бүләк тә икән ул "Киске "Өфө"!

**Мәҙинә ШӘЙӘХМӘТОВА,
педагогия хеҙмәте ветераны.
Өфө ҡалаһы.**

12+

ҠЫҪҠАСА

# КАНИКУЛ НИСӘ КӨН?

**Һуңғы ваҡытта киң мәғлүмәт сараларында һәм интернетта уҡыусыларҙың ҡышҡы каникулдары тураһында төрлө мәғлүмәт баҫылып сыҡты.** Башҡортостандың Мәғариф министрлығында, ниһайәт, был мәсьәләгә асыҡлыҡ индерҙеләр. "1-11-се класс уҡыусылары өсөн ҡышҡы каникулдар 2025 йылдың 31 декабренән 2026 йылдың 11 ғинуарына тиклем дауам итә. Балалар ял итеп һәм яңы көс туплап, дүшәмбе, 12 ғинуарҙа, йәнә парта артына ултыра", - тине Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин. Ул шулай уҡ ата-әсәләргә был осорҙа балаларҙың хәүефһеҙлегенә етди иғтибар бүлеүҙәрен һорап мөрәжәғәт итте. Ә уҡыусыларға был көндәрҙе файҙалы итеп үткәрергә: саф һауала күберәк йөрөргә, ҡыҙыҡлы китаптар уҡырға, ғаилә менән ваҡыт үткәрергә һәм мәҙәни сараларға йөрөргә кәңәш бирҙе.

✔ **Башҡортостанға, шул иҫәптән Рәсәй Федерацияһының 18 субъектына йыл аҙағына тиклем социаль газ үткәреү программаһына өҫтәмә аҡса бүленә.** Был хаҡта федераль Хөкүмәттә хәбәр иттеләр. Төбәктәр был аҡсаны йорттарҙы газ селтәрҙәренә тоташтырыуға субсидиялар өсөн файҙалана ала. Бындай ярҙамға күп балалы ата-әсәләр һәм аҙ килемле граждандар, МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары, I төркөм инвалидтары, инвалид балаларҙы ҡараған кешеләр, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары хоҡуҡлы. Йәғни улар өйгә газ үткәреү өсөн 100 мең һумдан ашыу субсидия аҡсаһы алырға хоҡуҡлы. 2025 йылда 55 төбәктә социаль газ үткәреү программаһын тормошҡа ашырыу өсөн бөтәһе 1 миллиард һум йүнәлтелгән. Был программаны ил Президенты 2021 йылда иғлан итте. Башҡортостан ошо проекттың лидеры булып тора.

✔ **Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһын биреү буйынса комиссия 2023 һәм 2024 йылдарҙа донъя күргән йәш ижадсыларҙың эштәрен баһаланы.** Шулай итеп лауреаттар: Тайыпов Дамир Рәфис улы - "Юғары һөнәри ҡаҙаныштары һәм вокал сәнғәте өлкәһендә башҡорт музыкаһын пропагандалаған өсөн"; Мусина Заһиҙә Хакимйән ҡыҙы һәм Урманшина Рәзинә Ғилман ҡыҙы - Кемел Тоҡаевтың "Серле эҙ" китабына художестволы тәржемә һәм заман милли прозаһы үҫешенә индергән өлөштәре өсөн"; Аралбаев Хәбир Фәттәх улы - "Башҡорт халыҡ-сәхнә бейеүе өлкәһендә солист булараҡ хеҙмәте һәм башҡорт хореография сәнғәтен Башҡортостандың милли мираҫы булараҡ үҫтергәне өсөн".

✔ **Республикала күп балалыларға бушлай хоҡуҡи ярҙам тураһында закон ҡабул ителде. Документҡа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған.** Шарттары шундай: уларҙың кәмендә өс балаһы булырға тейеш, ярҙам өлкән ҡыҙына йәки өлкән улына 18 йәш, йәки, көндөҙгө бүлектә уҡыһалар, 23 йәш тулғансы күрһәтелә. Ишле ғаиләләр бындай ярҙам менән торлаҡ хоҡуҡтарын яҡлау өсөн, эш биреүсе менән бәхәстәрҙә, пенсия һәм пособие мәсьәләләрен хәл иткәндә һәм башҡа проблемалар килеп тыуған осраҡта файҙаланырға мөмкин. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостанда күп балалы ғаиләләр өсөн махсус байрам булдырылды. Уны 21 декабрҙә билдәләйҙәр.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БЕРҘӘМЛЕК - ТӨРЛӨЛӨКТӘ




**11 декабрҙә Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының 30 йыллығына арналған халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция уҙҙы. Сараға абруйлы ҡунаҡ итеп Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров саҡырылғайны.**

Сара алдынан Радий Фәрит улы башҡорт шағиры һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабич һәйкәленә сәскәләр һалды. Һәйкәл 2019 йылдың июнендә асылды. Уның авторы - Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим һәйкәле өҫтөндә эшләгән скульптор, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Андрей Ковальчук. Монументтың бейеклеге - 6 метрға яҡын. Һәйкәл бронзанан ҡойолған.

Конференцияла сығыш яһап, республика Башлығы шулай тине: "30 йыл элек ойошма бик ҙур, ҡатмарлы юл үтте. Ошо 30 йыл эсендә хәҙерге Рәсәйҙең бөтә тарихы сағыла: юғары күтәрелеүҙәр, түбән төшөүҙәр, ҡатмарлыҡтар, хаталар, еңеүҙәр - беҙҙең ойошма эшендә быларҙың барыһы ла булды. Утыҙ йыл буйына беренсе съездан алып йөгонтоло көскә эйә ойошмаға тиклем ҙур юл үтелде, бөгөн ул Рәсәйҙең 36 төбәгендә һәм донъяның 28 илендә йәшәгән ватандаштарыбыҙҙы берләштерә. Башҡорт ҡоролтайы башҡорт милләтенә ышаныслы рәүештә, абынмай алға барырға мөмкинлек биргән тап шундай көс булып сыҡты. Моғайын, был халҡыбыҙҙың рухи көсөлөр. Ауыр ваҡытта беҙ берләшәбеҙ һәм иң яҡшы сифаттарыбыҙҙы күрһәтәбеҙ. 1812 йылғы Ватан һуғышы, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла шулай булды һәм хәҙер, МХО барған ваҡытта, башҡорттар башҡа халыҡтар менән бергә яу яланында иҫ киткес ҡыйыулыҡ, ҡаһарманлыҡ күрһәтә".

Радий Хәбиров билдәләүенсә, хәҙерге көндә лә дошмандар берҙәмлеккә, халыҡтар дуҫлығына, милли лидер тирәләй, ил тирәләй берләшеүенә ҡаршы торорға тырыша. "Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ мәғлүмәттәренә ярашлы, Рәсәй Федерацияһында иң күп мәғлүмәт һөжүме тап милли республикаларға йүнәлтелә. Башҡортостан мәғлүмәт һөжүмдәре буйынса беренсе урынды биләй. Ошондай ауыр ваҡытта теләктәшлек, ҡаршы тороуға һәләтле икәнен күрһәткән башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәренә ҙур рәхмәт", - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығы Рәсәй Президентының 2026 йылды Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылы тип иғлан итеүен хәтергә төшөрҙө: "Минә Валентина Ивановна Матвиенконың: "Берҙәмлектә - көс, ә берҙәмлек - төрлөлөктә" тигән һүҙҙәре бик оҡшай. Һеҙ барығыҙ ҙа - башҡорт милләтенең һәм Рәсәй дәүләтенең ысын патриоттары".

# МӘСКӘҮҘЕҢ ЮҒАРЫ БАҺАҺЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров эш сәфәре менән Асҡын районында булды һәм Үҙәк район дауаханаһының яңы поликлиникаһын асыуҙа ҡатнашты.**

Яңы медицина учреждениеһының эш башлауына стартты видеобәйләнеш режимында Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Татьяна Голикова һәм илдең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко бирҙе. "Бөгөн беҙ ил буйынса дүрт яңы медицина учреждениеһы асабыҙ. Был ил Президенты иғлан иткән төп милли маҡсатыбыҙҙы тормошҡа ашырыуға - халыҡты һаҡлауға, һаулыҡты нығытыуға, кешеләрҙең именлеген хәстәрләүгә, ғаиләләргә ярҙам итеүгә тағы бер ҙур өлөш", - тине Татьяна Голикова.

- Башҡортостанда милли проекттар муниципалитеттар халҡы тормошон ҡырҡа үҙгәртә. Бөгөн Асҡын районында сменаһына 250 кешегә иҫәпләнгән заманса поликлиника асабыҙ. Был объект һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын яңыртыу программаһы сиктәрендә сафҡа индерелә. Ул райондың 17 меңдән ашыу кешеһе өсөн ысын сәләмәтлек үҙәгенә әүерeләсәк. Радий Фәрит улы заманса объекттар тәҙәү йәһәтенән, үҙенә күрә, идеолог булып тора. Коронавирус пандемияһы ваҡытында "Курай сәскәһе" тип аталған инфекция үҙәктәре Рәсәй Федерацияһының башҡа субъекттарында ла тәҙәлдә. Бөгөн дә республика - милли проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа нығ терәк ул, - тине үҙ сиратында Михаил Мурашко.

Башҡортостан Башлығы республика башланғыстарына булышлыҡ иткәне өсөн Рәсәй Хөкүмәтенә һәм илдең Һаулыҡ һаҡлау министрлығына рәхмәт белдерҙе.

# ТАРИХИ-МӘҘӘНИ ҮҘӘКТӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров эш сәфәре менән Тәтешле районында булды һәм Яңы Тәтешләгә Удмурт тарихи-мәҙәни үҙәген, күп профилле полилингваль мәктәпте ҡараны, район етәкселәре һәм йәмәғәтселәр менән осрашты.**

Яңы Тәтешле ауылындағы Удмурт тарихи-мәҙәни үҙәге 1988 йылда тәҙәлгән ауыл клубында урынлашҡан. 2023 йылда Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса бинала капиталь ремонт башлана. Реконструкциянан һуң быйыл көҙ тарихи-мәҙәни үҙәк яңынан үҙ ишектәрен асҡан.

Радий Хәбиров яңыртылған һөнәрселек үҙәген, удмурт йортон, музей экспозицияһын ҡарап сыҡты, методика кабинеты һәм заманса күп функциялы китапхана эшмәкәрлеге менән танышты. Клубта Башҡортостан Башлығы удмурттарҙың милли-мәҙәни үҙәге ағзалары, ауыл биләмәләре башлыҡтары, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, мәғариф учреждениелары вәкилдәре менән осрашты. "Бынан бер нисә йыл элек һеҙҙең менән осрашҡанда реконструкция тураһында килешкәйнек. Һөҙөмтәлә яҡшы ғына тарихи-мәҙәни үҙәк барлыҡҡа килде. Эргәлә генә удмурт теле тәрән өйрәнелгән полилингваль мәктәп эшләй. Республикала йәшәгән халыҡтарҙың мәҙәниәтен, йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлау бик мөһим. Был беҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе", - тине Радий Хәбиров.

2026 йылдың февралендә Яңы Тәтешле "Дуҫлыҡ күпере" удмурт мәҙәниәте фестивален ҡабул итә, ә апрелдә Удмурт тарихи-мәҙәни үҙәге нигеҙендә Башҡортостан удмурттарының съезын уҙғарыу планлаштырыла.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаровтың дипломына лайыҡ булды. Дипломды Республика Башлығы Радий Хәбировҡа БР буйынса баш федераль инспектор Александр Окатьев тапшырҙы. "Ғәйәт ҙур эш башҡарылған. Барығыҙға ла оло ихтирам йөҙәнән рәхмәт әйтәм һәм был иҫтәлекле билдәне республика Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировҡа тапшырам", - тине Александр Окатьев Республика менән идара итеү үҙәгендә барған Хөкүмәт оператив кәңәшмәһендә.

✔Һауа шарттарына бәйле республикала йыш ҡына транспорт хәрәкәте сикләнә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә трассаларҙа хәрәкәтте сикләүгә бәйле хәлдәрҙә яҡшы эшләргә, ваҡытлыса йылыныу пункттары асырға, ярҙам күрһәтергә ҡушты. Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова республиканың автомобиль юлдарында көн һайын 900-ҙән ашыу берәмек, шул иҫәптән федераль әһәмиәттәге юлдарҙа 210-дан ашыу берәмек техника эшләүе хаҡында хәбәр итте.

✔Республика Рәсәйҙең фәнни-технологик үҫеш милли рейтингы һөҙөмтәләре буйынса 7-се урынды алды. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республиканың фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Мостафина белдерҙе. Уның билдәләүенсә, Башҡортостан 2024 йыл менән сағыштырғанда бер баҫҡысҡа юғарыраҡ күтәрелде. "Республиканың кәмендә өс лидер иҫәбенә инеүе көтәбеҙ - бының өсөн беҙҙә бөтә нәмә лә бар", - тине Радий Хәбиров.

✔Республика Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары вазифаһына Данияр Абдрахманов тәғәйенләнде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо турала белдерҙе. Данияр Абдрахманов Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры булды, философия фәндәре кандидаты, доцент. Шулай уҡ 2023 йылдың 13 декабрендә Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы рәйесе итеп һайланды.

✔Йәштәрҙе эшкә урынлаштырыуҙа иң алдыңғы тәжрибәләр буйынса Бөтә Рәсәй конкурсының "Икеләтә өҫтөнлөк: мәғариф һәм бизнестың үҙ-ара эш итеүенең һөҙөмтәле моделе" номинацияһында "ПОЛИЭФ" акционерҙар йәмғиәте икенсе урынға лайыҡ булды, тип хәбәр итә республиканың киң мәғлүмәт саралары. Төрлө номинацияларҙа шулай уҡ илдең 77 төбәгенән 1055 дәғүәсе араһынан өсөнсө урынды "Мәләүез минераль ашламалары" һәм "Дәүләкән ит ярымфабрикаттары комбинаты" алған.

*✔ Уларҙың төп бурысы - халыҡ менән власть араһында аралашсы ролен үтәп, теге йәки был күренештәр, хәл-ваҡиғалар, ғәмәлдәр тураһындағы фекерҙәрен бар йәмғәтселеккә белдереп тороусы бер трибуна булыуға өлгәшеү.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# ҠЫШ БАБАЙЛЫ ТАМАШАЛАР

**Быйыл ноябрь айында "Рәсәй тимер юлы" тарафынан махсус әҙерләнгән Ҡыш бабай поезы ил буйлап бишенсе юбилей сәйәхәтенә юлланғайны. Әкиәти поезд 19 ноябрҙә Владивостокта старт алды, Ҡыш бабай илдең 70 ҡалаһында булып, Бөйөк Устюгҡа 2026 йылдың 11 ғинуарында барып етәсәк.**

14 декабрҙә Ҡыш бабай поезы Башҡортостанға килеп етте. Тәүгеләрҙән булып Яңы йыл тылсымсыһын Өфө вокзалында ҡаршы алдылар. Бында Яңы йылдың төп тылсымсыһының күсмә резиденцияһы алты сәғәт ҡунаҡ булды.

Хәбәр итеүҙәренсә, был ваҡыт эсендә сара майҙансығын 11,8 мең кеше килеп күргән.

Аниматорҙар һәм артистар ҡатнашлығындағы байрам программаһы Өфө тимер юл вокзалы платформаһында, вокзал алдындағы майҙанда һәм вокзал комплексының икенсе ҡатында ойошторолдо. Бөйөк Устюгтан килгән Ҡыш бабай байрам ҡунаҡтарын етеп килгән Яңы йыл һәм Раштыуа менән ҡотланы. Ҡала кешеләре әкиәт поезы фонында тамаша геройҙары менән истәлеккә фото төшөтөләр, Ҡыш бабайҙың күсмә резиденцияһын - "Әкиәт ауылы", "Курсаҡ театры", "Ҡар батшабикәһе" вагондарын, сувенирҙар һатылған "кибет-вагон", "буфет-вагон" һәм "ресторан вагон"дарҙы кереп күрҙеләр. Билет һатып алғандарға поезд эсендәге уйын һәм квестарҙа ҡатнашыу, Ҡыш бабай менән ҡабул итеү бүлмәһендә аралашыу һәм традицион татлы бүләктәр менән махсус программа ҡаралғайны.

"Ҡыш бабай поезы" Рәсәй тимер юлы проекты дүртенсе йыл рәттән республиканың төрлө ҡалаларында туҡталыштар яһап, байрам кәйефе бүләк итә. Үткән өс йылда уны иң кесеһенән алып олоһона тиклем 55 меңдән ашыу кеше ҡаршы алды. Бындай ваҡиғалар балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла ҡыуандыра, ғаиләләрҙе берләштерә һәм байрам кәйефе булдыра", - тип хәбәр итә БР-ның транспорт министры Любовь Минакова.

# ҠОРОЛТАЙ ҠОРОНДА

**Граждандар йәмғиәте институты - ул күп төрлө фекерҙәрҙе сағылдырыусы ойошма. Бөгөн Рәсәй Президенты кимәлендә лә, беҙҙең Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Фәрит улы тарафынан да граждандыҡ йәмғиәте институтының эшмәкәрлеге һанлана, ҡабул ителә. Тимәк, был институт вәкилдәре яңғыратҡан төрлө тәҡдимдәр ҙә, идея-фекерҙәр ҙә иғтибар үҙәгенә алына. Әле генә булып үткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының утыҙ йыллығы айҡанлы ойошторолған конференцияла ла, Башҡортостан Башлығы сығыштарында был фекер тағы ла аныҡлыраҡ итеп һыҙыҡ өҫтөнә алынды.**

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, уның райондарҙағы һәм ҡалаларҙағы ойошмалары, шулай уҡ Өфө башҡорттары ҡоролтайы ла, граждандар йәмғиәте институтының иң үҙенсәлекле бер өлгөһө һанала. Уларҙың төп бурысы - халыҡ менән власть араһында аралашсы ролен үтәп, уның талаптарын, теге йәки был күренештәр, хәл-ваҡиғалар, ғәмәлдәр тураһындағы фекерҙәрен бар йәмғәтселеккә, етәкселәргә лә белдереп тороусы бер трибуна булыуға өлгәшеү. Был көндәрҙә булып үткән Өфө ҡала округы башҡорттары ҡоролтайы ултырышында ҡатнашыусы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Юлдаш Йосопов, Өфө башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе, Өфө киң профилле һөнәри колледж директоры Сынтимер Баязитов та ошо бурыстарҙы барланы, уларҙы тормошҡа ашырыу юҫығындағы планниәттәр тураһында һөйләне, кәңәш-тәҡдимдәре менән уртаҡлашты.

Сарала баш ҡаланың ете районы башҡорттары ҡоролтайҙары рәйестәре йыл буйы эшләнгән эштәренә йомғаҡ яһаны. Уларҙың эшмәкәрлегә, билдәле, үҙҙәренең районында башҡорт мөхитен булдырыуға, башҡорт гимназия-лицейҙары, мәҙәниәт усаҡтарында төрлө саралар ойоштороуға, конкурс-бәйгеләрҙә ҡатнашыуға, милләттәштәрҙе туған тел, туған мәҙәниәт тирәләй берләштереүгә ҡайтып ҡала. Һәм улар был бурысты ярайһы ғына кимәлдә тормошҡа ашыра килә.

Үҙенең сығышында Гөлләриә Рәфҡәт ҡыҙы районлар ҡоролтайҙарына бренд сараларын айырым тематикаға бағышлап, киңерәк масштабта, күберәк халыҡты йәлеп итеп ойоштороу заурлыҡын да билдәләне. Мәҫәлән, Ленин районы башҡорттары ҡоролтайына - мәҙәниәт йүнәлешендә, Совет районына - спорт, Октябрь районына - йәштәр һәм балалар, Дим районына - йәш башҡорт ғаиләһе, Орджоникидзе районына - көмөш йәштәгеләр, Киров районына - мәғариф, Калинин районына эшҡыуарлыҡ буйынса саралар ойоштороу йөкмәтелде. Һәр район үҙенә тәғәйен йүнәлеш буйынса саралар планы эшләй, тип билдәләнде. Ҡоролтайҙар шулай уҡ республика һәм Рәсәй кимәлендә үткәрелгән байрамдарҙа (Башҡорт теле көнө, Милли кейем көнө, Ғаилә көнө һ.б.), һабантуйҙарҙа ла башҡорт телен яңғыратырлыҡ, башҡорт мәҙәниәтен балҡытырлыҡ үҙ программаһы менән ҡатнашырға тейеш, тип тә әйтелде.

Шулай итеп, был йыйылыш та, Өфө башҡорттары ҡоролтайы баш ҡалала йәшәгән бар милләттәштәр өсөн дә уртаҡ кәңәш, фекер алышыу ҡоро булырға, һәр кем дөйөм мәнфәғәттәребеҙҙе иҫтә тотоп, был йәмғәт ойошмаһына теләктәшлек белдереп, ярҙам итешеп, уның эшмәкәрлегенә көс-ҡеүәт өҫтәп торорға тейеш, тип йомғаҡланды.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**



ҠЫҪҠАСА

# ҺАЛЫМЫҢДЫ ҠАЙҒЫРТ!

**12 декабрҙә Башҡортостанда "Яңы йылға - һалым буйынса бурысһыҙ" акцияһы старт алды. Ул 28 декабргә тиклем бара.** Республиканың барлыҡ ҡалаларында тиерлек күсмә һалым офистары асыла һәм федераль һалым хеҙмәте идаралығы хеҙмәткәрҙәре бурыстар тураһында белергә һәм уны түләргә ярҙам итә, шулай уҡ төрлө һорауҙарға яуап бирә. Сауҙа үҙәктәрендәге күсмә офистарҙың эш графигын 8-347-215-10-70, өҫтәмә 55-55 телефонына шылтыратып белергә мөмкин. Офистар Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Салауатта, Ишембайҙа, Белоретта, Октябрьскийҙа, Нефтекамала, Туймазыла, Бәләбәйҙә, Учалыла, Сибайҙа, Ҡырмыҫҡалыла эшләй.

✔ **Өфөнән Вил Ғабдуллин ветерандар араһында хәрби сәнғәт буйынса 50-се тапҡыр донъя чемпионы булды.** 4 декабрҙән 8-нә тиклем Рәсәйҙең йыйылма командаһы Мысырҙа алыш сәнғәте буйынса донъя чемпионатында сығыш яһаны. Команда 24 алтын миҙал яуланы. Еңеүселәр араһында - Дағстан, Һарытау һәм Өфө спортсылары. 64 йәшлек яҡташыбыҙ, Рәсәйҙең Рекордтар китабы рекордсмены Вил Ғабдуллин ҡорал менән биш бүлектә сығыш яһаны һәм биш алтын миҙал алды. Был ҡаҙаныш уға алыш сәнғәте буйынса 50-се тапҡыр донъя чемпионы булырға мөмкинлек бирҙе. Вил Ғабдуллин - кикбоксинг буйынса Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры, алты тапҡыр Рәсәй чемпионы, дүрт тапҡыр Рәсәй кубогы еңеүсеһе, ете тапҡыр халыҡ-ара ярыштар чемпионы, ике тапҡыр Европа чемпионы. Шулай уҡ спортсы - ГТО илсеһе.

✔ **Башҡортостанда яңы йыл байрамдарында, 31 декабрҙән 11 ғинуарға тиклем, янғынға ҡаршы махсус режим индерелә. Ул 2025 йылдың 31 декабренән 2026 йылдың 11 ғинуарына тиклем ғәмәлдә ҡала.** Күрелгән сараларҙың төп маҡсаты - Яңы йыл һәм Раштыуа байрамдары осоронда халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү һәм янғын хәүефен кәметеү. Янғын хәүефһеҙлеге талаптарына тап килмәгән объекттарҙа күмәк саралар үткәреү; махсус урындарҙан ситтә усаҡ яғыу, фейерверк аттырыу тыйыла. Был осорҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтар икеләтә арта. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты белгестәре янғын хәүефен кәметеү һәм кешеләрҙең һәләк булыуына юл ҡуймау өсөн республика халҡын һәм ҡунаҡтарын ошо талаптарҙы үтәргә саҡырҙы.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Күренекле опера йырсыһы, Башҡортостан егете Илдар Абдразаҡовҡа илебеҙҙең музыка сәнғәтен үҫтереүҙәге ҙур ҡаҙаныштары һәм күп йыллыҡ емешле хеҙмәте өсөн Рәсәйҙең халыҡ артисы тигән маҡтаулы исем бирелде. Рәсәй Президенты Владимир Путин ошо турала указға ҡул ҡуйған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Илдар Әмир улы - Севастополь дәүләт опера һәм балет театрының художество етәксеһе, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы.

✔Мәскәүҙә XIII "Рәсәй тәрбиәселәре" Бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы үтте. Конкурс һынауҙары йомғаҡтары буйынса Стәрлетамаҡтың 70-се балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Алһыу Әлим ҡыҙы Саттарова "Йәш профессионалдар" номинацияһында еңеүсе булды һәм 2-се дәрәжә диплом менән бүләкләнде. Стәрлетамаҡ хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, конкурста ил төбәктәренән 4 000-дән ашыу педагог ҡатнашты. 77 педагог лауреат булды һәм 12 номинацияла I, II һәм III дәрәжә еңеүселәр дипломын алды.

✔Башҡортостандың муниципаль берәмектәр советы мәғлүмәте буйынса, Бәләбәй районы Бәләбәй ҡала биләмәһе советының сираттағы ун дүртенсе ултырышында Татьяна Зубова менән контрактҡа ҡул ҡуйылды. Депутаттар тәҡдим ителгән кандидатураны бер тауыштан хупланы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Татьяна Зубова 2025 йылдың апреленән Бәләбәй ҡалаһы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарҙы. 2024 йылдан алып хакимиәт башлығы урынбаҫары - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ бүлеге начальнигы булып эшләне.

✔19 декабрҙә дәүләт башлығы Владимир Путин тура эфирҙа уҙып барған йылға йомғаҡ яһай, журналистарҙың һәм халыҡтың һорауҙарына яуап бирә. Трансляция Өфө ваҡыты менән көндөҙгө сәғәт 2-лә башлана. "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары" программаһына 1,3 миллиондан ашыу мөрәжәғәт килгән. Был хакта уларҙы эшкәртеү менән шөғөлләнгән GigaChat нейроселтәре мәғлүмәттәренә һылтанма менән РИА Новости хәбәр итә. Мөрәжәғәттәр араһында "Социаль сәйәсәт", "Инфраструктура", "Дәүләт һәм йәмғиәт", шулай уҡ "Торлаҡ" кеүек темалар төп урынды биләй.

✔"Башҡортостан Республикаһында шәхси медицина эшмәкәрлеге тураһында" Законға үҙгәрештәр индерелде. "Шәхси клиникалар пациенттарға һаулыҡ һаҡлау министрлығының клиник күрһәтмәләре нигеҙендә медицина ярҙамын күрһәтеүҙе тәьмин итергә тейеш. Һүҙ клиник тәҡдимдәр менән танышыу мөмкинлегенән тыш, уларҙы көндәлек практикала мотлаҡ ҡулланылыуҙы тәьмин итеү тураһында бара. Был медицина ярҙамының хәүефһеҙлеген һәм табип хатаһын кәметеү мәсьәләһе булыр тора", - тине закон үҙгәрештәре тураһында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

✓ Ҡалала ғына түгел, ауыл ерендә лә хатта күп балалы ғаиләләргә ниндәйҙер ситнәтеү, кәмһетеүле мөнәсәбәт йәшәп килә. Йәнәһе, балалары күп икән, был, тимәк, етешһеҙ, проблемалы, аслы-туҡлы ғаилә. Был төптә дөрөҫ түгел.



"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ИШҠОЛОВ ҒӘТИӘТ АБДУЛЛА УЛЫ

Ғ.А. Ишҡолов - совет-фин һуғышында ҡатнашҡан яугир, Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк була. Өлкән лейтенант, үҙйөрөшлө артиллерия ҡоролмаһы (САУ) командиры, Советтар Союзы Геройы. Ул 1916 йылдың 15 июлендә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Федоровка районы) Яңы Яуыш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ата-бабалары - юрматы ырыуы башҡорттарынан. Ғәтиәт ауыл мәктәбендә уҡый, бик йәшләй ауыл хужалығы эштәрендә ҡатнаша. 1932 йылда тракторсылар мәктәбен тамамлай, 1935 - 1937 йылдарҙа Пугачев исемендәге совхозда тракторсы булып эшләй. Бөрө автомеханиктар мәктәбен тамамлағандан һуң, совхозға механик булып ҡайта.

1937 йылда Федоровка районы военкоматы уны Ҡыҙыл Армия сафтарына ебәрә. Элек тракторсы булған егеткә Харьков танк училищеһында уҡырға йүнәлтмә бирелә. Ике йылдан һуң ул үҙ теләге менән Фин һуғышына китә. 1940 йылда хәрби хеҙмәт мөҙҙәтен тултырып, тыуған яғына ҡайта һәм Бала Сытырман МТС-ында тракторсылар әҙерләү курсында уҡыта башлай. 1941 йылда партияға алына. 1942 йылдың февралендә Ҡыҙыл Армия сафтарында һуғышҡа инә.

4-се Украина фронтындағы 18-се армияның 1666-сы үҙйөрөшлө артиллерия полкында артиллерия ҡоролмаһы (САУ) командиры була. Чехословакияны азат итеүҙә ҡаһарманлыҡ күрһәтә: үҙенең экипажы менән 1944 йылдың 9 декабрендә беренселәрҙән булып Требишов ҡалаһынан көньяҡ-көнбайыштағы Челевце ауылына бәреп инә, ә 10 декабрҙә дошман позицияһына һөжүм яһағанда немецтарҙың ут нөктәләрен һәм байтаҡ ҡына һалдаттарын юҡ итә. Ошо ҡанлы бәрелештә ҡаһарман офицер Ғәтиәт Ишҡолов батырҙарса һәләк була.

Командованиеның заданиеларын өлгөлө үтәгәне һәм фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә күрһәткән батырлығы өсөн Ғәтиәт Абдулла улы Ишҡоловҡа үлгәндән һуң СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 24 мартында ҡул ҡуйылған Указы нигеҙендә Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Награда ҡағыҙында былай тип яҙылған: "Полктың 9-10 декабрҙә Чалока-Керестур районында алып барған һөжүм итеү барышында өлкән лейтенант Ишҡолов үҙенең установкаһы менән алдараҡ барған пехотаны уҙып китә һәм батареянан беренсе булып Чалокаға бәреп инә, үҙенең артынан килгән батареяға һәм уҡсы подразделениеларға юл аса. Дошмандың көслө ҡаплаусы артиллерия һәм миномет уты аҫтында иптәш Ишҡолов немец позицияларын атакалай. Был алыштарҙа уның установкаһы тарафынан дошмандың алты пулемёт нөктәһе, бер орудиеһы, бер миномёт батареяһы, 30 һалдаты юҡ ителә".

Ғ.А. Ишҡолов Чехословакияның Требишов ҡалаһынан көнбайыштағы Плехотице ауылында ерләнгән. Ғәтиәт Абдулла улы Ишҡоловтың исеме тыуған ауылындағы урамға бирелгән, уға бюст, мәктәп бинаһына мемориаль таҡташ ҡуйылған.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Рәсәй Президенты В. Путин "Күп балалылыҡ нормаға әйләнергә тейеш", тип билдәләне. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары 21 декабрҙә Ишле ғаилә көнөн булдырыу хаҡында закон ҡабул итте. Был хаҡта фекерегеҙ?***




***Рәсимә САФИНА, биш бала әсәһе, Өфө ҡалаһы:*** Миңә ғәжәпләнеберәк ҡараусы бер һеҙ генә түгел, сөнки ҡала шарттарында күп балалы ғаилә ҡайһы берәүҙәргә ғәҙәттән тыш күренеш булып тойола. Етмәһә, ҡалала ғына түгел, ауыл ерендә лә хатта күп балалы ғаиләләргә ниндәйҙер ситнәтеү, кәмһетеүле мөнәсәбәт йәшәп килә. Йәнәһе, балалары күп икән, был, тимәк, етешһеҙ, проблемалы, аслы-туҡлы ғаилә, тигәнерәк фекер өҫтөнлөк итә. Был төптә дөрөҫ түгел. Хатта хәҙер хурланған элекке совет замандында ла күмәк ғаиләләрҙең бөтәһе лә ундай тормош кимәленә төшмәне. Ә инде ысынлап та ундайҙар бөгөн дә бар икән, улар бит йыш ҡына урындағы властарҙың битарафлығы арҡаһында шундай хәлгә дусар ителә. ***Мәҫәлән, биш бала тәрбиәләүсе бер ғаилә башлығы ишле ғаиләне бер үҙенең эш хаҡына аҫрауы мөмкин булмағанлыҡтан, Себергә эшкә юллана, ә биш баланы ҡарау ҡатыны иңенә төшә. Хәҙер инде ғаилә башлығының эш хаҡы ҙур булыуға һылтанып, быларға балалар пособиеһы түләүҙән баш тарталар. Ҙур ғаилә өсөн ҙур фатир йә айырым йорт талап ителә, ә уларға торлаҡ сертификатын да оҙаҡ ҡына көтөргә тура килә.***

Ишле ғаиләләргә ҡарата бына шундай ваййымһыҙлыҡ факттары осрап ҡына тора. Әгәр уларҙың йәшәү шарттары урындағы етәкселектең иғтибар үҙәгендә булһа, күп балалылар үҙҙәре өсөн ҡаралған бөтөн ташламалар менән ҡаршылыҡһыҙ файҙалана алһа, ҙур, татыу, матур ғаилә ҡороп йәшәргә теләүселәр ауылда ла, ҡалала ла күберәк булыр ине, тип уйлайым. ***Ишле ғаилә көнө булдырыу - һәйбәт сара, һүҙ ҙә юҡ, ләкин ул календарҙағы йөҙәрләгән иҫтәлекле-күренекле даталар кеүек, эҙһеҙ генә йә формаль рәүештә үтеп китмәһен ине. Был датаның положение-тәртиптәре бармы, байрам үткәреүҙә ниндәй саралар ҡарала? Ишле ғаиләләргә был датаны үткәреүҙән берәй файҙа буласаҡмы? Ошо һәм башҡа ҡайһы бер һорауҙарға яуап алғы килә.***

Үҙемдең ғаилә хәленә килгәндә, былай зарланмайым. Балалар тиҙ генә үҫеп тә етә, бер-береһенә күҙ-ҡолаҡ, терәк булып, атаһы менән миңә ярҙам да итә башлайҙар, сөнки беҙ көнө буйы эштә - дәүләт ярҙамына ғына ҡарап ултырып булмай. Эшләргә, балаларҙың өҫ-башын хәстәрләргә, туҡлыҡлы итеп, төрләндереп ашатырға, уҡыу кәрәк-яраҡтары, һәр береһенә ноутбук, телефон һатып алырға кәрәк. Шунһыҙ булмай, заманы шундай. Йәшәү шарттарына килгәндә, зарланырға урын юҡ: дүрт бүлмәле иркен фатирҙа йәшәйбеҙ. Мәктәп эргәлә генә. Дөрөҫ, күп балалыларға 30 процент ташлама ҡаралыуға ҡарамаҫтан, коммуналь түләүҙәр байтаҡ сығымдар талап итә, сөнки фатир майҙаны ла, ғаиләләге кеше һаны ла иҫәпкә алына бит.

Балалар бәләкәй саҡта эшләй алманым, әле ирем менән икебеҙ ҙә Өфө заводтарының береһендә эшләйбеҙ, машинабыҙ, дачабыҙ бар: йәшелсә-емеш үҙебеҙҙеке. Балалар бәләкәйҙән баҡсала хеҙмәт күнекмәләре алып үҫә һәм был бер ҙә насар түгел. Тағы ла әйтергә теләгәнем шул: Ишле ғаилә көнөн байрам итеү бөтөн йәмәғәтселек иғтибарын йәләп итерлек, күп балалы ғаиләләргә ихтирам һәм иғтибар тәрбиәләрлек кимәлдә үткәрелһен ине.

***Айсыуаҡ ИШДӘУЛӘТОВ, урындағы район башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы, муниципаль хеҙмәт ветераны:*** Тәүҙән үк әйтеп ҡуйым: минең ысын исемде лә, йәшәгән урынды ла күрһәтмәүегеҙҙе үтенәм, сөнки урындағы хужалар, ғәҙәттә, үҙҙәренән үтеп, республика матбуғатында сығыш яһағанды бигүк яратмай, хатта ҡайһы саҡ бының өсөн рөхсәт алыуҙы талап иткәндәре лә бар.

Әйҙәгеҙ, хәҙер һеҙҙең һорауға ҡағылышлы анығ һөйләшеүгә күсәйек, булмаһа. Мин үҙем ун балалы ғаиләлә үҫтем. Әсәйебеҙ 1970 йылдарҙа ауылда беренселәрҙән булып "Герой-әсә" исе-

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# МУТЛАШЫУСЫ ҠОРБАНЫ БУЛМА!



**Гәзитебеҙҙең үткән 49-сы һанында "Дөйә түгеллегенде иҫбатла" тигән материал баҫылып сыҡҡайны. Унда "Долина эффекты" тип аталған хәл тураһында бәйән ителә. Йәғни, билдәле йырсы Лариса Долина үҙенең фатирын һатҡанда килешеүҙе мутлашыусылар йоғонтоһонда эшләгәнен иғлан итә. Артист торлаҡ майҙанын кире ҡайтара, әммә һатып алыусыға аҡсаны кире бирмәй…**

Һуңғы ваҡытта фатир һатыу-һатып алыу баҙарында алданыусылар күп. Хоҡуҡи ярҙам һәм медиация үҙәге филиалы адвокаты Анна Зеликман икенсел баҙарҙа торлаҡ һатып алғанда нисек алданмаҫҡа кәрәклеге хаҡында

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Россельхознадзор"ҙың республика буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 2025 йылдың 11 айында шәкәр заводтары 29,41 мең тонна гранулланған сөгөлдөр һығынтыһын Ҡытай һәм Корея Республикаһына оҙатҡан. Ауыл хужалығы малдары һәм ҡош-ҡорт өсөн тәғәйенләнгән аҙыҡ өҫтәмәһенең был төрө барлыҡ кәрәкле лаборатор тикшеренеүҙәрҙе уңышлы үткән.

✓Башҡортостан мәктәптәр һәм балалар баҡсалары төҙөү һәм ремонтлау буйынса Рәсәй төбәктәре араһында алдынғылар иҫәбендә. 2019 йылдан 2024 йылға тиклем бөтәһе 48 яңы мәктәп һәм 65 балалар баҡсаһы төҙөлгән. 2026 йылда 36 мәктәп, 6 колледж һәм 6 балалар баҡсаһы бинаһын капиталь ремонтлау планлаштырыла. Быйыл иһә республикала 35 мәктәп, 2 балалар баҡсаһы, 2 колледж яңыртылған.

✓Башҡортостанда хәрби хеҙмәткә саҡырыу комиссиялары составына үҙгәрештәр индерелде. Атап әйткәндә, медицина составы яңыртылды, комиссиялар сафына яңы хәрби комиссарҙар, Эске эштәр министрлығы, муниципалитеттар һәм халыҡ мәшғүллеге үҙәктәре вәкилдәре индерелде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған указ законлы көсөнә инде.

✓Башҡортостанда 400 меңдән ашыу кеше торлаҡ-коммуналь хужалыҡ мәсьәләләрен бер урында тиҙ һәм уңайлы хәл итергә мөмкинлек биргән "Дәүләт хеҙмәттәре. Йорт" мобиль ҡушымта менән файҙалана. Ил буйынса иһә уны бөтәһе 14 миллиондан ашыу кеше ҡуллана. Ҡушымта ярҙамында комиссияһыҙ (СБП аша) түләргә, иҫәп приборҙары күрһәтмәләрен тапшырырға, идара итеүсе ойошмаға заявка ебәрергә, милекселәрҙең дөйөм йыйылыштарын онлайн үткәрергә мөмкин.

✓Башҡортостан Волга буйы федераль округы төбәктәренең экологик рейтингында беренсе урынға сыҡты. Унда экология буйынса федераль программаларҙы үтәү барышы, шул иҫәптән ҡалдыҡтар менән эш итеү, эксперттар һәм халыҡ фекерҙәре иҫәпкә алына. Лидерҙар төркөмөнә шулай уҡ Татарстан, Удмуртия, Түбәнге Новгород, Ырымбур, Пенза, Һарытау өлкәләре һәм Пермь крайы инә.

✓Мораҙым тарлауығы биләмәһендә Белоруссиянан килтерелгән зубрҙар йәшәй башлағас, паркка килеүселәр күбәйгән. Был хаҡта Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов һөйләне. "Бөгөн беҙҙә 23 зубр бар. Хайуандар үҙҙәрен яҡшы тоя, ҡар яҡҡас та улар вольерға төшә. Паркка теләгән һәр кем инергә мөмкин", - тип билдәләне Фазылов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылдың ғинуарында республика етәксеһе Радий Хәбировтың башланғысы менән Башҡортостан зубрҙары популяцияһын тергеҙеү башланды.

***✓ "Мәскәүҙә һәм башҡа эре ҡалаларҙа бер бүлмәле фатирҙар төҙөй башланылар. Бөгөн бер түгел, ә дүрт, биш бүлмәле фатирҙар кәрәк. Әгәр сабый донъяға килә икән, ғаиләләге һәр баланың айырым бүлмәһе булһын.***

менә лайыҡ булды һәм алтын миҙал менән бүләкләнде. Ул ваҡытта ауылдарҙа бер йә ике балалы ғаилә бөтөнләй юҡ тип әйтерлек ине, һәр йортта кәмендә 5-6 бала булды. Шуныһы менән дә беҙгә ул замандар күңелле булып хәтерҙә ҡалған. Бөгөнгө кеүек, ул саҡ ишле ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тәтемәне лә шикелле, ни бары кескәйҙәргә генә бер аҙ пособие бирелә ине. Ғаилә атайҙың эш хаҡына күҙ терәп торҙо, әсәйҙәр йорт-хужалыҡ эштәрен алып барҙы, балалар ҡараны. Шул хәлдә лә ас-яланғас булманыҡ. Бәләкәйҙән эшләп өйрәндек, ҡусты-һеңлеләрҙе ҡараштыҡ. Бына ул ваҡытта, ысынлап та, күп балалыҡ нормаль күренеш ине. Эштән һуң атайҙар өй күтәрҙе, төкәтмә төҙөнө - балалар күп булғас, иркен йорт кәрәк бит инде, ләкин был йәһәттән дә ишле ғаиләләргә дәүләт ярҙамы булманы. Бар ине етешһеҙерәк, бәләкәй өйҙә йәшәгәндәр ҙә, сөнки ғаиләләрҙең хәле уның башлыҡтары булдыҡлығына бәйле булды, әлбиттә.

Шул йылдарҙан һуң совет ҡоролошо емерелеп, донъялар үҙгәрә башлағас, илдә тыуым ҡырҡа кәмене. Тынысһыҙ йылдар, көтөлмәгән сәйәси һәм иҡтисади хәлдәр ил нигеҙен ҡаҡшатыу менән бергә уның "ячейкалары" булған ишле ғаиләләр традицияһын да юҡҡа сығарҙы. Бөгөн ауыл ғаиләләрендә лә хатта иң күбе 3 бала үҫә. Ни өсөн тигәндә, заманалар үҙгәрҙе. Йәшәйешебеҙҙә элеккесәге тотороҡлолоҡ, иртәгәге көнгә ныҡлы ышаныс булмауы, тормошобоҙҙоң көнләп түгел, сәғәтләп ҡимmәтләнә барыуы - ошондай шарттарҙа ғаилә ҡиммәттәре лә онотола төшкәндәй булды кешелә.

Яңыраҡ социология фәндәре кандидаты Сергей Талановтың "Бала табырғамы, эшләргәме?" тигән мәҡәләһен уҡығайным. Ғалим унда тыуымды арттырыу өсөн пособиеларҙың, Әсәлек капиталының бик мөһим булыуын, ләкин барыбер ҙә көндәлек тормош шарттарына яуап бирерлек уңайлы, иркен фатирҙар кәрәклеген беренсе урынға ҡуя. "Мәскәүҙә һәм башҡа эре ҡалаларҙа бер бүлмәле фатирҙар төҙөй башланылар. Бөгөн бер түгел, ә дүрт, биш бүлмәле фатирҙар кәрәк. Әгәр сабый донъяға килә икән, ғаиләләге һәр баланың айырым бүлмәһе булһын. Ауыл ерҙәрендә ҙур һәм ҡатлы коттедждар төҙөп, уны дәүләт киләсәктә ғаиләләге балалар милкенә күсереү шарты менән бирһен",- ти социолог.

***Күп балалы ғаиләләрҙең йәмғиәттәге ыңғай образын тыуҙырыу мөһим, тигән фекерҙәмен үҙем. Быының өсөн иһә ғаилә ҡиммәттәрен, күп балалы ғаиләләрҙең өҫтөнлөктәрен мәктәп йылдарынан уҡ пропагандалай башларға кәрәк. Киң мәғлүмәт сараларында өсәр тапҡыр айырылышҡан популяр артистар тураһында түгел, ә 30-50 йыл бергә татыу ғүмер иткән ғаилә парҙары, уларҙың балалары хаҡында күбәрәк һөйләргә кәрәк.***

Ил етәкселеге һуңғы йылдарҙа күп балалы ғаиләләргә иғтибарҙы бермә-бер арттырҙы. Календарҙа Ишле ғаилә көнөн булдырыуға ыңғай ҡараштамын, ләкин ул исем өсөн генә булмаһын, ә демография хәлен яҡшыртыу, ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау маҡсатына туранан-тура булышлыҡ итһен. Шуға күрә лә был көндө ишле ғаиләләр өсөн генә тип ҡабул итергә ярамай, уны ысын мәғәнәһендә халыҡ байрамына әүерелерлек кимәлдә ойоштороу кәрәк, тип уйлайым.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

һөйләне. Эксперт тәү сиратта нотариаль килешеү үткәрергә тәҡдим итә. "Әгәр беҙ йыш ҡына фатирҙарын һатҡан һәм һуңынан килешеүҙе законһыҙ тип таныу тураһында судҡа мөрәжәғәт иткән өлкән кешеләр тураһында һөйләһәк, психоневрология диспансерынан оло йәштәге ҡатындың хәле тураһында белешмә алыу ғына түгел, ә уның эмоциональ фонын һәм тәртибен асыҡлай алған тулы психиатрия тикшереүен талап итергә кәңәш итәм. Был 100 процентҡа тиерлек өлкән кешенең мутлашыусылар йоғонтоһонда булыуын асыҡларға ярҙам итәсәк", - тип аңлатты Зеликман. Уның әйтеүенсә, бындай осраҡтарҙың 70-75 процентында суд фатир һатыусылар яҡлы.

Әйткәндәй, БР буйынса Эске эштәр министрлығының мәғлүмәт һәм йәмәғәтселек менән бәйләнеш бүлеге начальнигы Максим Родионов һөйләүенсә, Башҡортостанда Долина менән булған хәлгә оҡшаш мутлашыу осраҡтары юҡ. Шул уҡ ваҡытта 2025 йылда республикала мутлашыусылар йоғонтоһонда фатирҙар һатыу менән бәйле 5 енәйәт эше ҡуҙғатылған. Әммә уларҙың һаны кәмей - 2024 йылда бындай эштәр - 7, 2023 йылда 9 була. "Уҙып барған йылдың 10 айы йомғаҡтары буйынса беҙҙең халыҡ енәйәтселәргә 3 миллиард һум самаһы аҡса бирҙе", - тип уртаҡлашты Родионов.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# УҢҒА БАРҺАҢ - УҢЫРҺЫҢ...

## һулға барһаң - туңырһың

**"Беҙ Украина өсөн үлергә теләмәйбеҙ", "Яңы донъя һуғышына - юҡ!" - Париж үҙәгендә, Эммануэль Макрон ишетһен, күрһен өсөн, Франция президенты офисы эргәһендә ошондай плакат һәм транспаранттар тотоп, протест маршына сыҡҡан кешеләрҙең иҫәбе-һаны юҡ, тип хәбәр итә РЕН ТВ күҙәтеүсеһе 14 декабрь материалында.**

"Евросоюз һәм уның властары беҙҙе һуғышҡа йәлеп итергә маташа һәм халыҡты донъя һуғышы менән ҡурҡытырға итә. Ә беҙ быны теләмәйбеҙ. Беҙ Рәсәй менән нормаль һәм асыҡ диалог яҡлыбыҙ",- ти "Патриоттар" француз партияһы лидеры Флориан Филиппо. Бының өсөн улар хатта Европа берлегенән баш тартырға ла риза: Франция Евросоюз составынан сыҡһын, Мерц менән Урсула үҙҙәре һуғышһын, тигән талап ҡуялар.

Ә Европа быға әҙерлек алып бара ла инде: Бундесверҙы (ФРГ-ның Ҡораллы көстәре - Авт.) ҡайтанан ҡоралландырыуға киткән 380 млрд евро үҙе ни тора! Ә Британия премьеры Кир Стармер Еврокомиссия рәйесе Урсула фон дер Ляйен менән һүҙ ҡуйышып, артабан да Киевты яҡлаясаҡтарын белдерә һәм, 18-19 декабрҙә, ниһайәт, Рәсәйҙең суверенлы активтарын ҡулға төшөрөүгә ЕС илдәре ризалығын алыу буйынса саммит үткәрергә йыйына. Ләкин бынан алдараҡ булған фекер алышыуҙарҙан күренеүенсә, был планды атҡарырға теләүсе инициаторҙар берҙәмлеккә өлгәшә алмай әле. Венгрия менән Словакия лидерҙары бындай аҡылһыҙ аҙымды һуғыш иғлан итеүгә тиң тип иҫәпләй. Еврокомиссия премьеры Орбан Еврокомиссияны Европа закондарын даими боҙоуҙа ғәйепләй.

Словакия премьеры Роберт Фицо Европаның теләһә ниндәй агрессив планына ҡаршы буласағын туранан-тура әйтә килә. "Тыныс сәйәсәт яҡлы булараҡ, мин Украина конфликтының дауам ителеүен теләмәйем, ә инде тиҫтәләгән млрд евроны хәрби маҡсаттарға тотоноу - был һуғышты дауам итеү тигән һүҙ", - ти Фицо. Ул Словакияның Рәсәйҙән газ һатып ала алмауын, сөнки һатып алған хәлдә "хәрби машина" яҡлы булыуҙа ғәйепләнәсәген, ә шул уҡ ваҡытта Франция менән Германия үҙҙәре Рәсәй газы ҡулланыусылары булыуын уларҙың ике йөҙлөлөгө тип атаны һәм Еврокомиссияны судҡа бирергә йыйыныуҙарын белдерҙе.

Немец канцлеры Мерц үҙ адресына тәнҡитте ишетмәмешкә һалыша һәм Украина сығымдарын Рәсәй аҡсаһы иҫәбенә ҡаплатыу уйынан кире ҡайтырға теләмәй, сөнки Германияның ҡаҙнаһы буш. Киләһе йылға ил бюджеты рекорд кимәлендә бурыс менән (ул 180 млрд евронан ашып китә) раҫланды, ә шул уҡ ваҡытта Украинаны финанслауҙы Германия 11,5 млрд евроға тиклем арттырҙы. Етмәһә, канцлер үҙе лә таныуынса, иҡтисад үҫеше буйынса ГФР Американан 10 йылға ҡалыша. Ошондай шарттарҙа Мерц ил граждандарын хәрби бурыс үтәүгә мәжбүрләмәксе.

АҠШ-тың Украина конфликтын көйләү планына килгәндә, РФ Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаков Рәсәйҙең был план буйынса үҙ ҡараштарын Вашингтонға асыҡ, аңлайышлы итеп еткереүе, ләкин, әгәр планға Киев режимы тарафынан Евросоюз башлыҡтары менән берлектә ниндәйҙер үҙгәрештәр индерелә ҡалған хәлдә, быға ҡәтғи ҡаршы буласағы хаҡында һөйләне. Киң мәғлүмәт каналдары АҠШ президенты Дональд Трамптың Украина башлығы Зеленскийға Донбасс буйынса территория килешеүенә барырға тәҡдим итеп, баҫым яһауы тураһында яҙа. Шуға ҡарамаҫтан, Зеленскийҙың территориялар мәсьәләһе буйынса "бөтә Украина референдумы" үткәреү ихтималлығы хаҡында һүҙҙәрен Трамп иғтибарға алды. Зеленский АҠШ планынан Украина өсөн бәхәс тыуҙырыусы пункттарҙы алып ташлауы һәм хәҙер документтың 20 пунктҡа ҡалдырылыуы хаҡында һөйләне. Ә Юрий Ушаков һөйләүенсә, Зеленскийҙың үҙ белдеге менән үҙгәртелгән документта Рәсәй тарафынан ҡабул ителмәҫлек положениелар булыуы мөмкин. Ә Рәсәй конфликтты көйләү мәсьәләһендә үҙ маҡсаттарын эҙәрләүсе Европа лидерҙары ҡарашын түгел, ә АҠШ йүнәлешен иғтибар үҙәгендә тота.

Сәйәси күҙәтеүсе Дмитрий Бавырин фекеренсә, Украина өсөн ике юл бар: беренсеһе - уның Рәсәй ҡуйған шарттарҙы ҡабул итеүе һәм һуғышты туҡтатып, тыныс тормоштан мәғәнә табыуы. Уңға барһаң - уңырһың, һулға барһаң - туңырһың, тигәндәй, икенсе юл - Трамптың тыныслыҡ планынан баш тартып, быының бөтөн эҙемтәләрен иңенә йөкмәү. Был Украина өсөн ауыр юл буласаҡ: Америка ул хәлдә Украинаны разведка мәғлүмәттәренән, ҡоралдан һәм башҡа төр ярҙамдан мәхрүм итәсәк. Был иһә Украина Ҡораллы көстәре хәлендә, шулай уҡ ил халҡының томош кимәлендә сағыласаҡ. Ә Зеленский өсөнсө, "типик украин" юлын һайлай, күрәһең: тура яуаптан ҡасыу, уңлы-һуллы һуғылыуҙар һәм ҡойроҡ болғау. Ә инде Украина конституцияһына ярашлы, территориялар буйынса теләһә ниндәй килешеүҙәр референдумда раҫлана, ләкин быының өсөн хәрби хәлде юҡҡа сығарыу талап ителә, сөнки ул һуғыш шарттарында үткәрелмәй, тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев билдәләүенсә, быйыл ҡыш баш ҡалала бөтәһе 32 боҙ һырғалағы, 91 хоккей ҡумтаһы һәм 22 саңғы трассаһы эшен ойоштороу планлаштырыла. Иң күп һырғалаҡтар Киров (8) һәм Октябрь (9) райондары биләмәләрендә урынлашҡан.

✓Өфөлә яңы йыл филателистик күргәҙмәһе асылды. Экспонаттар Өфө почтамтының клиенттар залында урынлашҡан. Күргәҙмәгә почта конверттары, маркалар һәм махсус почта штемпелдәренең тамғалары йыйылған. Почта маркалары коллекцияһы 35 йылда Рәсәйҙә Яңы йыл маркаларының бөтә сығарылыштары йыйылыуы менән уникаль. Коллекция хужалары - Башҡортостан филателистар йәмғиәте ағзалары Артур Өмүрбәков, Владимир Һәм Есения Зайцевтар.

✓Өфөнөң Киров районы башлығы Илвир Нурдәүләтов РФ Президентының Почет грамотаһы менән бүләкләнде. Указда билдәләнеүенсә, Илвир Нурдәүләтов дәүләт наградаһына "өлгәшкән хеҙмәт уңыштары һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн" лайыҡ.

✓Өфөнөң Дим районында яңы светофорҙар ҡуйыу дауам итә, тип хәбәр итәләр ҡала хакимиәтенән. "Хыял" урамында заманса дүрт светофор комплексын монтажлау буйынса әүҙем эштәр бара. Проект юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген көйләүгә һәм район инфраструктураһын яҡшыртыуға йүнәлтелгән. Әле кабель линиялары һалына һәм ҡорамалдар монтажлана. Эштәр график буйынса бара.

✓"Төҙөүсе" стадионында майҙаны 17 мең квадрат метрлыҡ иң ҙур һырғалаҡ эшләй башланы. Был хаҡта Өфөнөң Орджоникидзе районы хакимиәте хәбәр итә. Унда уңайлы кейенеү бүлмәһе, прокат һәм конькиҙы үткерләү пункты бар. Ял көндәрендә һырғалаҡ көндөҙгө сәғәт 12-нән киске 9-ға, эш көндәрендә иһә 5-тән 9-ға тиклем асыҡ.

✓Өфөнөң Дим биҫтәһендә "Хыял" һәм "Генерал Күсемов" урамдарында яңы төҙөлгән юлдан хәрәкәт асылды. Был хаҡта ҡала хакимиәте хәбәр итә. 1 616 метр оҙонлоҡтағы юл селтәре менән бергә яңы ике автобус павильоны, заманса тышҡы яҡтыртыу ҡоролмалары, тротуарҙар һәм велосипед юлдары файҙаланыуға тапшырылған. Эштәр барышында 5 километр инженер коммуникациялары үҙгәртеп ҡоролған.

✓Республиканың Хеҙмәт министрлығы хәбәр итеүенсә, 16 белгес, 9 кадрҙар үҙәге, 12 команда һәм 18 проект еңеүсе һәм призер булды. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, "Иң яҡшы белгес" номинацияһында Өфөнән Эльвира Опульскис иң яҡшы карьера консультанты исемен алды. 2-се кимәлдәге "Иң яҡшы кадрҙар үҙәге" номинацияһында Башҡортостан кадрҙар үҙәгенең Сибай ҡалаһы буйынса филиалы еңеүсе тип иғлан ителде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан ерле автономияһы иғлан ителгәндән һуң, башҡорт ҡоролтайҙарында конституцион әһәмиәткә эйә булған яңы хоҡуҡи акттар ҡабул ителә башлай.***



ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ

# АСЫЛЫКҮЛ

**Асылыкүл - Башҡортостандағы иң ҙур күл. Дәүләкән ҡалаһынан төньяҡ-көнбайышҡа 27 км алыҫлыҡта ята. Өфөнән - 140 саҡрым. 1993 йылда булдырылған "Асылыкүл" дәүләт милли паркы биләмәһенә ҡарай. Республикаһының Ҡыҙыл китабындағы 150 тәбиғәт ҡомартҡыһы иҫәбенә инә.**

Һыу ятҡылығы урыны бурташ, гипс кеүек тау тоҡомдарының уйылыуынан Бәләбәй ҡалҡыулығының киң уйпатында барлыҡҡа килгән. Уны Олотау, Тоболғаҡ, Оло Ҡарағас, Бәләкәй Ҡарағас тип аталған түбәләр һәм Ташлытау һырты уратып алған. Күл йөҙөнөң майҙаны - 23,5 кв км, буйы - 7,1, киңлеге уртаса - 3,3 км. Тәрәнлеге уртаса - 5,1, ә иң тәрән урыны - 8 метр. Йылына ҡарап, бер ниндәй сәбәпһеҙ Асылыкүлдә һыу кимәле 1,5 метрға тиклем тирбәлә.

Яҙғыһын Асылыкүлгә Шарлама шишмәһе ағып төшә. Һыу кимәле күтәрелгәндә күлдән Асылы Өйҙөрәк инеше ағып сыға һәм Кесе Өйҙөрәк йылғаһына (Димдең уң ҡушылдығына) ҡоя. Күлдең һыуы үтә күренмәле, асыҡ-бирюза төҫөнә яҡын, бер аҙ тоҙло, составында сульфат-натрий бар. Исеме лә "асы" ("әсе") һүҙенән сыҡҡан. Һыу ингәндә аяҡтар һәм кәүҙә тәбиғи булмаған зәңгәр төҫтә күренә.

Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа Асылыкүл боронғо диңгеҙҙең реликт ҡалдығы булыуы ихтимал, тигән фараз осрай. Бында ла нигеҙ бар, сөнки палеозой эраһында, бынан 500 - 300 млн йыл элек, Урал тауы урынында океан йәйрәп ятҡан. Күлдәге һауаның диңгеҙ һауаһын хәтерләтеүе лә быға ишара. Көслө ямғыр йәки томан ваҡытында Асылыкүл, ысынлап та, ярһыҙ ысын диңгеҙ булып күренә. Халыҡ риүәйәтендә, бынан бик күп йылдар элек был күл булмаған, тиелә. Буранғол ауылы аша Асылы тигән йылға ағып ятҡан. Ул Сәрмәсәнгә ҡойған. Күл урынында Ташлытау ҡалҡып торған. Бөтә тирә-яҡты урман ҡаплаған булған. Йәй көндәренең береһендә, тау артынан ҡара болот ҡалҡҡан. Бик ныҡ күк күкрәгән, ямғыр ҡоя башлаған. Яуым шул хәтле көслө булған - Асылы йылғаһы ауылды баҫып киткән. Иртәгәһенә ҡараһалар, Ташлытауҙың уртаһы убылған, шул урында ҙур күл барлыҡҡа килгән. Асылы йылғаһы ағышын бороп, шул күлгә ҡоя башлаған. Ана шуға был күлде Асылыкүл тип атағандар.

Гидронимдың килеп сығышы тураһында башҡа версиялар ҙа бар. В. И. Даль уны "Ассулы" рәүешендә яҙып ҡалдырған. "Асыҡ, төпһөҙ, бәлки, дөрөҫөрәге асыулы, сөнки, ысынлап та, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында күл үҙгәреп тора, йәйелә һәм кире тайта, арта һәм кәмей", - тип аңлата ул. "Ас(ҫ)лыкүл" - "ике төплө күл", "Аҫылкүл" - "матур күл", тип тә фараз ҡылғандар. Асылыкүл - башҡорт халҡының боронғо "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосында барған ваҡиғалар урыны ла.

Күлдә һыу инеүе бик уңай. Төбө ташһыҙ, тигеҙ. Йайлап тәрәнәйә. Урындағы халыҡ күлдең һыуы файҙалы, тип бара. Төбөндәге бысраҡ та шифалы һанала. Радикулиттан, ревматизмдан, быуындар һыҙлауынан ярҙам итә икән.

Күл буйындағы Яңы Тормош ауылынан алыҫ түгел "Гөлбикә шишмәһе" ағып сыға. Ул - шифалы сульфат-кальцийлы минераль сығанаҡ. Күлдән алыҫ түгел шулай уҡ сульфат-кальцийлы шишмә бар. Ул 1965 йылдан гидрологик тәбиғәт ҡомартҡыһы статусына эйә.

Асылыкүл янында Берҡаҙан-Ҡамыш һаҙлығы була ҡасандыр. Унда төрлө ҡоштар, шул иҫәптән пеликандар ҙа оя ҡора. Торф ҡырҡыу өсөн уны киптерәләр, хатта иген сәсеп ҡарайҙар. 2017 йылда БМО ойошмаһының финанс ярҙамы менән ул кире тергеҙелә башлай. Бөгөн унда ҡоштар кире ҡайта.

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

# БАШҠОРТОСТАН КОНСТИТУЦИЯҺЫ ТАРИХЫНАН

**Бынан 32 йыл элек, 1993 йылдың декабрь айында, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың яңы Конституциялары ҡабул ителде. Дәүләт ҡоролошоноң төп принциптарын һәм ҡанундарын билдәләп, кеше һәм граждан хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыуҙың төп ҡануни нигеҙе буларак, Конституцияның йәшәйешебеҙҙәге әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.**




Рәсәй составындағы милли республика (дәүләт) буларак, Башҡортостандың конституцион үҫешенең үҙ тарихы бар. Республикабыҙҙың яңыртылған дәүләтселек нигеҙҙәре XX быуат башындағы Рәсәй инҡилабы барышында ерле мөхтәриәт (автономия) өсөн көрәш һөҙөмтәһендә булдырыла. Әйткәндәй, "автономия" һүҙе грек телендә "үҙ ҡануниәтлелек" булыуҙы, йәғни үҙ ҡанундары булған дәүләт мәғәнәһен аңлата.

1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан ерле автономияһы иғлан ителгәндән һуң, башҡорт ҡоролтайҙарында конституцион әһәмиәткә эйә булған яңы хоҡуҡи акттар ҡабул ителә башлай. Башҡорт үҙәк шураһының 2-се һанлы фарманын Башҡортостан автономияһының тәүге конституцион акты итеп ҡарап була. Был тарихи документҡа шура рәйесе Шәриф Манатов, уның урынбаҫары Әхмәтзәки Вәлидов һәм сәркәтибе Шәйехзада Бабич һәм шураның алты бүлеге мөдирҙәре үҙҙәренең ҡултамғаларын ҡуя.

Фарманда былай итеп яҙылған: "Башҡорт мәркәз шураһы Өфө, Пермь, Һамар һәм Ырымбур губернияларының башҡорт территорияһын Рәсәй республикаһының автономиялы өлөшө тип иғлан итә". Ғәскәр, банктар, тимер юлдары, почта, телеграф, һалым йыйыу Башҡортостандың дәүләт учреждениеларына ҡарамағына бирелә, автономия биләмәләре айырым кантондарға бүленә һәм улар яңы административ берәмектәр ролен үтәй". Башҡорт шураһы фармандары 1917 йылдың декабрендә Ырымбурҙа уҙған III Бөтә башҡорт ойоштороу ҡоролтайында раҫлана. Унда ҡабул ителгән резолюцияларҙың береһендә Рәсәй республикаһының милли автономиялар һәм өлкәләр союзынан (Федерацияһынан) хасил булыуы, Башҡортостандың Рәсәй составына милли-территориаль штаттарҙың береһе сифатында инеүе хаҡында белдерелә. Мөхтәриәттең (республиканың) ҡануни нигеҙҙәрен "Бәләкәй Башҡортостан автономияһы тураһындағы положение", "Бәләкәй Башҡортостан менән автоном идара итеү тураһындағы положение", III Бөтә башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡабул ителгән башҡа ҡарарҙар хасил итә.

Кесе Ҡоролтай Башҡортостан автономияһының иң юғары органы булып тора. Парламент депутаттары итеп 22 йәштән кесе булмаған, төрлө енестәге, милләтенә һәм диненә ҡарамайынса, һәр кеше һайлана алған. Республиканың предпарламентына Бөтә башҡорт ҡоролтайҙарында 22 кеше ағза итеп һайлана. Кесе Ҡоролтайға республиканың министрҙарын һәм хөкүмәт ағзаларын тәғәйенләү хоҡуғы бирелә. Кесе Ҡоролтайҙың беренсе рәйесе итеп Юныс Юлбарыҫ улы Бикбов һайлана. 1917-1919 йылдарҙа Башҡортостан Хөкүмәте автономияның башҡарма власть органы була. Уның составына хәрби, финанс, иҡтисад, халыҡ мәғарифы, статистика, ер эштәре, рухи эштәр бүлектәре инә. 1918 йылдың июлендә йәмғиәт тәртибен һаҡлау өсөн башҡорт милицияһы ойоштторола, уның менән Әхмәт Бейешев етәкселек итә. Ҡоролтайҙарҙағы ҡабул ителгән ҡарарҙар буйынса, автономия территорияһында мир һәм дөйөм суд органдары төҙөлә, улар уртаҡ дәүләт ҡанундары буйынса эш итә. 12-се һанлы ҡарарҙа диндең дәүләттән айырылыуын һәм бөтә диндәрҙең тиң хоҡуҡлы булыуы иғлан ителә. Бойондороҡһоҙ Башҡортостан мосолмандары диниә назаратына рухи һәм башҡа рухи-мәҙәни һәм мәғәриф-ағартыу учреждениелары (мәктәп, мәҙрәсә, китапхана һәм башҡалар) асыу хоҡуғы бирелә.

1918 йылдың 20 августында, Башҡорт мәркәз шураһының 4547-се һанлы фарманына ярашлы, Башҡортостан автономияһының рәсми дәүләт флагы раҫлана: ул күк, йәшел һәм аҡ төҫлө өс горизонталь тигеҙ һыҙаттан торған. Күк төҫ башҡорттарҙың төрки халыҡтарға ҡарауын, йәшел - Ислам дине төҫө, аҡ - тыныслыҡҡа, бәхеткә һәм именлеккә ынтылышты аңлатҡан.

Башҡортостандың беренсе конституцияһы проекты 1920 йылда уҡ әҙер була. Башревкомдың 1920 йылдың 9 апрелендәге ултырышында Конституция комиссияһы булдырыла, ә тәүге проект бик күләмле булып (12 глава, 235 статья), республика тормошон һәр яҡлап көйләүҙе күҙаллай. Тәүге Башҡорт хөкүмәте эшмәкәрлеген туҡтатҡас, 1921 йылдың 29 апрелендә БашЦИК Президиумы ултырышында конституция мәсьәләһе яңынан ҡуҙғатылып, яңы комиссия ағзалары тәғәйенләнә. Әммә был ваҡытта автономияларға үҙ конституцияһын булдырыу хоҡуғы бирелмәгән була, һәм эш туҡталып ҡала.

РСФСР-ҙың 1925 йылда ҡабул ителгән Конституцияһы автономиялы республикаларға үҙ конституцияларын булдырыу мөмкинлеген бирә. Башҡорт ССР-ының Конституцияһы 1925 йылдың 27 мартында Советтарҙың V Бөтә башҡорт съезы тарафынан раҫлана. Конституция 4 бүлектән, 8 главанан тороп, унда барлығы 93 статья була. Конституцияның төҙөлөшө түбәндәгесә була: I. Дөйөм положениелар; II. Башҡорт Социалистик Совет Республикаһының РСФСР һәм СССР менән закондар сығарыу һәм идара итеү өлкәһендәге мөнәсәбәттәре; III. БССР-ҙың бюджет хоҡуҡтары; IV. БССР-ҙа Советтарҙың Бөтә башҡорт съезы вәкәләттәре предметы тураһында; V. БССР-ҙа Совет власының төҙөлөшө тураһында; VI. Урындағы власть тураһында; VII. Һайлау хоҡуҡтары; VIII. БССР-ҙың гербы, флагы һәм хөкүмәтенең урынлашыуы тураһында.

Был Конституция раҫлау өсөн ВЦИК-ка ебәрелә, әммә үҙәк власть уны раҫлауҙан баш тарта. Конституцияның 1-се статьяһында "Башҡортостан РСФСР составына ирекле инеүсе һәм уның аша Совет Социалистик Республикалар Союзы менән берләшеүсе республика булып тора" тип яҙылыуын ВЦИК комиссияһы инҡар итә. Ошо комиссияның йомғаҡлау белешмәһендә "Рәсәй Федерацияһы айырым республикаларҙың ирекле килешеүе нигеҙендә түгел, ә РСФСР юғары органдары раҫлауы менән Рәсәй республикаһы составындағы айырым милләттәрҙе автономиялы республикаларға айырыу принцибында төҙөлә", тип белдерелә.

Шулай итеп, 1937 йылда Советтарҙың X Бөтә башҡорт съезында ҡабул ителгән Башҡорт АССР-ы Конституцияһын ВЦИК 1940 йылда раҫлағанға тиклем республикабыҙҙың ғәмәлдәге Төп законы булмай, тип әйтергә була. Әлбиттә, был осорҙа Башҡортостандың үтә сикләнгән дәүләтселегә бары Рәсәй Конституцияһы һәм ҡанундары нигеҙендә ғәмәлгә ашырыла. Сталин һәм ВКП(б) диктатураһы йылдарында конституцион законлылыҡтың декларатив форма ролен үтәп, сит дәүләттәр алдында ҡоролған бер ширма булыуын онотorға ярамай.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

*✓ Эпоста Урал батыр дейеүҙәрҙе турай-турай алға табан бара, уның артынан тауҙар, ҡоро ерҙәр күтәрелә, тиелә. Шулай булғас, халҡыбыҙ ерҙә боҙлоҡ иреп, ҡоро ерҙәр барлыҡҡа килгән дәүерҙең дә шаһиты булған.*



ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Александр Юрченко, тарих фәндәре кандидаты, бойондороҡһыҙ тикшеренеүсе (Санкт-Петербург):*** Картала Итиль йылғаһы төшөрөлгән һәм артабан ул үҙенең бер ҡушылдығына күсә. XIV быуатта Кама йылғаһы ла Итиль тип аталған була. Башҡорт ҡалаһы йылға ярында, ҡалалар сылбырында күрһәтелгән. Картографтарҙы, дөрөҫөрәк әйткәндә, уларға заказ биреүселәрҙе һәм уларҙың информаторҙарҙын ҡалалар үҙҙәренән үҙҙәре генә ҡыҙыҡһындырмаған. Әйтәйек, был картала Мәскәү юҡ. Беҙ XIV быуатта Мәскәүҙең булғанлығын беләбеҙ. Ҡаланың картала күрһәтелмәүе уның булмауына дәлил түгел. Ул осорҙа, Европа банкирҙарының геосәйәсәти мәнфәғәттәренә ярашлы, Мәскәү уларҙы ҡыҙыҡһындырған бер нәмәне лә тәҡдим итә алмаған. Тап шуның өсөн Мәскәүҙең уларға кәрәге булмай. Ә Башҡорт ҡалаһы бар, Сарай бар, башҡа ҙур һәм бәләкәй ҡалалар бар.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Паскерти ҡалаһы, моғайын, тарихи-географик мосолман традицияһына ла билдәле булғандыр. XIV быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы, киң билдәле Рәшид-ад-Динде дауам итеүсе Хәмдуллах Казвини, шулай уҡ Ирандың монгол хакимдары һарайында хеҙмәт итеүсе ғалим, үҙенең "Нузхат ал-кулуб" ("Йөрәктәр хозурлығы") тигән хеҙмәтендә ошо хаҡта телгә ала.

***Искәндәр Сайетбатталов, филология фәндәре кандидаты ӨФһТУ-ның Иранистика үҙәге директоры:*** Казвини VII климатҡа ҡараған Башҡорт төйәгендәге ике ҙур ҡала, улар тирәһендәге киң далаларҙа кешеләрҙең тораҡтары булыуы хаҡында яҙа. Ул үҙенә тиклем булған мәғлүмәттәрҙе күсереп кенә алмаған, уларҙы тәнҡит күҙлегенән ҡарап, һайлап алып ҡына теркәгән. Үҙ заманының ҙур чиновнигы булараҡ та ул актуаль информация йыя алған, шулай уҡ уға монгол яулап алыуы осоронда тупланған мәғлүмәттәр ҙә билдәле була.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Шулай итеп, батша менән кенәз Урус араһындағы хат алышыуҙа һанап үтелгән Увек, Һамар, Өфө атамалары йылға исемдәрен түгел, ә айырым урындарҙы аңлатҡан, тип фараз итергә лә була, сөнки Урҙа осоронда ошолай тип аталған тораҡ пункттары була. Был осраҡта бер һорауға ғына яуап табыу фарыҙ: рус отрядтары бында килгәнсе тораҡ инфраструктураһы ғәмәлдә булғанмы әллә улар килгәнгә тиклем байтаҡ ваҡыттар элегерәк тормош һүнеп ҡалғанмы?

Ошо һорауға яуап табыр өсөн яңынан археология материалдарына иғтибар итеү фарыҙ. Тик улар ғына алдараҡ килтерелгән картография һәм яҙма сығанаҡтар мәғлүмәттәренең дөрөҫлөгөн раҫлай ала. Шулай итеп, һуң урта быуаттар осорона, йәғни XIV-XVI быуаттарға ҡараған материалдар бармы икән?

**(Дауамы. Башы 37-44-се, 46-49-сы һандарҙа).**

БЕҘГӘ ЯҘАЛАР

# УРАЛ КАЛЕНДАРЫ ТҮГЕЛМЕ?

**Тарих дәреслектәрендә гректарҙың "Одиссея", "Троя" поэмалары беҙҙең эраға тиклем VIII быуаттарҙа ижад ителгән, тип яҙылған. Ә башҡорт ғалимы Салауат Ғәлләмов "Урал батыр" эпосыбыҙҙың грек поэмаларынан сама менән 500 йылға боронғораҡ икәнлеген иҫбат итте. Шулай булғас, беҙҙең эпосыбыҙ беҙҙең эраға тиклем XIII быуатта ижад ителгән була. Хәҙер уға яҡынса 3322 йәш. Ошо тиклем ваҡыт арауығында быуындан-быуынға, телдән-телгә күсеп, Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәребеҙгә килеп етә был хазинабыҙ. 1910 йылда халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов үрҙә телгә алынған сәсәндәребеҙҙән яҙып алып, эпосыбыҙҙы мәңгеләштерә.**

Халҡыбыҙ тарафынан ижад ителгән "Урал батыр" эпосында ата-бабаларыбыҙҙың бик боронғо тормошо, кәсептәре, Ерҙә ғәжәеллек тантана итһен өсөн йән аямай көрәше сағылдырыла. Бик боронғо замандан уҡ халҡыбыҙҙың аҡылына, талантына, үҙе тыуып үҫкән илде генә түгел, бөтә ғәләмде дөрөҫ күҙ алдына килтерә алыуына иҫең китәрлек.

Мәҫәлән, әйтерһең дә, бөгөнгө кеүек, мәктәптәрҙә география фәнен уҡығандар, тип уйларһың. Бына Уралдың әйткәне:

*"Үҙем йәп-йәш булһам да,*
*Биш ил барын белдем мин...*
*... Береһендә үҙем тыуҙым*
*Икеһен йөрөп күрҙем мин,*
*Ҡалған тағы икеүһен*
*Күрергә тип сыҡтым мин.*

"Шүлгән-таш" музейын тантаналы рәүештә асҡан саҡта Рәсәйҙән генә түгел, хатта күрше төбәктәрҙән дә бик күп ғалимдар килде. Шунда Мәскәүҙән килгән бер рус ғалимы: "Кешелек цивилизацияһының башы ошонан башланманымы икән?" - тигәнерәк һүҙ ысҡындырғайны.

Ғалимдарыбыҙ раҫлауынса, Ерҙә бик боронғо заманда боҙлоҡ осоро була һәм күпмелер ваҡыт үткәс, боҙлоҡ иреп, һыуҙары ағып киткәс, ҡоро ерҙәр барлыҡҡа килә; иң беренсе булып тауҙар һыу аҫтынан күтәрелеп сыға.

Эпоста Урал батыр дейеүҙәрҙе турай-турай алға табан бара, уның артынан тауҙар, ҡоро ерҙәр күтәрелә һәм халыҡ шатланышып был ерҙәрҙе үҙләштерә бара, тиелә. Шулай булғас, халҡыбыҙ ерҙә боҙлоҡ иреп, ҡоро ерҙәр барлыҡҡа килгән дәүерҙең дә шаһиты булған, тип әйтә алабыҙ.

*Тауҙар, ҡоро ерҙәр барлыҡҡа килгәс:*
*Ай-көн һайын Уралға*
*Төрлө йәнлек тулған, ти.*
*Шул йәнлектәр, ҡош-ҡорттар,*
*Килеү көнө кешегә*
*Ай, йыл һанын белеүгә*
*Исем булып киткән ти.*

**Шулай булғас, был календарь әлеге көндә ни өсөн Көнсығыш календары тип йөрөтөлә һуң? Урал календары тип йөрөтөләргә тейеш түгелме? Мәскәү ғалимы әйткәнсә, милләтебеҙ кешелек цивилизацияһы башында тормай микән, тип тә уйлап ҡуяһың. Тарих төпкөлөндә уҡ хәҙерге замандың алтын хазинаһындай эпосты ижад ит әле!**

Рәсүл БАСИРОВ,
мәғариф ветераны.
Ғафури районы Һабай ауылы.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Йыш ҡына бер ғаиләлә мал һаны бер нисә йөҙ башҡа еткәнлектән, хатта ғаиләлә бер нисә эшсе ҡулы булыуға ҡарамаҫтан, малдарҙы ҡышҡыһын ауылда тотоу өсөн етерлек мал аҙығы әҙерләү мөмкин булмай. Күп мал тотоу өсөн төп шарт булып йәйгеһен йәйләүҙән йәйләүгә генә түгел, ҡышҡыһын тибендән тибенгә йөрөтөү мөмкинлеге торған. Әммә бындай мөмкинлекте Башҡортостандың барлыҡ территорияһында ла тормошҡа ашырыу мөмкин булмаған. Ҡышын яуым-төшөм ҡалыныраҡ ятҡан көнбайыш Урал алды райондарына ҡарағанда, Урал аръяғы далаларында, ҡарҙы ел һеперепторған, малдар үҙҙәренә ҡар аҫтынан да аҙыҡты еңел тапҡан. Урал аръяғы ҡатайҙарында, далалы ерҙәрҙәге күбәләк-теләүҙәрҙә, тамъян-түңгәүерҙәрҙә, бөрйәндәрҙә һәм үҫәргәндәрҙә аттар йыл әйләнәһенә тибендә йөрөгән. Меңдәрҙә, юрматыларҙа, көнсығыш инйәр-ҡатайҙарҙа, урманлы-яланлы күбәләк-теләүҙәрҙә, тамъян-түңгәүерҙәрҙә, ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙа, бөрйән һәм үҫәргәндәрҙә аттар ҡыштың яртыһына тиклем генә тибендә йөрөгән. Тамъян-түңгәүерҙәрҙә һәм күбәләк-теләүҙәрҙә һарыҡтар ҡыш уртаһына тиклем тибендә булған, ә ҡар әҙ булған йылдарҙа йыл әйләнәһенә ҡайтмаған.

Тибен ваҡытында һәр ваҡыт аттар алдан, тояҡтары менән ҡарҙы асып һәм үләндәрҙең өҫкө өлөшөн ашап барған. Улар артынан һарыҡтар һәм иң аҙаҡтан үләндәрҙе тамырына тиклем ашаусы кәзәләр йөрөгән.

Аҙыҡ булмағанлыҡтан, малдарҙың ҡырылыуы көтөүселәрҙең, бигерәк тә малсылыҡ төп шөғөл булғандар өсөн, төп бәлә булып торған. Шуға күрә башҡорттарға һәр саҡ һәм һәр ерҙә малдарҙы ҡышын ашатыу өсөн билдәле күләмдә бесән туплаға кәрәк булған.

Хатта ҡышын ҡар аҙ яуған йылдарҙа ла, ялан, дала райондарында аттарҙы ай самаһы өҫтәмә ашатырға, ә ҡолондарҙы һәм эре мөгөҙлө малдарҙы тағы ла оҙағыраҡ өҫтәмә туҡландырырға тура килгән. Ялан-урманлы һәм урманлы райондарҙа барлыҡ малдарҙы ҡыштың билдәле бер ваҡыты үткәнсе бесән һәм һалам ашатып тотҡандар.

Башҡорттарҙың XVII, XVIII быуаттарҙа үҙ ерҙәренә припущенниктарҙы индереү яҙмаларының барыһында ла "бесән сабыу" хоҡуғы билдәләнгән. XVII быуат башында, Юхневтың мәғлүмәттәре буйынса, Нуғай һәм Себер даруғаһы башҡорттары йәйгеһен бесәнде "ваҡ мал һәм аттар өсөн әҙерләгән", уларҙы ҡышҡыһын һаҡлап тотонған. Ҡаҙан даруғаһы башҡорттары малдарҙы яҡшыраҡ ашатҡан, сөнки уларҙың игене һәм һаламы күп булған, ә Уса даруғаһы башҡорттары бик күп бесән сапҡан.

И. И. Лепехин белдереүенсә, XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттар бесәнде бары тик көмөрә - ураҡҡа оҡшаған ҡыҫҡа һаплы салғы менәнсапҡан **(һүрәт)**. Уның менән бейек үҫкән, урман үләнен генә сабыу мөмкин булған һәм бик ныҡ эйелеп сабырға тура килгән. Минең башҡорттар араһында йөрөгән ваҡытымда ғәйнәләрҙән башҡа берәү ҙә көмөрә салғы менән бесән сапманы. Бөтөн ерҙә бесән сабыу өсөн рус салғыһы менән сабып, уны тырма менән йыйып, ағас һәнәктәр менән өйәләр ине.



**(Дауамы бар).**

✓ Өфө марафонында яулаған беренсе үрем 10 километр арауыҡ булды. Шунан ике йыл рәттән 21 саҡрымды йүгерҙем. Быйыл беренсе тапҡыр классик марафонды - 42 километрҙы - тулыһынса "алдым".



**Бөгөн халҡыбыҙ әүҙем урбанизация процесы кисерә. Совет осоронда һәм яңы быуат башына тиклем башҡорт башлыса ауылдарҙа йәшәһә, хәҙер күпләп ҡалаларҙа төпләнә. Киләсәгебеҙ булған урта быуын һәм йәштәр араһында был нисбәт бигерәк тә ҙур. Был шарттарҙа Өфөлә, миллионлы баш ҡалабыҙҙа, миллилекте һаҡлап ҡала алырбыҙмы, әллә өлкән быуын башҡортлоҡто үҙҙәре менән мәңгелек йортҡа алып китерме? Ошо уйланыуҙар Өфө ҡала клиник перинаталь үҙәгенең анестезиология һәм реанимация бүлеге мөдире Илдар Ришат улы КӘРИМОВ менән осрашыуға этәрҙе. Табиптың был мәсьәләгә ни ҡыҫылышы бар, тигән һорау тыуыр күптәрҙә. Яуап уның менән ҡорған әңгәмәне уҡыу барышында асылыр.**

# "ДӨРӨҪ" КЕШЕ

## ә дөрөҫ йәшәргә



**▸ Илдар, әңгәмәне башлап, гәзит уҡыусыларҙы үҙең менән таныштырып үтһәң ине...**

- 1986 йылда Тула ҡалаһында тыуғанмын. Күп тә үтмәй, атай-әсәйем тыуған төйәктәренә, Мәсетле районының Айып ауылына, күсеп ҡайта. Ғаиләлә беҙ биш бала үҫтек. Бөтәбеҙ ҙә башлы-күҙле булып, төрлө өлкәлә хеҙмәт итәбеҙ. Азалия һеңлем уҡытыусы һөнәрен һайланы, Йонос урта мәктәбендә тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары вазифаһын башҡара, кейәүебеҙ Айнур менән ике ҡыҙ, бер ул үҫтерәләр. Ринат ҡустым Мәсетле районы хакимиәтендә граждандар оборонаһы һәм ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса баш белгес. Ҡатыны Наҙгөл менән бер ҡыҙ, бер малай тәрбиәләйҙәр. Физәлиә иһә бухгалтер һөнәрен һайланы. Вильнур кейәү - хәрби. Контракт менән Новороссийск ҡалаһында хеҙмәт итә, ғаиләһен дә үҙенең янына алды. Ике бала үҫтерәләр. Линар Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамланы. Быйыл өйләнде, әле армия сафында.

Мин үҙем, башланғыс кластарҙы тыуған ауылымда тамамлағас, уҡыуҙы дүрт саҡрымда ятҡан Әлдрәхим мәктәбендә дауам иттем. Ул араны, ҡар-ямғыр, ҡышҡы селлә тип тормай, йәйәүләп тә, ат ылауында ла, төрлө машина-тракторҙарға эләгеп тә үтә инек. Етенсе кластан һуң уҡырға Өфөләге башҡорт-төрөк лицейына, ғәйәт ҙур конкурс үтеп, (йөҙ бала араһынан икәүҙе генә һайлап алдылар) барҙым. Гел "5"-кә генә уҡыным, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса конкурстарҙа, предметтар олимпиадаларында ҡатнаша инем. Биологиянан республика буйынса өсөнсө урын алдым. Лицейҙы иһә көмөш миҙалға тамамланым. Тәүҙә биолог булырға уйлағайным, Зөмәрә апайыма рәхмәт, медицина юлынан китергә кәңәш бирҙе.

2012 йылда Башҡорт дәүләт медицина университетын тамамланым. Үҙем белем алған университет эргәһендәге клиникала анестезиолог-реаниматолог булып эшләй башланым. 2021 йылда Өфө ҡала клиник перинаталь үҙәгенә күстем. Анестезияның бөтә алымдарын үҙләштерҙем, яһалма ҡан әйләнешен көйләү, бөйөр алмашы терапияһын үткәреү, мембран экстракорпораль оксигенация (ЭКМО) тип аталған тын етмәгәндә ҡанды кислород менән байытыу процедураһын эшләү тәжрибәләрем бар. Ҡала клиник перинаталь үҙәгенең анестезиология һәм реанимация бүлеген һәм трансфузион (ҡан биреү) кабинетын етәкләйем.

Альвина исемле Өфө һылыуы менән донъя ҡороп, бөгөнгө көндә өс ҡыҙ тәрбиәләйбеҙ. Дианаға 14 йәш, 8-се синыфта уҡый, минә оҡшап, биологияны үҙ итә, Өфө ҡала олимпиадаларында еңеүҙәре бар. Рианаға 10 йәш, ул да тик яҡшы билдәләргә өлгәшә. Кескәйебеҙ Лилиана әле балалар баҡсаһына йөрөй, уға 4 йәш. Ғаиләлә тормошобоҙ хәләл ефетем Альвина тирәһендә әйләнә, ул - донъябыҙ тотҡаһы.

Атайым менән әсәйем тураһында айырым әйтеп үткем килә. Улар - беҙҙең, балаларының, ғорурлығы. Икәүһе лә ишле ғаиләлә тыуып үҫкән. Ул заманда башҡаса булмағандыр ҙа. Атайым Ришат Шакир улы - тәбиғәткә береккән кеше. Ул республикабыҙҙың Экология министрлығына ҡараған урындағы хайуандар донъяһын һаҡлау һәм файҙаланыу хеҙмәтенең әйҙәүсе белгес-эксперты булып 1989 йылдан алып эшләй, Мәсетле, Балаҡатай, Ҡыйғы райондары биләмәләрендә кейек-хайуандар һағында тора. Лайыҡлы хеҙмәте Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһы, "Һунарсылыҡ хужалығы отличнигы" знагы, алты тапҡыр Хайуандарҙы яҡлау фонды дипломы һәм "Урман рыцары" исеме менән баһаланды. Бүреләр ныҡ үрсеп киткән бер йылда ул ун һигеҙ йыртҡысты атып алды, "Иң оҫта бүре аулаусы" булып танылды. Атайым 2023 йылда алған республиканың "Атайҙар ҡаһарманлығы" йәмәғәт миҙалын, тормошомда ҡаҙанған иң юғары наградам, ти.

Әсәйем Кәүсәриә Әбһәм ҡыҙы районДың Тайыш ауылында тыуып үҫкән. Атайым менән бер класта уҡыйҙар. Тулала йәшәгәндә ҡорал заводында токарь һөнәрен үҙләштерә. Күп баланы ҡарар кәрәк бит, күберәк беҙҙе ҡараны, йорт хужалығы менән булышты, фермала һауынсы булып та эшләне. "Әсәлек даны" миҙалы - әсәйемдең дә иң ҙур наградаһы. Етешһеҙ 90-сы йылдарҙа биш баланы аяҡҡа баҫтырыу, ысынлап та, оло ҡаһарманлыҡ бит ул. Былтыр әсәйемә алтмыш йәш тулды.

**▸ Ауылға йыш ҡайтаһыңмы?**

- Элек һирәгерәк ҡайта инем, хәҙер йышыраҡ йөрөргә тырышам. Эштән бушауы ҡыйын, әлбиттә, шулай ҙа айына бер тапҡыр булһа ла атай-әсәй янында булырға, тигән һүҙ әйткәнмен үҙемә. Улар бит олоғая, шуға хәҙер күрергә, аралашырға кәрәк. Аҙаҡтан, мәле үткәс, фотоларға ҡарап түгел. Иглинға, яҡын булғас, ҡайным менән ҡәйнәмдәргә аҙна һайын йөрөйбөҙ.

Ҡырҡ йәш булһа ла, үҙеңде бала итеп тояһың. Юҡҡа әйтмәйҙәр бит, атай-әсәйең булғанда, һин - бала, тип. Инәйҙән (беҙҙә әсәйҙе, инәй, тиҙәр) һөйөлөп ҡалғы килә. Өфөгә кире киткәндә ул ярты донъяһын төйәп ебәрергә әҙер. Юҡ, һыймай бит, ул тиклемде ашап та бөтөрә алмайбыҙ, тиһәң дә, сумка-сумка итен, һөт-ҡаймағын, башҡаһын сығара. Күңелен ҡыймайым, тип, алаһың. Беҙҙең өсөн тырышалар бит. Әле лә өс һыйыр аҫрайҙар, бал ҡорттары тоталар, ҙур ергә баҡса сәсәләр. Мөмкинлек булғанда, бесән әҙерләргә, башҡа эштәрҙә ярҙам итергә тырышам.

**▸ Һине мин бик әүҙем кеше тип беләм. Спорт менән мауығаһың, сәйәхәттәр ҡылаһың, ҡурайҙа уйнайһың, яңы һөнәрҙәр үҙләштерәһең...**

- Спорт менән бала саҡтан мауығам. Аяҡҡа кейергә кеда булмаһа ла, малайҙар менән, атайымдың балыҡ тота торған ауын сәлдереп, килештереп ҡапҡа эшләп, йәшел үләндә футбол типтек. Күрше Әлдрәхим ауылында уҡыған ярыштарға үҙебеҙҙең команда менән сыға торғайныҡ. Һабантуйҙарҙа гел икенсе-өсөнсө урындарҙан төшмәнек. Үҙем капитан булдым.

Өфөлә профессор Ирек Сафин иҫтәлегенә мини-футбол буйынса республика турниры үтә. Һуңғы биш-алты йылда унда даими ҡатнашырға тырышам. Иң уңышлы сығышыбыҙ дүртенсе урынға өлгәшеү булды.

Йүгереү ауыл балаһы өсөн - тәбиғи күренеш. Йүгереп йөрөп ишек алдында эш эшләйһең, йүгереп йөрөп мал ҡайыраһың. Дүрт саҡрымда ятҡан күрше ауылдағы мәктәптән йыш ҡына малайҙар менән ярыша-ярыша йүгереп ҡайта торғайныҡ. Биш йыл элек күнекмәләргә ныҡлап тотондом. Өфө марафонында яулаған беренсе үрем 10 километр арауыҡ булды. Шунан ике йыл рәттән 21 саҡрымды йүгерҙем. Быйыл беренсе тапҡыр классик марафонды - 42 километрҙы - тулыһынса "алдым". 18 октябрҙә "Өфө мәрйене" ("Уфимское ожерелье") маршрутын - 63 саҡрым 300 метр араны - үттем. Һигеҙ сәғәт тә ун минут ваҡыт китте.

Ҡышҡыһын саңғыға баҫам. Ярыштарҙы ҡалдырмаҫҡа тырышам. Былтыр 10 саҡрым араға 3-сө спорт разряды нормативын үтәнем. Эшкә көн һайын велосипедта йөрөйөм. Бер осҡа өс километр сыға.

Ҡайҙа барһам да, үҙем менән ҡурай йөрөтәм. Тәбиғәттә, төрлө сараларҙа, ҡунаҡтарҙа мотлаҡ Салауат көйөн уйнайым. 27 ноябрҙә Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда Башҡортостан гимнын башҡарҙым. Был ниәтте әллә ҡасандан бирле хыялымда йөрөтә инем.

Малай саҡта уҡ ҡурайҙа һыҙғыртып өйрәнгәйнем. Ауылыбыҙҙа бер генә ҡурайсы була торғайны, ул да инсульттан һуң уйнауын ташланы. Биш йыл элек, лицейҙа бергә уҡыған егеттәрҙән һорашып, ҡурайҙа өйрәткән Ирғәле Сәхей улы Байрамғолов менән таныштым. Ул Өфөнөң 5-се музыка мәктәбендә эшләй. Дәрестәренә йөрөй башланым. Ноталар станы буйынса өйрәтте уйнарға. Ваҡыт етмәй башлағас, интернет аша үҙаллы шөғөлләндем. Һандарға күсерелгән ноталар ярҙамында күнекмәләр үттем. Хатта үҙем өсөн ун һигеҙ биттән торған методичка эшләп алдым. Уны баҫтырып сығарыу ниәте лә тыуҙы. Сөнки ҡурайҙа үҙаллы уйнарға өйрәнергә теләгән кеше интернетта баяғы һандар нотаһын бер урындан, композицияны икенсе урында эҙләргә мәжбүр. Үҙ тәжрибәм нигеҙендә уларҙы мин бер урынға йыйҙым. Әйтәйек, Шайморатов генерал көйөн алһаҡ, һандар менән уйымдарҙы асып-йәбыу тәртибен бирәм һәм миҫал итеп уйнап та күрһәтәм.

Бер урында тормайым, йыл һайын медицинала яңы һөнәр үҙләштерәм. Функциональ диагностика табибына, психиатрға уҡып алдым. Махсус хәрби операция барған шарттарҙа психиатрия ярҙамына мохтаждар һаны арта, бер-ике йылдан был медицина ярҙамы бик актуаль буласаҡ. Инде ЭХО, УЗИ йүнәлештәрен өйрәнергә ниәтем. Үҙ клиникамды асыу - иң ҙур хыялым.

Былардан башҡа юрислыҡҡа уҡыйым. Сөнки хәҙерге ваҡытта пациенттар экстремизмы киң тарала, табиптарға эшләүе ауырлашҡандан ауырлаша бара. Пациенттар үҙҙәре лә йыш ҡына яҡлауға мохтаж.

Юридик белем алыуға иһә үҙ тормошомда килеп тыуған сетерекле хәл этәрҙе. Үкенескә ҡаршы, күп балалы ғаиләмдең торлаҡҡа хоҡуҡтарын яҡлап, өс йыл ҡала хакимиәте менән дәғүәләшергә тура килде. Ун ике йыл торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн сиратта торҙом. Мәле килеп еткәйне, аҡсаның бәләкәй бер өлөшөн генә биреп, ҡалғанын бюджетҡа ҡайтарҙылар. Судтың бөтә инстанцияларын да үттем, адвокаттарға 350 мең һум самаһы аҡса түктем. Ҡайһы бер юридик коллизияны үҙемә сисергә тура килде. Шунда аңланым - был тормошта үҙең өсөн генә лә юрист булырға кәрәк. Аллаға шөкөр, йөрөүҙәрем бушҡа булманы, хәҙер фатирым бар.

Сәйәхәткә килгәндә инде, һуңғы йылдарҙа башлыса Башҡортостанды гиҙәбеҙ. Сит ил-

✔ ***Төрөктәр көн һайын ун һүҙҙе ятлап алыу бурысы ҡуя торғайнылар беҙгә лицейҙа. Аҙна аҙағында кем иң күп һүҙ үҙләштерә, шул киноға бара, йә башҡа приздарға лайыҡ була ине. Мин дә ошо системаны ҡулланырға тырышам.***

# БУЛЫРҒА ТҮГЕЛ,

## ынтылам...

дәргә сығыуы бик ҡыйбатҡа төшә күмәгебеҙгә. Республикабыҙҙың барлыҡ матур урындарын да күререгә тырышабыҙ. Һуңғы йылдарҙа Торатауҙа, Мораҙым тарлауығында булдыҡ, Турахан кәшәнәһен барып күрҙек, "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексында, Дәүләкәндәге Әхиәр Хәкимов музейында булдыҡ.

**Көслө милли рух, инглизсә иркен һөйләшеү, яңы белемгә ынтылыу, әүҙем һәм сәләмәт тормош рәүеше, күп балалы ғаилә башлығы, үҙ һөнәренең оҫтаһы - былар барыһы ла һиңә хас сифаттар. "Дөрөҫ" кеше булырға ынтылыуға нимә этәрә һине?**

- Һәр кем үҙенсә инде. Үҙ юлын үҙенсә һала. Кемдер ҡат-ҡат "Матрешка"ның иң төпкө эсенә инеп ултыра ла, бер кемдә лә күрмәйем, бер кемдә лә ишетмәйем, тип йәшәй. Икенселәр - уларҙың киреһе. Минә, "выскочка", тип тә әйткәндәре бар. Мин бит кемгәләр яҡшы күренер өсөн тырышмайым - барыһы ла үҙем өсөн, эске бер инаныуым ҡушыуы буйынса йәшәйем. Йыл башында үҙемә, шуны эшләргә, быны енеп сығырға, нисек булырға, нимәгә өлгәшергә, тип бурыстар ҡуям, һүҙ бирәм. "Забег обещаний" тип атайым уны. Әйтеп үтеүемсә, быйыл марафон йүгерҙем. Әҙерләнмәнем түгел уға, әҙерләндем, шулай ҙа һуңғы ун километрҙы саҡ үттем, туктай-туктай, атлап йә имгәкләп тигәндәй. Аяғым ҡорошто, көҙән йыйырҙы. Барыбер финишҡа еттем. Ҡатыныма, башҡа дистанцияға сыҡмайым, тиһәм дә, тағы бер бейеклекте - 63 саҡрымдан ашыу "Өфө мәрйене" маршрутын "алдым". Кеше - үҙ асылы менән, ҡомһоҙ зат бит ул. Шуның касафатылыр. Быныһы - юмор, әлбиттә. Шуны ла әйтергә кәрәк, алыҫ араға йүгереү ниндәйҙер ләззәт бирә, бәлки, үҙенде енеү тантанаһылыр. Старт һыҙығына дүрт йәҙләп кеше баҫкайны, финишҡа тик 65-е генә етте. Миллионлы Өфө һәм алты тиҫтә. Шул иҫәптән - мин дә! Ҡаҙаныштыр, тим.

Эйе, инглиз телен яҡшы беләм һәм ул минә нык ярҙам итә. Сөнки табип һөнәрендә, ғөмүмән, медицина өлкәһендә конкуренция көслө. Бүлек мөдире булараҡ та, йәштәр менән тәжрибә уртаҡлашыу йәһәтенән дә белемемде даими камиллаштырып барырға тейешмен. Рәсәйҙә һаулыҡ һаҡлау тармағы яҡшы үсешкән, шулай ҙа донъя ҡаҙаныштарын да күҙәтеп барыу кәрәк. Инглиз теле Көнбайыш илдәре асыштары менән ваҡытында танышырға ярҙам итә. Асылда, мин коллегаларымдан бер-ике аҙым алдараҡ барам. Онлайн форматта үткән йөрәк сирҙәре, гематология, акушерлыҡ һәм гинекология буйынса семинарҙарҙа даими ҡатнашам. Ошо йүнәлештәр буйынса халыҡ-ара берекмәләрҙә ағза булып торам.

Белемгә ынтылыш бала саҡтан киләләр ул, тип уйлайым. Башҡорт-төрөк лицейына ҙур конкурс аша үтеп килгәс, кире етенсе синыфҡа ултырҙым. Миненсә, ҡайһы саҡ, бер аҙым артҡа сигеп, ике аҙым алға атлау отошлораҡ. Русса ла һөйләшә белмәгән ауыл малайы нисек итеп инглизсә барған дәрестәрҙе үҙләштергәнмен? Сәмләнеп, ҡаланан килгән иптәштәремдән ҡалмаҫҡа тырышып уҡыным. Әйткәйнем инде, гел яҡшы билдәләренә өлгәштем, предмет олимпиадаларында, конкурстарҙа ҡатнаштым. Бигерәк тә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, биология менән мауыҡтым. Ҡала кимәлендә еңеүҙәрем дә булды. Ул саҡта Өфөлә Бәләкәй Академия бар ине. Беҙ унда 9-10 синыфтарҙа, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен укып, анализдар менән сығыш яһаныҡ. Һуңғы эшем Яныбай Хамматовтың "Төньяҡ Амурҙары" һәм Ғайнан Хәйриҙең "Боролош" романдары буйынса булды. Бигерәк тә, "Урал батыр" эпосын ятлап алыуым һәм конкурстарҙа ҡатнашыуым дөрөҫ аҙым булғандыр. Текстарҙы тиҙ отоп алыу һәләтем асылды. Университетта уҡығанда, сәғәт ярым барған яҙма имтихандар ваҡытында, үҙемдекен тиҙ генә эшләп бөтөм дә, дүрт-биш кешегә билет яуаптарын яҙып бирә торғайным.

Һәр кеше тормошонда кризис мәлдәре кисерә. Мин дә уларҙы үттем, яҙыҡ юлдан китә яҙҙым. Ҡатыным Альвинаға рәхмәт, упҡынға ҡолаған ерҙән йолоп алып ҡалды. Утыҙ биш йәштәр тирәһе ине, дөрөҫ йәшәмәйем бит, тигән уй башыма һуҡты һәм шул ғүмеремдәге ыңғай үҙгәрештәргә сәбәпсе булды. Ун йыл хеҙмәт түккән, уны яныһан тергеҙеү бәхете тейгән Медицина университеты эргәһендәге йөрәк сирҙәре клиникаһынан киттем. Унда беҙ, эшләүҙән үҙебеҙ туктатҡан йөрәкте ҡулға алып, төрлө операциялар яһай инек.

"Дөрөҫ" кеше булырға түгел, ә дөрөҫ йәшәргә ынтылам. Шул ғына.

**"Телеңдән, милләтеңдән оялма! Онотма тамырҙарыңды!" - тип яҙып ҡуйғанһың Салауат Юлаевтың тыуған көнөндә "Бәйләнештә" селтәрендәге сәхифәңдә. Инглизсә яҡшы аралашаһың һәм ул һиңә өҫтәмә мөмкинлектәр аса. Ә бына тыуған башҡорт телен белеү эшеңдә, тормошоңда нисек сағыла?**

- Ғүмеремдең ошо миҙгеленә еткән минең өсөн иң үкенесле мәл - ҡыҙҙарыма тыуған телгә ҡарата дөрөҫ тәрбиә бирә алмауым. Эш тә эш, тип байтаҡ ғүмер үтеп киткән. Хәҙер килеп, балаларым үҙ теленән ояла. Ошо хәл бигерәк тә эсте бошора. Һуңлап булһа ла, хатамды төҙәтергә тырышам хәҙер. Машинала йөрөгәндә "Юлдаш" радиоһын ҡуям, төрөктәрҙең тел өйрәтеү системаһындағы кеүек, әгәр, мәҫәлән, ҡыҙҙарымдың береһе шоколад һорай икән, мин башҡортса һүҙ яҙам да, уҡырға ҡушам. Дөрөҫ уҡый алмаһа, әйтәйек, "минә"не "минә" тип уҡыһа, үтенесе үтәлмәй ҡала. Йә һүҙҙе дөрөҫ әйткәнсе ҡабатлай уны. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та хәлдәр булғылай. Интерактив таҡта һатып алдым. Шунда һүҙҙәр яҙып өйрәнәбеҙ. Баяғы төрөктәр көн һайын ун һүҙҙе ятлап алыу бурысы ҡуя торғайнылар беҙгә лицейҙа. Аҙна аҙағында кем иң күп һүҙ үҙләштерә, шул киноға бара, йә башҡа приздарға лайыҡ була ине. Мин дә ошо системаны ҡулланырға тырышам. Өлкән ике ҡыҙымдың да банк картаһы бар, "премия"ны шунда күсерергә лә мөмкин бит.

Эштә коллегалар менән аралашыу, әлбиттә, русса. Райондарҙан килеп йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар үҙ телендә һөйләшергә ояла. Мин улар янына барып, көлдөрөп, башҡортса йырлап, күҙҙәрен асып китәм. Элекке эшемдә ауырыуҙар күпселектә ауылдарҙан булды, бигерәк тә әбей-бабайҙар туған телдә белгән табипҡа нығыраҡ ылыҡты. Ҡала дауаханаһы булғас, бында башлыса рус телле пациенттар. Хәҙер бит беҙҙә Урта Азия халыҡтары, әзербайжандар күп. Төрөксә лә белгәс, уларға яҡын телдә - йә башҡортса, йә төрөксә - өндәшһәм, ҡыуанып китәләр. Табипҡа ышаныстары арта.

**Батырыбыҙ Салауат һинең өсөн кем ул? "Салауат тураһында йыр һәр тарафта яңғыраһын", тип тә яҙып ҡуйғанһың...**

- Батырыбыҙ Салауат - ысын башҡорт патриотының, үҙен башҡорт тип һанаған һәр кемдең кумиры. Совет осоронда тыуған быуын уның рухында тәрбиәләнде. Хәҙер, төрлө уйҙырмалар яҙып, һөйләп, кемдәр генә Салауаттың бөсен төшөрөргә маташмаһын, ул минең өсөн - идеаль шәхес. Яуға күтәрелгәндә уның аҙағы нимә менән бөтәсәген белгән бит ул. Шуға ҡарамай, йәш кенә булһа ла, ҡурҡмай алға барған. Шул уҡ ваҡытта батырыбыҙ - шағир ҙа. Ғөмүмән, ижадҡа ынтылыу көслө кешеләргә хас. Минең дә ҡурайым һәр саҡ янымда. Ҡайҙа барһам да иң элек Салауат көйөн уйнайым.

**Һинең тормошоң 12 йәштән Өфө менән бәйле. Үҙеңде ысын ҡала кешеһе итеп тояһыңмы?**

- Юҡ, мин үҙемдә ауыл кешеһе итеп тоям һәм шулай булып ҡалам да. Әлбиттә, артҡа әйләнеп баҡһаң, ул малай бик йыраҡта тороп ҡалған.

Ҡала нисек була һуң? Сағыштырып ҡараһаң, хәҙер ҡала менән ауылдың айырмаһы бик үк ҙур ҙа түгел. Ҡалала интернет, ауылда ла. Ауылда ғүмер буйы һыуҙы ташып эстеләр, хәҙер ул крандан аға, йыуынтыһы китеп тора. Тышҡа сығыу унайлығы ла өйҙә, керҙе лә машинка йыуа. Торба газы килде, утын ягып аҙапланаһы түгел.

Яҡшымы - яманмы, ауылда ла мөнәсәбәттәр аҡса менән баһалана башланы. Элекке шикелле ҙур эштәрҙе өмәләп атҡарыу онотола бара. Аҡса менән бесән сабалар, ташыйҙар, йорт күтәрәләр һәм башҡалар. Ғөмүмән, бында ла, тегендә лә - капитализм...

**Ҡурайға әйләнеп ҡайтайыҡ. Милли музыка ҡоралында эштә, ҡунаҡтарҙа, ял иткәндә уйнайһың. Тәбиғәткә сыҡҡанда уны мотлаҡ яңғыратыуың бер йолаға әүерелгән. Ҡулына ҡурай алғанда нимәләр кисерәһең?**

- Эйе, унайы килгәндә, ҡурайҙа уйнарға тырышам. Бөтәһе лә бит профессиональ ҡурайсыларҙы тыңламай. Көй сығара башлаһаң, үҙең киңәнес алаһың. Остазым Ирғәле Сәхи улы, беренсе көйҙө өйрәнһән, артабан үҙе килә ул, тигәйне. Ысынлап та, шулай. Сит ил студенттарына лекция бирерҙән алда ҡурайҙа Башҡортостан гимнын, Салауат көйөн уйнап ишеттерҙем. Мин - башҡорт, һәм башҡортлоғомдо иң элек ҡурай аша еткерергә теләйем.

Ҡурай минең өсөн - ул ял минуттары ла (заманса әйткәндә - релаксация), хис-тойғолар менән уртаҡлашыу ҡоралы ла. Тәбиғи ҡурай эшләй башланым. Һорай торғас, атайым ҡырҙан егерме ҡурай алып ҡайтып бирҙе быйыл. Беҙҙең яҡта ул һирәк осрай. Өс урынды таптан. Алып барып күрһәтергә вәғәҙә бирҙе.

**Ғаиләлә өс бала. Һин - табиб-анестезиолог, йыш ҡына төнгө дежурҙа булаһың. Шул уҡ мәлдә өҫтәмә уҡыу, төрлө мауығыуҙар, сәйәхәттәр... Ҡайҙан ваҡыт табаһың? Көн тәртибен алдан билдәләп ҡуяһыңмы? Ғаилә башлығы, атай бурыстары икенсе планға ҡалмаймы?**

- Үкенескә ҡаршы, балаларға күп ваҡыт бүлә алмайым. Иртән етелә сығып китәм. Әле, мәҫәлән, смена, дежур менән бергә утыҙ ике сәғәт эшләп, саҡ бушаным. Иртәгә тағы ошондай уҡ эш графигы. Өлкән ҡыҙым Диана көнө-төнө китап менән ултыра, барыһын да аңлап ҡабул итә. Риана әле балалыҡтан сыҡмаған, артыҡ көсөргәнеп уҡымай. Бәләкәсебеҙҙе, Лилиананы, гел үҙем менән алып йөрөргә тырышам. Һуңғы тапҡыр ауылға ла бергә ҡайттыҡ. Уға наҙ күберәк эләгә. Хәләл ефетем Альвинаға лә, әлбиттә, иғтибар етмәй. Эштән һуң йүгерергә сығып китәм, тағы дүрт-биш сәғәткә юғалам. Өйҙәгеләр борсола. Шуға ял көндәрен, эштән буш булһам, егеттәр футбол уйнарға сығып киткәндә лә, ғаилә менән үткәрергә тырышам. Минә әйтәләр ул, нисек барыһына ла өлгөрәһең, тип. Бар нәмәгә лә өлгөрөп булмай шул, өлгөрһәм, бик ҡыуанып инем дә. Шулай ҙа маҡсаттарымды тормошҡа ашырырға тырышам. Ғаиләлә ялымды, отпускамды көтөп көнө торалар. Йылараҡ ҡына аквапаркта булдыҡ. Сит илдәргә лә йөрөнөк, хәҙер фатирға ремонт эшләткәс, сәйәхәтте Башҡортостан менән сикләп торҙоҡ. Юрғанды аяҡҡа ҡарап һуҙыу, тигәнде балаларға төшөндөрөргә тырышам. Бер нәмә лә күктән төшмәй, хеҙмәт менән табыла - шуны белеп үҫергә тейештәр. Уңыштарын баһалап, иҫәптәренә "бонус" аҡсаһы һалам, ә инде тейешлене эшләмәһәләр, "санкция" ла индерәм, бер-ике көнгә карталарына блок ҡуям.

Риана биология менән етди шөғөлләнә, мин уға был фән буйынса һәр яҡлап ярҙам итәм. Инглиз теле буйынса ла күп саҡта бергә шөғөлләнәбеҙ.

**Һөйләшеүҙе йомғаҡлап, бөгөнгө ҡала башҡорто портретын нисек һүрәтләр инең... Миллионлы ҡалала башҡорт булып ҡалыу мөмкинме ул?**

- Миллионлы ҡалала башҡорт булып ҡалырға мөмкин, миненсә. Тик беҙҙең халыҡ бигерәк баҫалҡы. Мин, тип алға сығып бармай. Телдән оялыу ҙа бар. Үҙемдең эргә-тирәләге башҡорттар миҫалынан сығып әйтәм быны. Рухлы егет-ҡыҙҙар бик күп, тик улар үҙҙәрен күрһәтеп бармай. Лицейҙа бергә уҡыған Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла малайҙары ҡандай ажар ине. Бәхәс ҡора инек, ҡайҙа ысын башҡорттар йәшәй, тип. Баймаҡтағы, Бөрйәндә, тиҙәр, ә мин, Салауат ҡайҙа тыуған һуң, тимәк, беҙҙә ысын башҡорт, тип нығыйым. Ошо егеттәр баҫылды, тауыштары бөтөнләй сыҡмай. Әүҙемдәр иҫәбендә Айнур Ғүмәровты, химия буйынса донъя чемпиондары әҙерләгән синыфташымды, әйтә алам. Милләтебеҙ менән ғорурланыр сәбәптәр күп. Тарихыбыҙҙы ғына алайыҡ, тағы ҡайһы халыҡтың шундай шанлы ла, данлы ла үткәне бар? Бөгөн "Әй Йола" бөтөн донъяға танылды. Төркөмдөң йырсыһы Әҙиләне үҙемдең ҡыҙҙарыма өлгө итеп ҡуям, ана, ҡарағыҙ, урыҫ телле булһа ла, башҡортса ҡайһылай матур йырлай, тим.

Үҙ телебеҙҙә һөйләшһәк, интернет селтәрҙәрендә үҙебеҙсә аралашһаҡ, миллионлы Өфөлә лә башҡорт булып ҡалырбыҙ, тигән ышаныстамын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайҙа йәшәүеңә ҡарамай, милли йөҙөңдө һаҡлап ҡалырға мөмкин. Быға миҫал һәм күптәргә өлгө - әйлә ырыуы башҡорто, табип Илдар Ришат улы Кәримов.**

**Байгилде МОТАЛЛАП**
**әңгәмәләште.**

*✓ Бик боронғо заманда Урал батырға Аҡбуҙат төшөрөлдө. Урал батыр уға атланды, бөтөн ен-пәрейҙе ҡырҙы. Ен-пәрей, дейеү ер аҫтына, һаҙлыҡҡа төшөп боҫто.*



ӘКИӘТ СЦЕНАРИЙЫ

# УН ИКЕ ЙЫЛДАН ҺУҢ ОСРАШЫУ

**Ҡатнашалар:**
**Ҡыш бабай.**
**Ҡарһылыу.**
**Дейеү.**
**Дейеүбикә.**
**Албаҫты.**
**Үрғуян.**
**Пони.**
**Аҡтырнаҡ.**
**Суртан.**

***Ҡыш бабай.*** Сәләм һеҙгә, сәләм, дуҫтарым, хөрмәтле, ғәзиз ҡунаҡтарым! Беләм, күңелегеҙ менән һеҙ беҙҙең янда, сөнки Яңы йыл килә ергә, Яңы йыл!

***Ҡарһылыу.*** Ана, көмөш тояҡтар сыңлай. Хуш киләһең, Йылҡы йылы!

***Ҡыш бабай.*** Әйткән һүҙең хаҡ, Ҡарһылыу, көмөш сың - Яңы йылдың сәләме. Һәм беҙ ошо сихри сыңға эйәреп, Ер шары буйлап еләбеҙ!

***Ҡарһылыу.*** Осабыҙ! Талпынабыҙ! Шатлыҡ, ҡыуаныс таратабыҙ!

*Үрғуян инә.*

***Үрғуян.*** Ә мин өлгөр Үрғуян тып итеп килеп тә еттем!

***Ҡыш бабай.*** Афарин, шеш ҡолаҡ Үрғуян!

***Үрғуян.*** Ҡолаҡ бар, шөкөр! Күҙҙәр тағы ла шәп, береһе - көньяҡҡа, икенсеһе төньяҡҡа ҡарай, башты борорға ла кәрәкмәй.

***Ҡыш бабай.*** Бик хуп! Әләйгәс, Ҡыш бабайҙан һинә ҙур бурыс!

***Үрғуян.*** Ниндәй?

***Ҡыш бабай.*** Көньяҡтан да, төньяҡтан да ҡунаҡтар киләсәк. Эркелешеп килә улар. Ҡунаҡтарҙы, оҫталарҙы ҡаршы алаһың. Репетиция үткәрәһең.

***Үрғуян.*** Ә һеҙсе, Ҡыш бабай, Ҡарһылыу?

***Ҡарһылыу.*** Беҙгә, Яңы йыл сәләмен таратып, Ер шарын урап сығырға кәрәк.

***Ҡыш бабай.***
Аҡбуҙ аттарҙа елдереп,
Оло байрам килгәнен
Бар донъяға белдереп,
Уйнатып та, көлдөрөп...

***Ҡарһылыу.***
Ер шарын урап үтеп,
Аҡ һаҡаллы Ҡыш бабай
Килеп баҫыр тып итеп.

***Үрғуян.***
Бында иҫ киткес тыныс,
Бар дуҫтарға ҡыуаныс.
Һис янамай ҡурҡыныс,
Күңелемдә ышаныс.

***Ҡыш бабай.*** Дуҫтарыбыҙ йыйылып бөткәнсе, тып итеп килеп тә баҫырбыҙ. Байрам башлана.

***Үрғуян.*** Кәмиттәнме, Ҡыш бабай?

***Ҡыш бабай.*** Кәмит мотлаҡ! Шуныһы ниндәй байрам, ти, ул! Тәжрибәм ҙур, быйыл да ҡунаҡтар күп булыр. Саҡырылғаны ла, саҡырылмағаны ла. Байрам гөрләп торор.

***Ҡарһылыу.*** Әкәмәттәре менән башты ҡатырыр.

***Ҡыш бабай.*** Ә ҡуҫтәнәсем мул булыр! Төпһөҙ тоғом әҙер.

***Үрғуян.*** Тоҡтоң төбө юҡмы?

***Ҡарһылыу.*** Изгелектең, яҡшылыҡтың үлсәме юҡ, ҡуян!

***Ҡыш бабай.*** Бәләкәстәрҙе таутау тәмлекәс көтә!

*Сығалар. Дейеү менән Албаҫты инә.*

***Дейеү.*** Ишеттеңме, Албаҫты?

***Албаҫты.*** Ишетмәгән ҡайҙа, ишеттем, Дейеү! Тау-тау тәмлекәс көтә.

***Дейеү.*** Нимәгә килгәнеңде онотма. Беҙ Йылҡы йылына ҡаршы!

***Албаҫты.*** Һин ҡаршы, шуға мине ялланың.

***Дейеү.*** Тотоп ауыҙлыҡлайбыҙ!

***Албаҫты.*** Иҫемдә! Бөтөн тәмлекәс миңә! Миңә!

***Дейеү.*** Бе-бе-бе...

***Албаҫты.*** Уй-уй, ҡыҙма, Дейеү. Башта әйт, нишләп йылҡыны яратмайһың?

***Дейеү.*** Ант итеп әйтәм, беҙ уларҙы күралмайбыҙ!

***Албаҫты.*** Шулай яуызмы ни ул?

***Дейеү.*** Яуыздың да яуызы. Бик боронғо замандa Урал батырға Аҡбуҙат төшөрөлдө. Урал батыр уға атланды, бөтөн ен-пәрейҙе ҡырҙы. Алыш ҡаты булды, еңде ул беҙҙе. Шунан алып, ерҙә халыҡ көсәйҙе. Ен-пәрей, дейеү ер аҫтына, һаҙлыҡҡа төшөп боҫто. Ә ат һаман - кешенең айырылғыһыҙ дуҫы. Бөгөн мин уларҙы айырам!

***Албаҫты.*** Мин нимә эшләргә тейеш?

***Дейеү.*** Һин бит - Албаҫты! Һикерәһең дә, һыртына менеп ултыраһың. Үҙем тышаулармын. Йылҡыны тышаулағас, кешеләр ҙә тышаулана.

***Албаҫты.*** Һин үҙең ҡурҡыныс, Дейеү... Мин нимәгә кәрәк?

***Дейеү.*** Кәрәкһең шул! Ат албаҫтынан ҡурҡа. Минән юҡ!

***Албаҫты.*** Нишләп беҙҙән ҡурҡа?

***Дейеү.*** Албаҫтылар борон-борондан ат ҡыуҙылар. Ялына йәбешһәләр, берәү ҙә ысҡындыра алмай.

***Албаҫты.*** Бәй, ул бит әллә ҡасан булған. Мин заман албаҫтыһы. Ат ҡыуғаным юҡ. Мин ҡыуған нәмә икенсе...

***Дейеү.*** Икенсе? Уныһы ҡалай була?

***Албаҫты.*** Атаҡ-атаҡ-атаҡ! Атты машина алмаштырғанға хан заман бит инде! Машина ҡыуабыҙ, төкөтәбеҙ, бәрелдерәбеҙ. Аунатабыҙ, тәгәрәтәбеҙ. Минең яратҡан машиналарым бар. Тойота, Хундай, БМВ, Сузуки... Лада ла бара.

***Дейеү.*** Етте-етте, туҡта.

***Албаҫты.*** Атты күргән юҡ.

***Дейеү.*** Уның ялы, ҡойроғо бар, тояҡтары сыңлап тора. Етмәһә, кешнәп сәләм бирә.

***Албаҫты.*** Тота алмаһам, нишләрһең?

***Дейеү.*** Хыялым бар. Күгәүен булып, йылҡы малын әсе тешләп, һикертеп-һикертеп бейетер инем. Ҙур булһа ла, күгәүенгә көсө етмәй уның.

***Албаҫты.*** Һуң, әйлән күгәүенгә. Мине ҡыҫтырма.

***Дейеү.*** Йылҡы Албаҫтынан ҡурҡа, әйттем бит. Һин уға атланһаң, уның көсө миңә күсә. Аттың арҡаһына менеп, ялына йәбешеп, ҡыуып алып китәһен. Тирләтмәйенсә, туҡтама. Шунан ул яна.

***Албаҫты.*** Ут булыпмы?

***Дейеү.*** Ахмаҡ! Атты тирләтеп яндыралар. Ана, тегендә ситлек



әҙер. Шунда тығып, ер аҫтына төшөрәм. Мәңгелеккә! Артабан Дейеү йылын иғлан итәм. План шулай.

***Албаҫты.*** Ә "ситлек" нимә була?

***Дейеү.*** Уф-ф, донъяны наҙан Албаҫтылар баҫты... Хәҙер алып киләм.

*Дейеү китә. Үрғуян инә.*

***Үрғуян.*** Ура-ура, йәнлектәр йыйыла. Репетиция шәп бара. Мин талантлы режиссер.

***Албаҫты.*** Сәрелдәк, һин кем? Ялың юҡ. Кешнәмәйһең... Үҙеңде хужа һымаҡ тотаһың.

***Үрғуян.*** Үрғуян мин. Ҡунаҡтарҙы ҡаршы алам. Репетиция үткәрәм. Һәм иң яҡын дуҫым пониҙы көтәм.

***Албаҫты.*** Ул кем?

***Үрғуян.*** Ыҡсым ғына ат. Мине арҡаһында ултырып йөрөтөргә ярата.

***Албаҫты.*** Үрғуян, һин ат яратаһыңмы?

***Үрғуян.*** Ныҡ яратам.

***Албаҫты.*** Үрғуян, ана, эт өрә.

***Үрғуян.*** Аҡтырнаҡ! Ул ҡунаҡтарҙы һаҡлай.

***Албаҫты.*** Уф, ҡот китте бот төбөнә. Эттәр күрәҙәсе бит ул. Миңә ташланмаҫмы... Ней, Дейеүе лә юҡ булды.

***Үрғуян.*** Нимә тиһең?

***Албаҫты.*** Мин эт өргәнен яратмайым.

***Үрғуян.*** Аңланым. Аҡтырнаҡ! Кил әле. Бәй, нишләп мороноң сирылды?

***Аҡтырнаҡ.*** Ят ҡунаҡтар бар. Йәнлек түгел, кеше лә түгел, еҫенән тоям.

***Албаҫты.*** Абау-абау, байрамға кем теләй, шул килә. Паспорт һорамайҙар.

***Үрғуян.*** Ҡыш бабай саҡырылғаны ла, саҡырылмағаны ла килер, тине. Килһендәр. Киттек, Аҡтырнаҡ, репетицияға. Тик шаулама.

***Албаҫты.*** Пони исемле атыңды үҙем ҡаршы алам, Ҡуян. Үҙекәйем.

*Аҡтырнаҡ, Үрғуян китә.*

***Албаҫты.*** Тып-тып кем килә? (Пони инә.) О-о-о, ялы бар, ауыҙлығы бар. Атаҡ-атаҡ, ат ошолай бәләкәс кенә буламы ни? Һа! Дейеү ахмаҡ мине мыҫҡыл иткән бит! Был кәтүккә нисек атланырға? Минең тубыҡтан ғына. Үҙемә күтәреп йөрөтөргә тура килә. Нинә тирләтеп яндырырға, ти? Йүгерә алмай бахырсыҡ. Ярай, алып ҡасайым. Уны бит тәмлекәскә алмаштырам. Бартер. Әллә үҙемә уйынсыҡ итеп алайыммы... Ат!

***Пони.*** Әү.

***Албаҫты.*** Атлан минең елкәмә! Ана шулай! И-и-и-и, енеллеге!

***Пони.*** О-о-о, донъя бейектән ҡалай матур!

***Албаҫты.*** Меҫкен-меҫкен йылҡы. Мәхлүк малҡай. Киттек сәйәхәт итергә.

***Аҡтырнаҡ.*** Пониҙы ҡайҙа алып киттең, ят ҡунаҡ?

***Албаҫты.*** Турист маршруты асылған. Ҡыш бабай күрһәтергә ҡушты.

***Аҡтырнаҡ.*** Ишетмәнем. Пони, төш!

***Пони.*** Алып барһын. Мин бөгөн ат түгел. Мин һыбайлы. Оһо-һо! Офоҡ асылды. Албаҫты, һинә рәхмәт!

***Аҡтырнаҡ.*** Оҙаҡламағыҙ.

***Албаҫты.*** Бәләкәстәр - тейен, һыуһар, йомран, ағуна, ҡор һәм башҡалар, минең арттан эйәрегеҙ. Туристик сәйәхәт. Оттом! Был бәләкәстәрҙе ситлеккә бикләрмен. Дейеүҙән маҡталырмын.

*Дейеү инә.*

***Дейеү.*** Албаҫты! Тауыш-тыны юҡ. Нимәгә килгәнен онотманымы? Ҡайҙа булды? Ышан Албаҫтыға... Ҡана, шылтыратайым. Але, һин ҡайҙа? Йылҡыны урланыңмы, тиһеңме? Ысынмы? У-у-у, һиндәге тиҙлек! Үәт, әй! Нисек өлгөрҙөң? Ҡалай шәп булып сыҡтың, Албаҫты.

***Аҡтырнаҡ.*** Уау-уау, саҡырылмаған ҡунаҡ, нимәгә дөбөршатыр бейейһең?

***Дейеү.*** Уңған, егәрле әкиәт геройҙары шыршыны биҙәй, репетиция яһайҙар. Бөтәһе лә минең өсөн! Һа!

***Аҡтырнаҡ.*** Кем һин, хыялый?

***Дейеү.*** Сюрприз. Ҡыш бабай был турала хәҙергә бер нәмә лә белмәй. Әллә беләме? Ана, ашығып килә ята.

*Ҡыш бабай, Ҡарһылыу инә.*

***Ҡарһылыу.*** Ҡыш бабай, Ер шары шундай матур бөгөн, ивет!

***Ҡыш бабай.*** Эйе, ҡыҙым, бөтөн донъя нур эсенә сумған. Мөғжизә! Туҡта, ҡайҙа булды минең тоғом?

***Ҡарһылыу.*** Бәй, Ҡыш бабай, тоҡто түгел, таяғыңды ла санала ҡалдырҙың бит.

***Ҡыш бабай.*** Әй, әттәгенәһе, Яңы йылға килһәм, йөшәрәм дә китәм, әйтәгүр. Таяҡ онотола. Ә тоҡто нинә онторға? Мине ҡарап йөрө, ҡыҙым. Тағын берәй нәмәне онотоп ҡалдырмайым.

***Ҡарһылыу.*** Минһеҙ Ҡыш бабай тере ҡулһыҙ! Бүләк, бүләк... Киттек кире. Теүәлләйем.

***Дейеү.*** Үҙем теүәлләйем! Ҡыш бабай, мин Йылҡы йылын ҡыйлыҡҡа ырғыттым. Яңы йыл бөттө. Дейеү йылы килә. Миңә Ҡыш бабай кәрәкмәй, туныңды сис! Йыл хужаһы үҙем.

***Ҡыш бабай.*** Туҡта-туҡта, Дейеү. Ҡыҙма. Йылҡы йылы яҡынлаша ғына. Ашыҡмай тор.

***Дейеү.*** Хөрмәтле атың, ғәзиз малың, ҡәҙерле Йылҡың - Албаҫты ҡулында. Урланыҡ беҙ уны. Албаҫты ошо мәлдә йылҡының бөйөрөнә тибә лә, тибә, теге саба ла, саба... Аттың хәле бөтә, яна, харап була. Ышанмаһаң, мә, тыңла. Але, Албаҫты. Йылҡы әле тереме?

***Албаҫты.*** Тереләрҙән тере!

***Дейеү.*** Атлана алдыңмы? Яндырҙыңмы, тием шул хайуанды?

***Албаҫты.*** Үҙем яндым, Дейеү! Ул мине ҡыуа ла ҡыуа, типкесләй ҙә типкесләй. Тояғы үткер. Хәл бөттө.

***Дейеү.*** Кем кемде типкесләй?

***Албаҫты.*** Аңлым. Яндырҙы мине! Һыу! Һыу бирегеҙ.

***Дейеү.*** Бер нәмә лә аңламайым...

***Үрғуян.*** Нимәһен аңламайһың? Ул бит Пониҙы елкәһенә һалып сығып китте. Пони тамам шашҡан икән, ыҙалата Албаҫтыны!

***Дейеү.*** По...ни... Ниндәй пони?

***Ҡарһылыу.*** Эх, Дейеү, Дейеү...

***Ҡыш бабай.*** Ай, әттәгенәһе. Ҡоланы бит Дейеү. Гөрһөлдәп ауҙы. Кемдә бар йөрәк дарыуы!

***Аҡтырнаҡ.*** Бар, бөтәһе лә бар. Мин үҙем - тиҙ ярҙам машинаһы.

***Үрғуян.*** Ҡарауылсы Аҡтырнаҡ булғанда бөтәһе лә ҡараулы.

***Ҡыш бабай.*** Але, Албаҫты, кире әпкил пониҙы. Ҡыш бабай бойора. Йәнһәт бул. Пони, дилбегәңде бушат! Албаҫтыны был яҡҡа бор.

***Ҡарһылыу.*** Ҡыш бабай, Дейеү иҫенә килде.

***Ҡыш бабай.*** Шөкөр, теүәләндек шикелле.

***Үрғуян.*** Байрам башлана. Ҡотлауҙар, бүләктәр!

**Аҡтырнаҡ.** Изге теләктәр, йылмайыу-көләүҙәр..

**Ҡыш бабай.** Хөрмәтле әкиәт дуҫтарым, иң матур, иң шәп бүләктәр һеҙгә. Тик һеҙҙең өсөн! Үрғуян, яраткан өңөндә тәмлекәстәр көтә. Тау булып өйөлгән. Аҡтырнаҡҡа яңы оя төҙөлгән.

**Ҡарһылыу.** Һыу донъяһы ла бында.

**Ҡыш бабай.** Суртан хан, һиңә бөтмәй торған ем! Әҙгә тиклем балыҡтарҙы ҡыуандыр.

**Аҡтырнаҡ.** Суртан мең тешен күрһәтеп йылмайҙы... Бүләк оҡшаны.

**Ҡыш бабай.** Ә бына Дейеүҙең һушын алған Пони! Төш инде Албаҫты елкәһенән.

**Пони.** Бында рәхәт!

**Ҡыш бабай.** Албаҫты - байрам ҡунағы. Хәлен алма.

**Пони.** Ҡыш бабай, миңә бүләккә...

**Ҡыш бабай.** Иҫемдә, Пони, иҫемдә! Көмөш йүгән һораның.

**Пони.** Юҡ, хәҙер кәрәкмәй! Көмөшө лә, алтыны ла, бриллианты ла. Мин хәҙер һыбайлы! Уйнаҡлап торған әрһеҙ Албаҫтыны бир!

**Албаҫты.** Ю-у-уҡ! Ҡотҡарығыҙ!

**Ҡыш бабай.** Пони, Албаҫтының ҡотон алдың. Әллә ҡайҙа сабып сығып китте.

**Ҡарһылыу.** Дейеү яңғыҙ ҡалдың, нишләйбеҙ?

**Дейеү.** Бирешмәйем. Яңы йылды Дейеү йылы тип иғлан итмәһәгеҙ, донъяғыҙҙы ҡоротам. Эсер һыуығыҙ бөтә. Ауыҙым тулы ут.

**Ҡыш бабай.** Йылғалар батшаһы, алтын таҗлы Суртан хан. Ниндәй яуап булыр? Башҡортостан йылғаларына һин хужа.

**Дейеү.** Йылғаларҙы ағыулаусылар былай ҙа етерлек. Суртан, минең яҡлы бул. Яңғыҙың бер нәмә лә эшләй алмайһың.

**Суртан.** Бәй, йылғалар бит диңгеҙ, океандарға тоташа. Беҙҙең армия ҙур. Ана, дельфин, акула, һигеҙаяҡ, диңгеҙ аты. Улар бихисап. Күрҙеңме дуҫтарҙы? Ниңә шымдың?

**Дейеү.** Дөрөҫөн әйткәндә, бер генә күлгә үслемен. "Йылҡы" тигән һүҙҙән ҡоторам. Йылҡысыҡҡан күлен ҡоротам! Унан бик күп йылҡы сыҡты. Үҙем шаһит! Күл дә юҡ, легенда ла юҡ. Урал батыр менән көрәш дауам итә. Йә, кем миңә ҡаршы тора ала?

**Дейеүбикә.** Мин!

**Дейеү.** Дейеүбикәм?...

**Дейеүбикә.** Танымайһың әллә? Бына ошо тинтәкте эҙләп, ерҙең аҫтын өҫкә әйләндерҙем.

**Дейеү.** Дейеүбикәм, һин нитмә...

**Дейеүбикә.** Күл дә юҡ, легенда ла юҡмы? Ҡыш бабай, Яңы йыл ҡунаҡтары, ғәфү үтенәм. Минең тиле Дейеүем кисәге менән бөгөнгөнө бутай. Йылҡысыҡҡан күле, имеш.

**Ҡыш бабай.** Кисәгене генә түгел, хатта мең йыллыҡтарҙы бутай.

**Ҡарһылыу.** Йылҡы йылы етһә, Урал батыр менән Аҡбуҙатты иҫенә төшөрә, шулаймы?

**Дейеүбикә.** Иҫенә генә төшһә, бер хәл. Ул бит ҡаңғырып сығып китә. Башына мажара эҙләй.

**Албаҫты.** Бөгөн генә ҡаңғырҙы түгелме?

**Дейеүбикә.** Юҡ, Албаҫты, ун ике йыл һайын ҡабатлана. Ун ике йыл һайын бер үк хәбәрен һөйләй. Ун ике йыл һайын ошо урында осрашабыҙ.

**Үрғуян.** Бер үк сценарийҙы ҡабатлайҙар. Фантазиялары юҡ икән. Былай булмай, икенсе юлы репетицияны үҙем үткәрәм.

**Дейеүбикә.** Үткәрерһең үткәрмәй ни. Уның башында тик этлек эшләү.

**Аҡтырнаҡ.** Уау-уау, ниндәй этлек? Эттәр был һүҙҙе бик яратмай.

**Дейеүбикә.** Ғәфү ит, Аҡтырнаҡ. Уйламай ысҡындырҙым.

**Дейеү.** Эйе-эйе, Дейеүбикәм ҡай саҡ уйламай ысҡындыра.

**Дейеүбикә.** Маймыллана башланы.

**Үрғуян.** Бында маймылдар ҙа бар. Улар был һүҙҙе...

**Дейеүбикә.** Ғәфү, уйламай ысҡындырҙым.

**Дейеү.** Дейеүбикә, Йылҡы йылы етһә генә, мин намыҫланам. Мин ғәрләнәм. Аңла шуны!

**Дейеүбикә.** Ишеттегеҙме, һаман бер үк балыҡ башын сәйнәй.

**Суртан.** Бында балыҡтар бар.

**Дейеүбикә.** Ғәфү, яңылыш ысҡынды. Намыҫлы Дейеү, йәһәт бул. Киттек!

**Дейеү.** Ҡайҙа?

**Дейеүбикә.** Ҡайтабыҙ. Байрам бөттө.

**Дейеү.** Юҡ, бында булабыҙ! Ошонда! Ҡайтмайым!

**Дейеүбикә.** Көҙәләнмә!

**Пони.** Бында кәзәләр бар.

**Дейеүбикә.** Ғәфү, яңылыш ысҡынды...

**Дейеү.** Бына шулай йәшәйбеҙ, Ҡыш бабай. Инде ете мең йыл көрәшәм.

**Ҡыш бабай.** Кем менән?

**Дейеү.** Урал батыр менән.

**Дейеүбикә.** Йылҡы малы менән тиген, исмаһам.

**Дейеү.** Эй, шулай бит әле. "Йылҡы" тигән һүҙҙән уртымда ут ҡайнай. Шул бер хыялым ғына бар бит минең.

**Дейеүбикә.** Хыял?

**Дейеү.** Дейеүбикәм, ба-ба-бабар ине... хәҙер ул да юҡ.

**Ҡыш бабай.** Хыялланырға кәрәк. Тылсымлы Яңы йыл төнөндә хыялдар тормошҡа аша.

**Дейеү.** Дейеүбикәм, аппағым, ишеттеңме? Хыялланырға кәрәк һиңә! Һиңә хыялланырға. Мине эҙәрлекләргә түгел.

**Ҡыш бабай.** Үҙеңдең хыялыңды һөйлә, Дейеү. Мин һиңә өндәштем.

**Албаҫты.** Уны мин беләм! Мин!

**Ҡарһылыу.** Албаҫты - Дейеүҙең әшнәһе. Бөтә серен белә.

**Албаҫты.** Эйе, беләм. Күгәүен булып, йылҡы малын тешләп-тешләп бейетер инем, тине.

**Дейеүбикә.** Əһә, шулай тинеме? Күгәүен, тинеме?

**Дейеү.** Дейеүбикә, мин бит шаярттым ғына. Албаҫтыны шаярттым.

**Дейеүбикә.** Ә мин шаяртмайым.

**Дейеү.** Хыял үҙгәрҙе. Мин үҙгәрҙем.

**Дейеүбикә.** Ә мин үҙгәрмәнем. Хыялыңды тормошҡа ашырам, ҡартлас. Торобо-боробо, ҡап-ҡоп, берҙе генә йот! Күрҙегеҙме, Дейеүем күгәүенгә әйләнде. Шырпы ҡабына һалдым, шыршыға элдем.

**Ҡарһылыу.** Уй-уй, шунан?

**Дейеүбикә.** Байрамды шунан тамаша ҡылыр.

**Ҡыш бабай.** Сәғәт төнгө ун икене һуғыу менән үҙ рәүешенә ҡайта ул, дуҫтарым. Тылсымлы һүҙҙең көсө бөтә

**Дейеүбикә.** Эйе, шунан тағы ун ике йылға тыныслана. Был беҙҙең аҙаҡҡы осрашыу түгел! Һеҙҙе Яңы йыл менән.

**Ҡыш бабай.** Албаҫты. Һинең турист маршруты тамаммы?

**Албаҫты.** Ҡыш бабай, һин ҡайҙан беләһең?

**Ҡыш бабай.** Бәй, нимә өсөн мин бында? Бер нәмә лә белмәһәм?

**Албаҫты.** Хәҙер алып киләм. Бәләкәс дуҫтарҙы әүрәтәм, уйнатам. Улар өсөн бөтәһен дә эшләйем. Ат та булам, ракета ла... Саптым.

**Аҡтырнаҡ.** Яңы йыл кәмитһеҙ булмай, тигәйне Ҡыш бабай.

**Үрғуян.** Кәмит кенәме, Аҡтырнаҡ? Саҡ Йылҡы йылынан ҡолаҡ ҡаҡманыҡ.

**Ҡыш бабай.** Үрғуян, аҡ һаҡалым менән ант итәм, минең өсөн Йылҡы - тере һүҙ. Уны тотоп, бикләп ҡуйып булмай.

**Ҡарһылыу.** Ул легенда һәм ысынбарлыҡ. Ул аманат һәм киләсәк.

**Ҡыш бабай.** Шуға ла ҙур көс, тип атайбыҙ. Эйе, эйе, айырым бер малҡайҙы эҙләмәгеҙ. Күрһәгеҙме, беҙҙең яндан осҡон сәсрәтеп елеп үтә улар! Алға, яҡты тормошҡа әйҙәп. Таныйһығыҙмы?

**Ҡарһылыу.** Таныйбыҙ, Ҡыш бабай. Бына Аҡбуҙат!

**Артабан әкиәт геройҙары алмашлап һанайҙар:** Алмасыуар, ерән ҡашҡа, свай ҡашҡа, һары байтал! Ала, ҡола, көрән, ерән аттар. Саптар, һарысай, ҡарайғыр! Турат, күгәт! *(видеорәт)*

**Ҡыш бабай.** Һәммәһенә лә ҡот һәм ҡеүәт! Беҙҙә йылҡы һанап бөткөһөҙ! Тағы бер серҙе асам, йылҡы - ул мәңгелек хәрәкәт. Хәрәкәттә булыр бәрәкәт.

**Пони.** Ух, беҙҙәкеләр шулай ул! Мин уларға ҡушылам. Мин бит ат!

**Үрғуян.** Уй, Ҡыш бабай, Пони энә буйы ер китте.

**Ҡыш бабай.** Хәҙер толпарҙарҙы ҡыуып етәсәк, хатта уҙып китәсәк сөнки...

**Ҡарһылыу.** Сөнки Яңы йылдың тылсым көсө бар.

**Ҡыш бабай.** Ул тылсым һеҙҙең йөрәктә, дуҫҡайҙар! Иң изге теләктәр йөрәктә тыуа, шунда йәшәй. Ихласлыҡҡа кәртә юҡ. Ул бөтөн ғаләмгә барып етә. Йыһанға!

**Дейеүбикә.** Яңы йыл менән, Ҡояш системаһы!

**Албаҫты.** Яңы йыл менән, Ер шары!

**Аҡтырнаҡ.** Яңы йыл менән, кешеләрем!

**Суртан.** Изге теләктәребеҙ һеҙгә йәншишмә булып һибелһен, тереһыу булып бөркөлһөн.

**Үрғуян.** Ох, беҙҙең быйылғы репетициябыҙ ныҡ һәйбәт үтте. Хөрмәтле дуҫтар, ҡәрҙәштәр, өлкәндәр һәм кеселәр, хәҙер һеҙгә Яңы йыл сәләме, барлыҡ тәрбик-ҡотлауҙарыбыҙ йырмоң менән барып етер. Ҡаршы алығыҙ беҙҙе!

**Бергә.** Яңы йыл менән, дуҫтар!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

БАЛАҢА УҠЫ!



# ИҢ МӨҺИМЕ - САБЫРЛЫҠ!

Матур ғына бер урманда йәшәгәндәр, ти, айыу әсәй һәм уның бәләкәй генә балаһы. Айыу балаһы ҡыштың иң сатлама һыуығында донъяға килә. Яҙғы йылы көндәр тыуғансы ул әсәһе менән өңөндә ғүмер итә. Бына бер заман әсәһе уны урманға, өңөнән тышҡа алып сыға. Ул ҙур гүзәл донъяны күреп, хайран ҡала. Айыу балаһы өсөн бөтә нәмә яңы, ят һәм ҡыҙыҡ тойола. Әсәһе уға ниндәй емештәрҙе, тамырҙарҙы, япраҡтарҙы ашарға яраҡлығын өйрәтә. Ергә ҡойолған сәтләүектәрҙе һәм үлән араһында йәшенеп үҫкән бәшмәктәрҙе нисек табырға күрһәтә. Һәр көн улар өңдәренән алыҫыраҡ китә. Ә бер көндө ташлы ярҙарынан ярһып йүгергән, шаулап аҡҡан йылғаға килеп сығалар.

Әсәһе айыу балаһына: "Мин балыҡ тоторға китәм! Ярға яҡын килмә! Күрәһеңме йылға нисек шәп аҡҡанын? Ағыҙып алып китер үҙеңде. Мине ошонда көт!" - тигән дә, үҙе балыҡ тотор өсөн ҡулайлы урын табып, эргәһенән йөҙгән балыҡтарҙы күҙәтә башлаған. Бына ул ҙур ғына бер балыҡты һыуҙан тәпәйҙәре менән тартып ала һәм ярға ырғыта. Балаһын саҡырып ала ла, бергәләп балыҡ ашай башлайҙар. Айыу балыҡ тотоуын дауам итер өсөн яңынан йылғаға төшә.

Айыу балаһы әсәһенең балыҡ тотоуын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтә: "Ҡайһылай балыҡ тотоу ябай ғына икәәән! Мин дә тота алам!"- тип уйлай ул. Әсәһенең иҫкәртеүҙәрен дә онотоп, йылғаға яҡынлай. Ярҙың ситендә ятҡан бәләкәй бүрәнәгә үрмәләп менә. Йылғаның тәрән булмаған ерендә туплангән, көмөштәй ялтыраған балыҡ өйөрөн күрә. Уларҙы торорға теләп, тәпәйҙәрен һыуға тыға. Шул саҡ ул ултырған бүрәнә бер тапҡыр сайҡалып ҡуя, шунан тағы сайҡала ла еңел генә ярҙан айырыла. Аға торғас, шәп ағынға эләгеп, ҡото осоп ҡурҡҡан айыу балаһын алыҫҡа ағыҙып алып китә. "Ә-сәәәй!" тип, йөрәк әрнеткес ҡыҙғаныс тауыш менән ҡысҡыра ул.

Бүрәнә һыу уртаһында суҡайып торған таштарға бәрелә-һуғыла, яр ситендәге ҡыуаҡлыҡтарға эләгә-эләгә, таныш булмаған ерҙәр аша уны әсәһенән алыҫайтып ағыуын белә... Айыу балаһына ныҡ ҡурҡыныс була. Ул һыйынып, дүрт тәпәйе менән бүрәнәне ҡосаҡлап ала.

Әсәһе балаһының йылға буйлап ағып барыуын күргәс, ни эшләргә лә белмәй өҙгөләнеп үкерергә һәм үрһәләнергә тотона. Ҡапыл әсә күҙ йәштәренең һәм үкһеүенең ярҙам итмәҫен төшөнөп, тиҙ генә тынысланырға һәм ҡәтғи бер аҙым эшләргә тейешлеген аңлап ала. "Йылғала ағып, бер аҙ барғас, унда шаршы бар, ул ерҙә һай булырға тейеш, - тип иҫенә төшөрә. - Ул шунда бүрәнәне тотоп аласаҡ. Өлгөрөп ҡалыр өсөн ашығырға кәрәк миңә! Балам бүрәнәгә ныҡ тотонһа ярар ине, һыуға ғына ҡолап төшмәһен". Ул яр буйлап йылғаның түбәнге ағымына хәленән килгәнсе йүгерә.

Бына алда шаршылыҡ шаулай. Яҡына биргәс, ағымға ҡаршы тығылған бүрәнәгә йәбешкән бәләкәй генә ҡара йомарлаҡ та күҙгә салына. "Балаҡайым, улым! Ныҡ тор!" - тип һамаҡлай-һамаҡлай, бар көсөн йыйып, ауыр тын алып, сәнскеле ҡыуаҡтарҙы йыра-йыра балаһына ынтыла әсәһе.

Айыу ҡапыл кеше еҫен һиҙеп ҡала. Яр башында күшегеп бөткән, бүрәнә ҡосаҡлап ҡурҡышынан дер ҡалтыраған айыу балаһын ҡыҙыҡһынып күҙәткән кейек аулаусыны күрә. Уның ҡулында ау менән ата торған мылтыҡ була. Һунарсы бәләкәй айыу балаһын тотор өсөн уға мылтығын тоҫҡай... Ул был унышҡа бик ҡыуана. Сөнки өйөндә ҡыр йәнлектәренән зоопарк тотҡан бер байға һатып ебәрәсәк бит уны! Хатта эстән генә күпме аҡса аласағын да һанап сығара...

Айыу әсәнең йөрәге өҙөлөп төшкәндәй була. Уның үкерепүкереп илағыһы килә. Илау менән генә баланды ҡурсалап буламы һуң? Ул үҙен ҡулында тоторға тырыша. Бер-нисә һикереү аша һунарсының артына барып баҫа ла, ауыр көслө тәпәйҙәре менән арҡаһына тондороп, уны аяҡтан йыға. Һунарсы ҡолағанда башын ташҡа бәреп, иҫен юғалта. Ә мылтығы ҡулынан ысҡынып китеп, шапылдап йылғаға барып төшә...

Айыу һыу уртаһында ҡалған балаһына яҡынлаша, сикәһе менән уның башын һыйпай. Бәләкәсе әсәһенең арҡаһына менеп ҡосаҡлай ҙа, улар урманға инеп китәләр.

Ҡурҡыныс һәм ҡайғы килгәндә күҙ йәштәре ярҙамсы була алмай. Тик сабырлыҡ һәм үҙеңде дөрөҫ тотоу - тәҙәтә алмаҫтай тойолған хәлдә лә үҙгәртә ала.

"Бел! Түҙемһеҙгә еңеү килмәҫ. Табыш - юғалтыуһыҙ, еңеллек ауырлыҡһыҙ булмаҫ!" тиелә хәҙистәрҙә.

✓ ***Теүәл ете йыл элек ташланған карьерҙың ҡабырғаларында ҡалған көкөрт яна башлай, үрт тау тоҡомдары ҡатламына үтеп инә. Мәғдән яныуҙан һауаға көкөрт диоксиды бүленеп сыға һәм был ағыулы газ ҡала өҫтөнә тарала.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТЕЛЕВИЗОРҘЫ КҮП ҠАРАМА

■ Көндөҙ йоҡлап алһаң, йөрәк сирҙәре булмай, ти белгестәр. Бигерәк тә юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға быны иҫтә тоторға кәңәш ителә. Греция ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 61 йәштәге 400 ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Көндөҙ йоҡлап алғандарҙың ҡан баҫымы яҡынса 5 процентҡа түбәнәйгән. Ошо проценттар ғына ла йөрәк өйәнәге һанына йоғонто яһай ала. Икенсе күрһәткестәр, анығыраҡ әйткәндә, пульс йышлығы ла башҡаларҙыҡына ҡарағанда яҡшыраҡ булған. Көндөҙгө йоҡо 1 сәғәт тирәһе булғанда һөҙөмтәләр ҙә юғары, ти белгестәр.

■ Антибактериаль һабынды йыш ҡулланырға ярамай, ти ғалимдар. Ул тире өсөн үҙенсәлекле антибиотик булып тора, шуға ла бындай һабын микробтар менән файҙалы микрофлораны ла юҡҡа сығара, етмәһә тирене киптерә. Бындай һабын менән ҡулды баҡсала эшләгәндән һуң йә юлда йөрөгәндә йыуыныу ҡулайлыраҡ. Шулай уҡ шыйыҡ һабындар ҙа тирегә яҡшы тәьҫир итә, тире дымға туйынып ҡала, сөнки уларҙа йышыраҡ һелте булмай. Шулай ҙа бындай һабындың составындағы матдәләр күҙгә төшөп, уны әсеттереүе ихтимал, шуға уның менән бит йыумағыҙ. Йыуынғанда тирегә зыян килтермәҫ өсөн йыуғыс ҡулланмағыҙ, һабын молекулалары йыуғысһыҙ ҙа бысраҡты таҙарта.

■ Кеше тәүлегенә алты сәғәттән кәм йоҡлаһа, һалҡын тейҙереп бара, уға башҡа төрлө вирустар ҙа тиҙ йоға икән. Тикшеренеүҙәрҙә 164 кеше ҡатнашҡан, белгестәр 2007 йылдан 2011 йылға тиклем уларҙың сәләмәтлеген күҙәткән. Тәүлегенә алты сәғәт йоҡлағандар ете сәғәт йоҡлаусыларға ҡарағанда миҙгел сирҙәренә тиҙерәк бирешкән. Кем ялға биш сәғәттән аҙыраҡ ваҡыт бүлә, улар 4,5 тапҡырға йышыраҡ ауырыған. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Арик Пратер раҫлауынса, кешенең ауырыу-ауырымауына уның йәше лә, насар ғәҙәттәре лә, стрестар ҙа йоғонто яһамай. Йоҡоноң оҙайлығы иммунитет өсөн яуаплы күҙәнәктәр - Т-лимфоциттарҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә.

■ Телевизорҙы күп ҡарау үлемесле сирҙәргә илтеүе бар. Телевизор алдында оҙаҡ ултырыусылар йыш ҡына үпкә эмболияһына, йәғни, үпкәнең ҡан тамырына эмбол тығылыуы дусар була, был турала Лондонда, кардиологтарҙың Европа йәмғиәте конференцияһында белдерҙеләр. Үпкә эмболияһы йөрәктән үпкәгә ҡан йөрөтөүсе артерияға эмбол тығылыуы сире, унан Бөйөк Британияла ғына йыл һайын 60 мең кеше үлә. Көнөнә 5 сәғәт төрлө телешоуҙар ҡарау менән мауыҡҡан кешеләргә мотлаҡ профилактика менән шөғөлләнергә кәрәк, ти белгестәр.

■ Кино ҡарағанда уның күңелдең иң нескә ҡылдарын сирткән урындарында илап алырға була. Етмәһә, был файҙалы ла, ти Нидерланд ғалимдары. Ғалимдар илата торған драмаларҙы "бәхеткә юл" тип атап йөрөтә, бындай киноны ҡарағандан һуң кешеләр үҙҙәрен күпкә уңышлыраҡ тоя, имеш. Эксперимент барышында 60 тамашасы "Тормош матур" һәм "Хатико" фильмдарын ҡараған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, сеанста илаған кешеләр кино тамамланғас та үҙҙәрен шундай бәхетле тойған, был кисерештәр тағы бер сәғәт тирәһе уларҙы ташламаған. Әйткәндәй, был ирегеттәргә лә ҡағыла. Баҡтиһәң, сер химияла йәшеренгән - бындай хис-тойғолар окситоцин тигән матдә бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, тап ул бәхет һәм шатлыҡ тойғоһон бирә лә инде.

*ХӘТЕРЛӘП...*

# "СИБАЙ, ТЫН АЛ!"

**Ошо оран аҫтында берләшкәйне йәмәғәтселәр. Борон-борондан әҙәми зат донъяуи мәсьәләләрҙе бергәләшеп хәл итергә күнеккән. Шуға ла айырым төркөмдәрҙән ырыуҙар, халыҡтар, дәүләттәр барлыҡҡа килгән, кешеләр, ауыл-ҡалалар ҡороп, йәмғиәткә тупланып, дөйөм ҡағиҙәгә буйһоноп йәшәргә өйрәнгән.**



Хәҙер беҙҙең тормошто һәр яҡлап дәүләт көйләй. Шул уҡ ваҡытта хоҡуҡи ил ҡоролошоноң бер билдәһе булған "граждандар йәмғиәте" тип аталған ижтимағи институт та мөһим урын биләй. Уға "социаль әүҙемлекте үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе, эшмәкәрлеге граждандар мәнфәғәтен яҡлауға йүнәлтелгән хөкүмәткә ҡарамаған ирекле йәмәғәт ойошмалары" тип аңлатма бирәләр. Формаль һәм формаль булмаған бындай ойошмалар менән тормошта беҙ даими киҫешәбеҙ, хатта эшмәкәрлектәрендә яҡындан тороп ҡатнашабыҙ. Әйтәйек, һәр ауылда, ҡалаларҙа ағинәйҙәр ҡорҙары бар, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының тәүге ойошмалары эшләй - улар, һис шикһеҙ, граждандар йәмғиәтенең бер сағылышы. Дөйөм алғанда, был исемлеккә ижтимағи һәм дини ойошмалар, ижади берекмәләр һәм союздар (журналистар, яҙыусылар, композиторҙар, кинематографистар, ҡурайсылар һәм башҡа), хәйриә фондтары, нумизматтар, марка йыйыусылар, ҡышҡыһын мәкелә йөҙөүселәр кеүек төрлө мәнфәғәттәргә нигеҙләнгән граждандар берләшмәләре инә. Араларында быуаттан ашыу тарихы булғандар, шулай уҡ яңы осорҙа тыуғандары ла бихисап.

***Йәмғиәтте ҡуҙғытҡан, кешеләрҙе берләшергә этәргән ваҡиғалар бигерәк тә үҙгәрештәр заманы, ғәҙәттән тыш хәлдәр мәле өсөн хас. Нәҡ шундай шарттарҙа, теүәл ете йыл элек, 2018 йылдың декабрендә, Сибайҙа урын алған экологик һәләкәт республикабыҙҙа граждандар йәмғиәте формалашыуының сағыу өлгөһө булған "Сибай, тын ал!" хәрәкәтен тыуҙырҙы.*** Ҡала хакимиәтендә биләгән вазифама бәйле, минә ул ваҡиғаларҙың уртаһында булырға тура килде.

Сибайҙа үткән быуаттың 50-се йылдарында ҡеүәтле Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинаты эшләй башлай. Асыҡ ысул менән мәғдән сығарыу һөҙөмтәһендә биш тиҫтә йыл арауығында тәрәнлеге 500 метрҙан ашыу, көнгә сыҡҡан ауыҙы 2000 метрға тиң карьер хасил була. Ҡаҙылма байлыҡты яңы быуат башында шахта менән ала башлайҙар. Тулыһынса асыҡланмаған сәбәптәр арҡаһында теүәл ете йыл элек ташланған карьерҙың ҡабырғаларында ҡалған көкөрт яна башлай, үрт тау тоҡомдары ҡатламына үтеп инә. Мәғдән яныуҙан һауаға көкөрт диоксиды бүленеп сыға һәм тын юлын быуған был ағыулы газ ҡала өҫтөнә тарала. Килеп тыуған хәлде "техноген һәләкәт" тип атайҙар. Ауыр ул осорҙа Сибай халҡына ярҙамға бөтә республика килде, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров барлыҡ дәүләт хеҙмәттәрен аяҡҡа баҫтырҙы. Ғәйәт ҙур көс һалып, ниһайәт, 2019 йылдың апрелендә ер аҫтында көкөрт яныуы туҡтатылды.

Ҡала халҡы өсөн аяныслы шул көндәрҙә, интернет селтәрҙәрен файҙаланып, бер-береһен белмәгән кешеләр "Сибай, тын ал!" төркөмөнә тупланды һәм киҫкен проблеманы хәл итеүгә үҙ өлөшөн индереү ниәте менән әүҙем эшмәкәрлек йәйелдерҙе. ***Яңы хәрәкәт әүҙемселәре баштан уҡ "беҙ оппозиция түгел, төркөмдө властҡа ҡаршы көрәштә файҙаланырға маташмағыҙ. Ул таҙа һауа һуларға хоҡуғыбыҙҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн генә булдырылды" тип иҫкәртте.*** Ошо юлдан улар тайпылманы, шул уҡ ваҡытта рәсми органдарға әйләнгән һайын уңайһыҙ һорауҙар бирҙеләр, улар баҫҡан мәғлүмәттәрҙе шик аҫтына ҡуйҙылар, экологик һәләкәтте тиҙ арала туҡтатыр өсөн киҫкен саралар күреүҙе талап иттеләр.

Эште низән башларға? Иң элек ошо һорау килеп баҫа изге ниәт менән бергә тупланған фекерҙәштәр алдына. Силәбе ҡалаһында таҙа һауа өсөн көрәшкән экологтар тәжрибәһенә таянып эш башлайҙар. Аҙна-ун көн үтеүгә һауала зыянлы газдың булыу-булмауын үлсәй торған прибор һатып алыу өсөн аҡса йыйырға тотоналар. Бынан тыш, социаль селтәрҙәр аша төркөм халыҡты смог тураһында иҫкәртеүҙе яйға һалды, ҡала халҡына Сибай һәләкәте тураһында юғары власть органдарына мөмкин тиклем күберәк яҙырға, саң ҡағырға өндәне.

Социаль селтәрҙәрҙә ҡалала урын алған экологик хәлгә бәйле махсус төркөмдөң барлыҡҡа килеүе, уның әүҙем эшләүе, дөйөм алғанда, ыңғай күренеш булды. Сөнки уның биттәренән: "Тонсоғабыҙ! Тын ала алмайбыҙ!.." - тип өҙлөкһөҙ оран яңғырап торҙо. Әлбиттә, бындай әүҙемлек иғтибарҙан ситтә ҡалманы: урындағы хакимиәттә үткән осрашыуҙарға, ҡала йәмәтселеге менән бер рәттән, "Сибай, тын ал!" төркөмө вәкилдәрен дә саҡыра башланылар. Артабан Сибайҙа экологияға бәйле бер генә сара ла уларҙың ҡатнашлығынан тыш үтмәне. "500" һәм "1000" тип аталған хәүефле зоналар сиген билдәләү, Ҡырымға ялға китергә тейешле балаларҙың исемлеген төҙөү һәм раҫлау, УГМК-холдингтың генерал директоры Козицын менән осрашыу, Рәсәй Президенты эргәһендәге кеше хоҡуҡтары буйынса Совет ағзалары менән комбинатта инспекция үткәреү, Өфөлә Советтың күсмә кәңәшмәһе - быларҙың барыһында ла "Сибай, тын ал!" әүҙемселәре ҡатнашты, барлыҡ майҙансыҡтарҙы ла ҡала халҡының кәйефен, борсолоуҙарын еткереү өсөн файҙаланды.

***Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алыу мөһим: һәр осраҡта ла "Сибай, тын ал!" йәмәғәтселәре объектив булырға тырышты. Власть күргән сараларҙы тейешенсә баһаланы, ләкин тәнҡитләргә лә онотманы. "Сибай, тын ал!" барыһын да шик аҫтына ҡуйыуы менән дә үҙенсәлекле.***

Февралдә шахтаға һыу тултырыу башланғас, иғтибарҙы комбинатҡа, проект әҙерләгән институтҡа йүнәлттеләр. Нәҡ ошо мәлдә көн һайын тиерлек көкөрт газы һауала эленеп торҙо. Хәлдең шулай үҙгәреүен "Сибай, тын ал!" әүҙемселәре һыу тултыра башлау менән бәйләне һәм, әлбиттә, ҡала хакимиәтенә һорауҙар яуҙырҙы, хаттар яҙҙылар, Президентҡа мөрәжәғәт аҫтына ҡултамғалар йыйҙылар.

Һауа анализаторы алыу өсөн аҡса туплау ҙа әүҙем барҙы. 1919 йылдың 5 февраленә ҡарата 47 259 һум аҡса йыйылыуы тураһында хәбәр иттеләр. 25 февралдә улар Өфөгә барып, һауа анализаторы алып ҡайтты. Иртәгәһенә үк тәүге прибор ҡаланың Нуриманов урамына ҡуйылды. Уның күрһәткесен онлайн режимында компьютер, кеҫә телефоны аша өйҙә ултырып, интернет тотҡан теләһә ҡайһы башҡа урында ҡарарға була ине.

28 февралгә ҡарата "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Сибай, тын ал!" төркөмөнә 11 мең кеше ҡушылғайны. Ҡала халҡы һаны ул саҡта 62 мең самаһы ине. Бала-сағаны, интер-

✓ *Эдуард Ҡадыров менән Диана Филиппова әүҙем граждандар позицияһы һәм Сибай ҡалаһының ижтимағи тормошонда әүҙем ҡатнашҡандары өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығының Рәхмәт хаты менән бүләкләнде.*



нетта ултырмаған ололарҙы иҫәпкә алмаһаҡ, был - әүҙем йәштәгеләрҙең кәм тигәндә өстән бер өлөшө ине.

1 мартта һәүәҫкәр экологтар командаһы һауа таҙалығын үлсәүсе тағы бер прибор һатып алды. Уны Алтын ҡасабаһына, балалар баҡсаһына яҡын шәхси йорт ихатаһына ҡуйҙылар.

25 мартта экологик һәләкәткә бәйле Сибайға Рәсәй Президенты эргәһендәге Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзалары килде. Совет ағзалары, шахтаға төшөп, үҙҙәре хәлде асыҡларға теләне. Уларҙың ниәттәре тормошҡа ашты. Биш кешенән торған төркөмгә "Сибай, тын ал!" вәкилен дә индерҙеләр.

27 мартта Рәсәй Президенты эргәһендәге Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса совет Өфөлә үҙенең күсмә ултырышын үткәрҙе. Көн тәртибенә бик күп мәсьәләләр менән бергә Сибайҙағы экологик һәләкәткә ҡағылғаны ла индерелгәйне. Ултырышҡа "Сибай, тын ал!" төркөмө лидерҙары ла саҡырылды.

Ғәмәлдә, апрель айы башына һауаның ҡот осҡос юғары кимәлдә көкөрт газы менән бысраныуы артта ҡалғайны. Ваҡыты менән һауаның рөхсәт ителгәндән юғары бысраныу кимәле 2-3 тапҡырға артҡан көндәр булды, әлбиттә. 16 апрелдә, мәҫәлән, Старателдәр урамында ул 2,3 билдәһенә тиклем күтәрелде. Ҡала халҡының күпселеге был ваҡытҡа тынысланды, экология мәсьәләһенә һирәк ҡағылды. Әйтәйек, интернетта 31 мартҡа иғлан ителгән халыҡ сходына ни бары 5 кеше сыҡты. 21 апрелдә Башҡортостан Хөкүмәтенең рәсми сайтында ошондай мәғлүмәт донъя күрҙе:

***"Сибайҙа Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты" акционерҙар йәмғиәтенең Сибай филиалы карьерында мәғдән яныуын бөтөргән саҡта юғары профессионализм һәм әүҙем граждандыҡ позицияһы күрһәткән ҡала халҡына дәүләт наградаларын тапшырҙы. Бүләкләнеүселәр араһында тау эшселәре, табиптар, мәғариф хеҙмәткәрҙәре, журналистар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре... Наградаға лайыҡтар исемлегендә "Сибай, тын ал!" ижтимағи хәрәкәте вәкилдәре лә бар.***

***- Һеҙ эшмәкәрлегегеҙҙе туктатмаҫһығыҙ һәм артабан да республика власы органдары һәм муниципалитет алдына шулай уҡ принципиаль, ҡәтғи һәм ғәҙел һорауҙар ҡуйырһығыҙ, тип ышанам. Ҙур рәхмәт! Һеҙ бик мөһим һәм кәрәкле эш башҡараһығыҙ, - тип билдәләне төбәк етәксеһе, активистарға мөрәжәғәт итеп".***

Эдуард Ҡадыров менән Диана Филиппова әүҙем граждандар позицияһы һәм Сибай ҡалаһының ижтимағи тормошонда әүҙем ҡатнашҡандары өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығының Рәхмәт хаты менән бүләкләнде.

"Сибай, тын ал!" төркөмө әүҙемселәре эшмәкәрлегенә Рәсәй Президенты эргәһендәге Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса советы эргәһендәге экология мәсьәләләре буйынса комиссияның даими эксперты Григорий Куксин да юғары баһа бирҙе.

***"Был ҡалала (Сибайҙа. Ред.) ысын граждандыҡ йәмғиәте бар. Нәҡ ундайҙы илебеҙҙең һәр ҡалаһында күрергә теләр инек. Ябай һәм бер-береһенә ҡағылышы булмаған кешеләр берләште һәм проблеманы хәл итергә тотондо. Теманы бик тиҙ һәм бик тәрән итеп өйрәнеүгә өлгәштеләр. Фандрайзинг ойоштороп, йыйылған аҡсаға кәрәкле датчиктар алып ҡуйҙылар. Ҡала власы органдары, республика етәкселеге, компания вәкилдәре (граждандар активистары менән аралашыуҙа ябай булмаған УГМК компанияһы) менән бәйләнешкә индеҙәр...***

*Һәм быны бик аҡыллы итеп, бөтә көстәрен һалып, намыҫ менән эшләйҙәр. Социаль селтәрҙәрҙә бик яҡшы алып баралар. Тиҙ арала власть менән аралашыу тәжрибәһе тупланылар, фекер алышыуҙарҙа оппоненттар менән аралашырға, кәрәкле мәғлүмәт табырға һәм уны дөрөҫ файҙаланырға өйрәнделәр. Әлбиттә, уларҙы күптәр яратып етмәй. Әлбиттә, низә генә гәйепләнмәйҙәр. Әммә улар хәлде үҙгәртә, проблеманы хәл итергә тейешле һәр кемде ҡуҙғата алды. Быға улар диванда ултырып, тәнҡит ташлап түгел, ә үҙҙәренең әүҙем һәм конструктив ғәмәлдәре менән өлгәште.*

*...Әлбиттә, ҡайһылыр мәлдә тәжрибә, һығылмалылыҡ, ҡатмарлы һөйләшеүҙәр алып барыу оҫталығы етмәй. Әммә мин улар менән һоҡланыуымды йәшермәйем. Хатта бер ни тиклем уларҙың көсөнә, сыҙамлығына, сабырлығына һәм ныҡышмалылығына көнләшәм. Хәҙер Сибай шым ғына "үлем түшәгенә" ятмаясағына ысын күңелдән ышанам. Бындай кешеләр менән ул былайыраҡ бәләләргә лә бирешмәйәсәк", -* тип яҙҙы ул интернетта.

**Шулай итеп, кешеләрҙе берләшергә этәргән ваҡиғалар бигерәк тә үҙгәрештәр заманы, ғәҙәттән тыш хәлдәр мәле өсөн хас. "Сибай, тын ал!" ирекмәндәр төркөмө миҫалынды быны беҙ асыҡ күрәбеҙ. Маҡсатлы кешеләр берләшеп, көндәлек тормошта көнкүреш мәсьәләләрен дә уңышлы хәл иткән осраҡтар бихисап. Ҡайҙалыр йорт комитеты йыйып сыҡҡыһыҙҙай тойолған эштәрҙең осона еткән, башҡа урында ауылды тәҙәкләндергәндәр йә шишмәне таргеҙгәндәр. Һәр ваҡыт өҫтән көтөп ултырыуға ҡарағанда, берләшеү һәм мәсьәләне хәл итә башлау күпкә отошлораҡ шул. Халыҡтың ҡуҙғалғанын күреп, етәкселәр ҙә, ғәҙәттә, әүҙемләшә, юҡ, тигән аҡсаны, техниканы, материалды таба. Был инде - аҡыллығы ишара.**

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# БИТЛЕК КЕЙЕРГӘ ЛӘ БУЛА



**Ҡыш үҙ хоҡуғына инеп, көндәр һыуытып ебәреү менән, киҫкен респиратор вирус инфекцияһы (ОРВИ) һәм грипп башланырын көт тә тор. Хәйер, был сир билдәләре ноябрҙә үк башланғайны инде. Әлеге көндәрҙә Бөтөн Рәсәйҙәге кеүек үк, Башҡортостанда ла ОРВИ һәм гриптың гонконг төрө менән күпләп сирләй башланылар.**

Роспотребнадзор мәғлүмәттәренә ҡарағанда, декабрҙең тәүге ун көнлөгөндә грипп билдәләре булмаған респиратор вирус менән бер рәттән H3N2 штаммлы А вирусы - грипптың гонконг төрө лә ныҡ әүҙемләште. Ҡайһы саҡ ҡапылда уларҙың айырмаһын белеп бөтөрмәҫкә лә мөмкин, сөнки ОРВИ үҙе генә лә 200-ләгән вирус тарата: риновирус, аденовирус, коронавирус һ.б. Грипп менән уның айырмаһына килгәндә, ОРВИ 1-2 көн эсендә әкренләп әүҙемләшә бара, ә грипп ҡапыл һәм киҫкен башланып китә һәм бер нисә сәғәт эсендә кешенең хәле насарлана. ОРВИ ваҡытында температура ла әкренләп күтәрелә, ләкин ул 37-38-ҙән юғары үрләмәй. Грипп менән сирләгәндә температураның киҫкен: 39-40 һәм унан да юғарыраҡ күтәрелеүе һәм 3-4 көнгә һуҙылыуы ихтимал. ОРВИ ваҡытында нигеҙҙә катараль, йәғни тын юлдары елһенеүе өҫтөнлөк итһә, грипп баш ауыртыуы, тән һәм быуындар һыҙлауы, өшөнөү-ҡалтыраныу, 1-2 көндән йүтәлләү, күкрәк тапҡырында ауыртыу билдәләре менән оҙатыла. ОРВИ енелерәк үтә һәм ул 5-7 көнгә һуҙыла, ә грипп ауыр үткәрелә һәм ике аҙналап һуҙыла, хәлһеҙлек күҙәтелә.

***Иң хәүефлеһе шул:*** грипп сирҙең ҡатмарланып китеүе менән ҡурҡыныс (пневмония, миокардит, менингит, хроник сирҙәрҙең киҫкенләшеүе һ.б.).

Тәүге көндәрҙән үк был ике миҙгел сиренең билдәләрен айыра алмау кешеләрҙең үҙ белдеге менән дарыуға тотоноуы йә иһә ауырыған ваҡытта эшкә, уҡыуға йөрөп ятыуы күңелһеҙ һөҙөмтәләргә килтерә. Иң яҡшыһы, ниндәй вирус булыуына ҡарамаҫтан, тәүге билдәләрҙән үк табипҡа мөрәжәғәт итеү мотлаҡ. Роспотребнадзор хәбәр итеүенсә, гриптың А (H3N2) штаммлы гонконг төрө Башҡортостан буйынса 80 процент тәшкил итә. Ҡайһы бер мәғлүмәт каналдарында гриптың был төрө хаҡында ҡурҡыныс хәбәрҙәр уҡырға мөмкин, ләкин Роспотребнадзор күҙаллауынса, А (H3N2) төрө бынан алдағы (2015-2016, 2023-2024) йылдарҙағына ярашлы кимәлдә үтәсәк.

Академик Геннадий Онищенко, ҡайһы бер төбәктәрҙә грипп сире кимәле декабрь аҙаҡтарында үҫешә барып, килһе йылдың ғинуар урталарында иң киҫкен нөктәгә етәсәк, тип иҫкәртә. Был осорҙарҙа дауалау учреждениелары, транспорт, магазин һәм башҡа йәмәғәт урындарында һаҡлыҡ саралары күреү, йәғни тажзәхмәт ваҡытындағыса битлектәр файҙаланыу, танауға вирусҡа ҡаршы виферон майы һөртөп йөрөргә, өйҙә иһә традицион әлморон, лимон, әрем үләне, имбир, һуған-һарымһаҡ һәм витаминдарға бай ризыҡтар ҡулланырға кәңәш ителә.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Туғай сәпсеге

**(Желтолобая трясогузка)**



Һары сәпсеккә оҡшаған, бары тик арҡаһы һары-йәшкелт, башы һары, елкәһендә ҡара төҫтәге арҡыры һыҙат юҡ. Түбәнге Волга буйынан алып Көньяҡ Уралға тиклем таралған. Еүеш яландар, ҡуйы үләнле һаҙлыҡтар һәм һыу яҡтылыҡтарына яҡын ҙур ҡуләүектәр эргәһенә оялай. Ояһын ергә яһай.

Урал алдының тигеҙ урынлы ерҙәрендә йыш осрай торған ғәҙәти ҡош. Урал арьяғында күренгәне булманы.

## Һарыбаш сәпсек

**(Желтоголовая трясогузка)**



Һары сәпсеккә оҡшаған, ата ҡоштоң башы һәм кәүҙәһенең аҫҡы өлөшө сағыу һары, елкәһендә ҡара арҡыры һыҙаты бар. Инә ҡоштоң ҡорһағы һарғылт-аҡ, башының түбәһе көл төҫөндә.

Йырын сағыу тауыш менән башҡара, "тсюили" тип саҡыра.

Һаҙлыҡтарҙа, еүеш яландарҙа оя ҡора, һыуһыҙ ерҙә йәшәй алмай. Яҙҙың иң гөрләп торған сағында осоп ҡайта, оя ҡорған ере башҡа сәпсектәрҙекенән айырылмай.

Күбеһенсә Урал арьяғында осрай. Шулай ҙа Өфө тирәһендә, Шиңгәккүл, Асылыкүл, Ҡандраҡүл, Дим, Сәрмәсән йылғалары буйында бар. Таулы райондарҙа юҡ.

## Тау сәпсеге

**(Горная трясогузка)**



Кәүҙәһенә ҡарағанда ҡойроғо оҙонораҡ. Ата ҡоштоң муйыны һәм боғағы ҡара, арҡаһы ла ҡара көлһыу. Ҡорһағы, ҡойроғоноң өҫтө һары, ҡашы аҡ, аяҡтары аҡһыл.

Уралдан Камаға тиклемге территорияла етеҙ тау йылғалары һәм шишмәләре буйында йәшәй. Таш аҫтына, ҡаялардағы ярыҡтарға оялай. Тауышы - көслө, сағыу, "цитт" тип ҡысҡыра.

Йылайыр платоһының урманлы дала өҫтөнлөк иткән районларынан алып төбәктең төньяҡ сигенә тиклем йыш осрай торған ҡош. Ирәмәлдең башында, Ҡаратау һыртында, Көньяҡ Урал ҡурсаулығында күргәнебеҙ булды. Шүлгәнташҡа ингән ерҙә генә ҡаяла тау сәпсегенең ояһын тап иттек. Айырым парҙар Ағиҙелгә ҡойған тау шишмәләре буйында ла күренгеләне.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

✓ *Ҡулығыҙҙы бирмәгеҙ, көсөргәнеш арттырасаҡһығыҙ һәм ярҙам итеү түгел, үҙегеҙ ҙә уңышһыҙлыҡҡа осраясаҡһығыҙ. Ул һаҡ ҡына шыуышып сығырға йәки килгән урындан ярға табан тәгәрәп йәки шыуышып барырға тейеш.*



## ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ИХ, БЫЛ ЯНҒЫНДАР!

• Өфөнөң Калинин районына ҡараған Князево ауылының Мебель урамында күп фатирлы йорттоң беренсе ҡатындағы ике бүлмәле фатирға ут ҡаба. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, янғын сыҡҡан урындан 63 йәшлек фатир хужаһы эвакуациялана. Тикшереүҙәрҙән һуң ул дауаханаға ятыуҙан баш тарта. Күрше фатирҙан 85 йәшлек ҡатын махсус ҡотҡарыу ҡоролмаһы ярҙамында хәүефһеҙ урынға күсерелә. Тағы 10 кеше янғын һүндереүселәр килеп еткәнгә тиклем йорттан үҙаллы сыға. Янғын 40 квадрат метр майҙанда һүндерелгән. Уның сәбәбе, ут менән һаҡһыҙ эш итеү, тип фаразлай тәфтишселәр.

• Өфөнөң Ибраһимов бульварындағы сауҙа үҙәгендә сыҡҡан янғын тиҙ арала һүндерелде, тип хәбәр итәләр Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығынан. Бинанан 22 кеше эвакуациялана. Асыҡланған мәғлүмәттәр буйынса, ут күмер һаҡлау складында сыға. Бинаны ҡуйы төтөн баҫа. Янғын 30 квадрат метр майҙанда тиҙ арала һүндерелә. Утты һүндереүгә 69 кеше һәм 22 берәмек техника йәлеп ителә.

• Ҡырмыҫҡалы районының Прибельский ауылында өс бүлмәле фатирҙың кухняһында янғын сыға. Ут һүндерергә тотонған 36 йәшлек ир ике ҡулын да бешерә. Зыян күреүсе 112 номеры аша ашығыс ярҙам хеҙмәттәренә шылтырата. Табиптар уға беренсе ярҙам күрһәтә. Янғын һүндереүселәр килгәнгә тиклем ут һүнderelә. Ваҡиға сәбәбен Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы тәфтишсеһе асыҡлай.

• Ошондай уҡ шарттарҙа Сибай ҡалаһында янып киткән фатирҙан 1985 йылғы ир ҡотҡарыла. Янғын һүндереүселәр ирҙе төтөн менән ҡапланған бүлмәнән алып сыға һәм полиция хеҙмәткәрҙәренә тапшыра. Янғын тиҙ арала һүндерелә. 112 хеҙмәтенә ваҡытында хәбәр килеү арҡаһында кеше ғүмере ҡотҡарыла.

• Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының янғын-ҡотҡарыу подразделениелары иртәнге 5:52 сәғәттә Учалы ҡалаһының Энергетиктар урамындағы автосервиста янғын сығыуы тураһында хәбәр ала. Министрлыҡтың матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, утты һүндереүгә бөтәһе 30 кеше һәм 11 берәмек техника йәлеп ителә, һәләк булыусылар һәм зыян күреүселәр юҡ.

## БӘЛӘ - АЯҠ АҪТЫНДА

# ЙОҠА БОҘ ХӘҮЕФЛЕ

**Һыу ятҡылыҡтары һәм йылғалар туңды. Йоҡа боҙ хәүефле булыуын иҫтә тоторға кәрәк. Балалар һәм ҡышҡы балыҡ тотоу менән мауығыусыларҙың уйламайынса эш итеүе йыш ҡына күңелһеҙ эҙемтәләргә килтерә. Үҙ ғүмерегеҙҙе ҡурҡыныс аҫтына ҡуймаҫ өсөн түбәндәге ҡағиҙәләрҙе үтәргә кәрәк:**

❖ "Сығыу тыйылған" тигән иҫкәртеү аншлагтары ҡуйылған урындарҙан һаҡланығыҙ. Бындай билдәләр айырыуса хәүефле зоналарҙа ҡуйыла, унда боҙ бик йоҡа.

❖ Боҙға уның ҡалынлығы 10 сантиметрға еткәненә ышанғанда ғына сығырға мөмкин.

❖ Боҙҙоң ныҡлығын уның төҫө буйынса ла билдәләргә мөмкин. Әгәр боҙ зәңгәр булһа, ул ныҡ, әгәр аҡ булһа, ныҡлығы ике тапҡырға кәмерәк, әгәр тоноҡ аҡ йәки һарғылт булһа, ышанысһыҙ. Әммә боҙ ҡатламының ныҡлығына тулыһынса ышаныр өсөн уны тикшереү яҡшыраҡ. Быны тик оҙон таяҡ менән генә эшләргә мөмкин, аяҡ менән тибеп түгел.

❖ Һыу ятҡылығын төркөм менән үткәндә бер-берегеҙҙән 5-6 метрҙан кәм булмаған араны һаҡлағыҙ.

**Балыҡсыларға белергә кәрәк:**

❖ Балыҡ тоторға барыр алдынан һауа торошо менән танышығыҙ: ҡар яуыуы, томан, ел көсәйгәндә һәм башҡа насар һауа торошо күтәрелгәндә боҙға сығыу бик хәүефле.

❖ Балыҡҡа барыр алдынан кеҫә телефонын зарядлағыҙ, туғандарығыҙға һәм яҡындарығыҙға ҡайҙа балыҡ тоторға ниәтләүегеҙҙе һәм ҡасан өйгә ҡайтыуығыҙҙы иҫкәртергә онотмағыҙ.

❖ Балыҡ тотоу кәрәк-яраҡтарынан тыш, ҡотҡарыу жилетын, осло нәмә (бысаҡ, багор, эре ҡаҙаҡтар) алырға кәрәк, әгәр боҙ ҡапыл ватылһа, боҙға беркетер өсөн осонда ауырлыҡ ҡуйылған 20-25 метр тирәһе арҡандың да кәрәге тейеүе ихтимал. Йөк зыян күреүсегә арҡанды ташларға ярҙам итә, зыян күреүсегә ныҒыраҡ тотонорға ярҙам итеү өсөн элмәк кәрәк.

❖ Балыҡҡа яңғыҙ йөрөмәгеҙ, һеҙҙең эргәлә тәжрибәле балыҡсылар булырға тейеш, улар кәрәк саҡта ярҙам күрһәтә ала.

❖ Бер урында йыйылыу хәүефле. "Коллегалар" араһындағы ара 3 метрҙан, ә соҡорҙар араһындағы ара 5-6 метрҙан кәм булмаҫҡа тейеш.

❖ Мәке диаметры бәләкәй булырға тейеш; тишелгән урындан һыу урғылыуын күрһәгеҙ, ашығыс рәүештә был урындан китегеҙ.

**Әгәр һеҙ боҙ аҫтына ҡолап төшһәгеҙ, нимә эшләргә?**

❖ Паникаға бирелмәгеҙ, киҫкен хәрәкәт яһамағыҙ, көслө тауыш менән ярҙамға саҡырығыҙ.

❖ Ауыр әйберҙәрҙе ташлағыҙ, йөҙөп сығырға тырышығыҙ.

❖ Ҡулығыҙҙы ике яҡҡа һуҙып, аяғығыҙҙы боҙға һалырға һәм икенсе аяғығыҙҙы сығарырға тырышығыҙ.

❖ Боҙ өҫтөнә сыҡҡас, тороп йүгермәгеҙ, аҡрын ғына килгән яҡҡа шыуышығыҙ.

❖ Туҡтамайынса, яҡындағы магазинға, учреждениеға, берәй йылы бинаға барығыҙ.

**Әгәр һеҙҙең күҙ алдында кеше боҙ аҫтына ҡолап төшһә:**

❖ Һыуға батып барыусыға ярҙамға бары тик үҙегеҙҙең белемегеҙгә, күнекмәләрегеҙгә һәм физик мөмкинлектәрегеҙгә ышанғанда ғына барырға кәрәк. Әгәр ышанмаһағыҙ, һеҙ авария тураһында ашығыс хеҙмәттәргә хәбәр итеүегеҙ менән ярҙам итерһегеҙ. Әммә беренсе осраҡта ла тәүҙә ҡотҡарыусыларға шылтыратырға кәрәклеген иҫтә тоторға кәрәк.

❖ Батҡан кеше янына шыуышып ҡына килегеҙ.

❖ Һеҙ ярҙамға киләһегеҙ, тип ҡысҡырығыҙ, был зыян күреүсегә көс, ышаныс өҫтәйәсәк.

❖ Әгәр саңғы йәки таҡта ҡуйыу мөмкинлеге булһа, һеҙгә ҡотҡарыу эштәрен башҡарыу еңелерәк һәм хәүефһеҙерәк буласаҡ.

❖ 3-4 метрҙа уға арҡан, таяҡ, таҡта, яулыҡ йәки башҡа төрлө ҡулдағы саралар бирегеҙ. Һыуға батып барған кеше бирелгән әйберҙе тотоп алғас, артҡа шыуышып, уны тартып алығыҙ.

❖ Ҡулығыҙҙы бирмәгеҙ, көсөргәнеш арттырасаҡһығыҙ һәм ярҙам итеү түгел, үҙегеҙ ҙә уңышһыҙлыҡҡа осраясаҡһығыҙ.

❖ Зыян күреүсегә боҙҙа торорға ярамағанлығын иҫенә төшөрөгөҙ, ул һаҡ ҡына шыуышып сығырға йәки килгән урындан ярға табан тәгәрәп йәки шыуышып барырға тейеш.

❖ Ҡотҡарыу операцияһы ваҡытында һеҙ зыян күреүселәр менән арағыҙҙы даими һаҡларға тейешһегеҙ, уның һеҙгә 1,5-2 метрҙан да яҡыныраҡ килеүенә юл ҡуймағыҙ.

❖ Ярға килеп еткәс, тиҙ арала ашығыс ярҙам саҡырығыҙ һәм уны йылы урынға - магазинға, сауҙа үҙәгенә һ.б. алып барып, ҡайнар сәй эсерергә тырышығыҙ.

❖ Ҡотҡарыусыларға үҙегеҙҙең хәрәкәтегеҙ тураһында хәбәр итергә онотмағыҙ.

❖ Зыян күреүсегә дымлы кейемен сисергә ярҙам итегеҙ, ваҡытлыса уға куртка йәки свитерығыҙҙы бирегеҙ. Әгәр ҡотҡарыу ваҡытында үҙегеҙ ҙә һыуланһағыҙ, зыян күреүсенекен һығып кейҙерегеҙ.

❖ Тәнде ышҡырға, алкоголь ҡулланырға ярамай, киреһенсә, кешегә зыян ғына килтерәһегеҙ!

Әгәр һеҙ һыу объектында бәхетһеҙлек осрағының шаһиты булһағыҙ йәки үҙегеҙ ҙә шундай уҡ хәлгә эләкһәгеҙ һәм ваҡиға тураһында хәбәр итеү мөмкинлеге булһа, шунда уҡ 112 номерына шылтыратығыҙ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Берҙәм ҡотҡарыу номерына хатта сим-картаһыҙ, иҫәптә аҡсаһыҙ һәм бикле телефондан шылтыратырға мөмкин.

**Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығы Бөрө районының Луч ауылы эргәһендәге Үҙәт күлендә 500-ләп һарыҡтың 200-ҙән ашыуының һыуға батыуы тураһында хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, урындағы фермер хужалығы көтөүсеһе һарыҡтарҙы туңған күл аша ҡыуып сығарған ваҡытта боҙ уйылып китеп, һарыҡтар һыуҙа ҡала. Кешеләрҙән бер кем дә зыян күрмәй.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 декабрь "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+

**20 - 25 декабрь "Аҡ ҡанатлы хыялым"** (А.Симуков, Р.Насибуллина инсц. Ф. Ғарипов), әкиәт. 6+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 декабрь "Золушка"** (Ш. Перро, М.Күлбаев), әкиәт. 10:00 һәм 12:00. 0+

**19 - 21 декабрь "Оҙон ҡолаҡтың Яңы йыл мажаралары",** әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 6+

**20 һәм 21 декабрь "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А. Пушкин, О. Мусина), әкиәт. 10:00 һәм 12:00. 6+

**22 декабрь "Зимняя небылица",** музыкаль әкиәт. 09:30, 11:00, 13:00 һәм 17:00. 6+

**22 декабрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский, Р. Хәкимов), мюзикл. 10:00 һәм 12:00. 0+

**23 һәм 24 декабрь "Две Бабы-яги"** (Р. Сеф, Т. Карелина, М.Күлбаев), әкиәт. 10:00 һәм 12:00. 0+

**23 декабрь "Оҙон ҡолаҡтың Яңы йыл мажаралары",** әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 6+

**24 декабрь "Оҙон ҡолаҡтың Яңы йыл мажаралары",** әкиәт. 09:00,11:00, 13:00 һәм 15:00. 6+

**25 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәкимов), мажаралы ваҡиға. 10:00, 12:00 һәм 14:00. 6+

**25 декабрь "Зимняя небылица",** музыкаль әкиәт. 11:00, 13:00 һәм 15:00. 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19 декабрь "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов).12:00. 0+

**19 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 19:00. 0+

**20 һәм 21 декабрь "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 10:30. 0+

**20 һәм 21 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 12:00, 15:00 һәм 18:00. 0+

**22 - 25 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 10:00, 12:00, 15:00 һәм 18:00. 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 - 25 декабрь** Балалар өсөн Яңы йыл байрам сараһы. 11:00 һәм 13:00. 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**19 - 25 декабрь "Снежная Королева"** (Г.Андерсен, Р.Ғәйнуллина), әкиәт. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**19 декабрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 12+

**21 декабрь "Ҡар Батшабикәһе"** балалар өсөн Яңы йыл сараһы. 0+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**22 - 25 декабрь "Переполох в мире елочных игрушек"** Яңы йыл әкиәте. 0+

### БР Милли музейы

**23 декабрь "Экскурсия в темноте по залам музея"** интерактив экскурсия. 16:00. 6+

**24 декабрь "Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы көнө"** диктант һәм өҫтәл уйыны. 11:00 - 17:00. 6+

**25 декабрь "Урманда ҡышҡы хәлдәр"** интерактив экскурсия. 15:00. 6+

✓ *Белеүегеҙсә, фильм 1944 йылда Учалы районынан дүрт йөҙ илле баш һыйырҙы фашистарҙан азат ителгән Украинаға ҡыуып алып барып, күп кешене аслыҡтан ҡотҡарған үсмерҙәрҙең ҡаһарманлығына арнала.*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# "ФӘРЗӘНӘ КӨНБАЙЫШҠА БАРА"



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Мәҙәниәтте һәм сәнғәтте үҫтереү мәсьәләләре буйынса советта ҡатнашыусы мәҙәни йәмәғәтселек вәкилдәре һәм журналистар Өфөнөң "Родина" кинотеатрында "Фәрзәнә көнбайышҡа бара" хәрби-патриотик фильмдың ябыҡ премьераһына йыйылды.**

Белеүегеҙсә, фильм 1944 йылда Учалы районынан дүрт йөҙ илле баш һыйырҙы фашистарҙан азат ителгән Украинаға ҡыуып алып барып, күп кешене аслыҡтан ҡотҡарған үсмерҙәрҙең ҡаһарманлығына арнала. Элегерәк был тема бер нисә башҡорт авторҙарын илһамландырған булған. Ә был фильмдың сценарийын ана шул баҫылып сыҡҡан материалдарға таянып, журналист, драматург Баныу Ҡаһарманова яҙған һәм Рәсәй хәрби-тарихи ойошмаһының ыңғай рецензияһын алған.

Фильмдың режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Булат Йосопов проекттың бик ҡатмарлы булыуы хаҡында һөйләне. Сөнки бында Ворошиловград (хәҙерге Луганск), Сталинград (Волгоград), украин утарҙары, башҡорт ауылдары телгә алына. Төрлө хәл-шарттарҙа фильм геройҙарының характеры асыла, үҙ-ара мөнәсәбәттәре үҫешә. "Минең өсөн тормоштоң бөтә мәғәнәһе - ошо тарихта: кеше, Фәрзәнә кеүек, үҙен уратып алған мөхиттән сығып ҡасып, донъяны танып белә башлай, тормошҡа өмөтө әҙәлә. Минең өсөн уның күңелендә, аңында йәшәгән кешенең тылдағы бөтә ҡатмарлы хәлдәрҙә лә яҡшылыҡ яғында ҡалыуы мөһим ине. Беҙ был образ йәштәр өсөн ҡыҙыҡлы булһын өсөн тырыштыҡ", - тип билдәләне Булат Йосопов.

Төп ролдә Өфө уҡыусыһы, республикала билдәле актерҙарҙың ҡыҙы Әминә Сәлмәнова башҡара. "Был минең кинолағы тәүге ролем. Мин ошо юлды үттем һәм бирешмәнем, шуның өсөн үҙемә рәхмәтлемен. Ролгә инергә һәм унан сығырға өйрәнергә тура килде. Беҙ иртәнән башлап төнгә тиклем эшләнек, еңелдән булманы, әммә мин процестан ҡәнәғәтлек алдым", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Әминә.

Шәүрә Сәғитова ижад иткән сифатлы музыка фильмдың милли колоритын асыҡ сағылдыра. Композитор шулай уҡ фильмда бер нисә башҡорт йырын башҡара.

"Башҡортостан" киностудияһы директоры Юнир Әминев әйтеүенсә, Махсус хәрби операция барған осорҙа фильмдың экранға сығыуы бик актуаль. "Беҙ Донецк, Луганск республикаларына ярҙам итәбеҙ, гуманитар ылау йыйабыҙ. Атай-олатайҙарыбыҙ Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ярҙам итһә, беҙ хәҙер көнсығыш Украинала йәшәгән ватандаштарыбыҙға ярҙам күрһәтәбеҙ. Әлеге фильм өҫтөндә ике йылдан ашыу эшләнек, күпселек кадрҙарҙы "Башҡортостан" киностудияһы павильонында төшөрҙөк, компьютер графикаһын һәм яһалма интеллектты файҙаландыҡ, - тине Юнир Әминев.

**Ләйлә Аралбаева**

# КИТАПҠА ХӨРМӘТ...

**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенең фирма магазинында авторҙары Эльмира Хәйретдинова һәм Илнур Сәлихов булған "Китап һөйөүселәр" ("ПоЧитатели книг") проекты сиктәрендә үҙенсәлекле сара уҙҙы.**

"Яҙ, яҙ, яҙ килә...", "Нисек барһың, тик шулай бул..." был йырҙар күптән инде һәр кемгә таныш, күңелдәрҙә айырым урын биләп тора. 11 декабрҙә "Китап" кибет ҡунаҡтары тап ошондай билдәле йырҙарҙы башҡарыусылар: "Бүреләр" төркөмө солисы Илшат Абдуллин, Рөстәм Ғиззәтуллин, Лиана Хәбибуллина, "ДәрүишХан" төркөмө солисы Ринат Зарипов менән йылы осрашыуҙа ҡатнашып, йырҙар тыңлап ҡайтты. Артистар үҙҙәренең тормошона ниндәй китаптар йоғонто яһаүы, иҫтәлектәре, фәһемле фекерҙәре менән бүлеште. "Үҙ-үҙенә ышанырға һәм хыялыңа тоғро ҡалырға кәрәк. Китаптарҙан алған мәғлүмәтте үҙеңдең тәжрибәңә өҫтәйһең. Һәр кеше уҡыусыһы була ала, уны тыңлай һәм ишетә белеү генә мөһим", - тип әңгәмә аҙағында йәштәргә кәңәш бирҙе Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Рөстәм Ғиззәтуллин.

Ҡыҫҡаһы, был яңы проекттан һәр кем үҙенә файҙа тапты: уҡыусы, студент кеүек йәш ҡунаҡтар билдәле шәхестәрҙең үҫеш юлы тураһында һөйләгәнен тыңлап, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын биреп, кәңәштәренә ҡолаҡ һала алһа, олораҡтар хәҙер инде һәр кем һүҙҙәрен яттан белгән йырҙарға ҡушылып йырлап, йәшлектәрен иҫкә төшөрөп, күңел асты. Әйткәндәй, иң ҡыҙыҡлы һорау биргәндәр бағыусыларҙан иҫтәлекле бүләктәр алыуға ла ирешә.

**Алһыу ИРГӘЛИНА**

# ЯҢЫ ТАЛАНТТАР АСЫЛА

**Башҡортостанда "Театрал Волга буйы" ("Театральное Приволжье") фестиваленең төбәк этабы еңеүселәрен иғлан иттеләр. Финалистарҙы бүләкләү тантанаһы Өфө балалар филармонияһында үтте.**

"Фестиваль йыл һайын күберәк ҡатнашыусылар йәлеп итә, ҡыҙыҡлы спектаклдәр тәҡдим итә һәм яңы таланттар аса. Тап "Театрал Волга буйы" кеүек инициативалар арҡаһында театр йәшәй, үҫешә һәм тамашасылар күңелендә урын ала", - тип ҡатнашыусыларҙы сәләмләне Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Салауат Кирәйев. Башҡортостан Республикаһының Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе Алмас Әмиров фестивалдең яңы таланттар асыу һәм ҡатнашыусыларҙың профессиональ оҫталығын арттырыу өсөн бик мөһим булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

"Йәштәр спектаклдәре" категорияһында I дәрәжә лауреаты дипломы "Башҡортостан" дәүләт концерт залы БР Дәүләт бюджет мәҙәниәт ойошмаһының "Лики" театр коллективына тапшырылды. "Балалар спектаклдәре" категорияһында I дәрәжә лауреат дипломы менән Стәрлетамаҡ ҡалаһы "Сода" мәҙәниәт һарайының "Этюд" вокал-театр оҫтаханаһы бүләкләнде. Коллективтар "Театрал Волга буйы" фестиваленең округ этабында республика исеменән сығыш яһаясаҡ.

"Театрал Волга буйы" - Волга буйы федераль округында Рәсәй Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров инициативаһы буйынса булдырылған ижтимағи проект. Быйыл Башҡортостандың 28 районы һәм 14 ҡалаһынан 1700 ашыу артистан 120 ашыу заявка ҡабул ителде.

# ТАПҠЫРҘАР ШАЯРТА БЕЛӘ

**Өфөлә Башҡорт теле көнөнә арналған ҙур КВН фестивале үткәрелде. Башҡорт асыҡ КВН лигаһының баш мөхәррире Урал Кәримов хәбәр итеүенсә, фестивалдә республиканың төрлө райондарынан 10 иң яҡшы мәктәп һәм йәштәр командаһы ҡатнашты.**

Башҡорт асыҡ КВН лигаһының ҙур һәм бәләкәй кубогы, шулай уҡ "Һәнәк" журналының махсус призы уйнатылды. Урал Кәримов һүҙҙәренсә, фестиваль йәштәрҙең заманса юморын, йолаларын һәм туған телгә һөйөүен берләштергән сағыу байрамға әйләнде Бынан алдараҡ Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев һәләтле йәштәрҙең КВН аша оло тормошҡа юллама алыуы тураһында әйткәйне. "10 йыл самаһы элек, Өфөнөң йәштәр эштәре буйынса комитетында эшләгән сағымда, баш ҡала КВН-ын тергеҙеү менән шөғөлләндек, миненсә, маҡсатыбыҙға өлгәштек. Беҙҙең команда Юғары лигала ҡатнашты, Беренсе каналда сығыш яһаны, тәжрибә тупланы. Шул ваҡытта мәктәп йәшендәге балаларҙы, студенттарҙы һәм эшсе йәштәрҙе үҙ эсенә алған йәйге кубок булдырылды. КВН күптәр өсөн мауығыу ғына түгел, ул йәшәү рәүеше лә. Бында йәштәр оло тормошҡа юллама ала. Республиканың ике командаһы үҙәк лигаларҙа уйнай, мәҫәлән, нефтекамалар Премьер-лигала яҡшы сығыш яһаны. Беҙ һәр ваҡыт уларҙың федераль кимәлдә лайыҡлы сығыш яһауына иҫәп тотабыҙ", - тине Урал Килсенбаев (12+).

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУЛЫҢ МЕНӘН БИР, аяғың менән эҙлә

Үҙенә үҙе хужа булмаған бөтәһенә лә хужа булырға тырыша.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тоттормай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.

**(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).**

Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.

**(Б. Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән: "Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр", - тигән.**

**Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйында ябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" - тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?"**

**- Йәш сағыма мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миндә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңдә бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр.**

**Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" - тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам".**

**- Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә нәфрәтләнәләр. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың...**

**Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти:**

**- Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдә саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туктап торорға теләмәҫ. Шуның өсөн һинең тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңде лә күрерһең.**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп, ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлаған була..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 18.12.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 18.12.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 19.12.2025 й.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 2345

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.